ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

1-7 март (буранай) 2024

№8 (1101)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

## Егеттәр - ысын геройҙар



6

## Баҡсасы малай...



булаçаҡ һөнәренә юл яра булыр

7

## Иртә өйләнгән...

улынан, ҡыҙынан кинәнгән



8-9

## Зыян килтермәй генә...

матурлыҡҡа һоҡланһын ҡунаҡтар!



12

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы дуҫтарыбыҙҙы 2024 йылдың икенсе яртыһы өсөн дә баҫмабыҙға ваҡытынан алда 873 һум 12 тингә яҙылып ҡуйырға саҡырабыҙ. Ә 1 апрелдән, гәҙәттәгесә, почта хаҡтарҙы тағы арттырасаҡ икәнен дә белеп ҡуйығыҙ. Ошо арауыҡта гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Һеҙҙең ғаиләлә кем баш, кем муйын? Әллә был ҡағиҙә инде иҫкергәнме? Ғөмүмән, нисек билдәләйһегеҙ ир менән ҡатын бурыстарын?




***Асия ЗӘКИРЙӘНОВА, Башҡортостан Милли музейының экскурсиялар бүлеге мөдире:*** Ғаиләә ҡорғаныбыҙға былтыр көҙ 33 йыл булды. Тормош иптәшем республика Эске эштәр министрлығында эшләй, полиция подполковнигы. Ике ҡыҙыбыҙҙы тәрбиәләп үҫтереп, оло тормош юлына аяҡ баҫтырҙыҡ, улар икеһе лә медицина өлкәһен һайланы. Артабан да яҙмыш бәхеткә тулы оҙайлы йылдар бүләк итер, тип өмөт итәм.

"Ир - баш, ҡатын - муйын" мәҡәле беҙҙең ғаилә өсөн тура килә, тип әйтер инем. Өс тиҫтәнән ашыу бергә йәшәү дәүерендә шатлығы ла, әсесөсөһө лә булды. Өйләнешеп йәшәй башлаған йылдары һәр кемебеҙ үҙенең һүҙен һүҙ итергә тырышты, үҙенекен алға ҡуйҙы, икебеҙҙең дә мин-минлелек булды. Бындай мәлдәрҙә йәштәргә яйлы ғына итеп тормош айышына төшөндөрөп ебәреүсе ололарҙың булыуы йәш ғаиләне тарҡалыуҙан һаҡлап алып ҡалыусы ҡалҡандарҙың береһе. Тауыш-маҙар ҡупһа, ҡайным мәрхүм иремә: "Ғаиләлә килендең званиеһы юғарыраҡ!" - тип мине яҡлашыр ине. Килен булып төшкән йортта яҡлаусым барлығын күреп, күңел ireп китә, үҙемде ышаныслыраҡ тоя башлайым. Ирем дә минең яҡлы булған атаһын күреп, бер аҙ һыуына төшә. Шулай итеп, ҡайным шаяртыулы-ҡәтғи һүҙе менән беҙҙең арала башланып ҡына торған низағты ябып та ҡуя.

Атайым менән әсәйем дә төртмә телле, шаян кешеләр булды. Кинәйәле генә итеп апайым менән миңә тормош ҡанундарын аңғартып ҡуйырҙар ине. Атайым: "Ҡыҙыҡайҙар! Ир кешегә бер яҡшы һүҙ ҙә етә. Йомшаҡ телле булһағыҙ, ана, Сәүиә әбей ише, бесән сапмай, сәйнүк тотоп ҡына йөрөрһөгөҙ", - тигән булып шаяртып, әсәйемдең ҡырыҫлығына төрттөрөп ҡуйыр ине. Ысынлап та, эргәлә генә Сәхәү бабай менән Сәүиә әбейҙең бесәнлектәре булды. Бер ҡасан да Сәүиә әбейҙең ҡулында салғы-тырма күрмәнек, ул бөтмәҫ хәбәрен һөйләп, бабайы артынан эйәреп, уны күтәрмәләп тик йөрөр ине. Әләнән-әле сәйнүген яңыртып, тәмле итеп өҫтәл әҙерләп, бабайын һыйлап ҡына торҙо. Сәхәү бабай ҙа әбейенең иғтибарынан ireп, бесәнде геү килтереп эшләп ташлар ине.

Мин дә йылдар үтә торғас, атайымдың һүҙен тотоп, иремдең эшен маҡтай башланым, күтәрмәләп торҙом. Һәм, ысынлап та, был ысул бик яҡшы эшләй икәнлеген аңланым - иремдең күңеле күтәрелеп китә, тағы ла дәртләнеберәк эшләй башлай. "Арттырып та ебәрәһең инде, Асия, мине ҡупайтаһың бит", - тип көлә үҙе. Бына бит ул йылы һүҙ көсө.

Ир менән ҡатын бурыстарына килгәндә, улар электән үк билдәле. Ирҙәрҙең фәҡәт ҡатын-ҡыҙҙар ҡулына ғына килешле эштәргә ҡыҫылмауы хуп, ҡатынға ла көслө заттың ғына хәленән килерлек донъяуи бурыстарҙы үҙ иңенә йөкмәүҙән азат булырға кәрәк. Ҡатын-ҡыҙҙың нәфислек, гүзәллек өлгөһө булып, ғаилә усағының утын һүндермәйенсә, өйгә ҡот биреп йәшәүе мөһим. Ә ир-аттың ғаиләһе өсөн яуаплылыҡ тойоп, балаларына атай һәм ир өлгөһө булып йәшәүе шарт.

БАШ ҠАЛАМ

# ЯҘМЫШЫМ ҺИҢӘ БӘЙЛЕ...

**Өфөлә йәшәгәс, баш ҡалала барған үҙгәрештәр шунда уҡ күҙгә ташланып-күренеп тора. Ә улар, әйтергә кәрәк, ярайһы ғына.**

Өфө ҡәлғәһенең 450 йыллыҡ оло юбилейын ҡаршы алырға йыйынған баш ҡалабыҙ үҙенсәлекле булыуы менән айырылып тора. Миллионлап халыҡ йәшәгән ҡала булһа ла, ул нисектер ыҡсым ғына. Үҙәктә йөрөгәндә мотлаҡ берәй таныште осратаһың, хатта өфөләр үҙҙәре үк күптәнге таныштар һымаҡ күңелгә яҡын.

Өфө лайыҡлы рәүештә "йәшел ҡала" исемен йөрөтә. Ысынлап та, баш ҡала урамдарын йәмләп ултырған ағастар, ҡуйы урманлы парктары һәр кемдең йөрәгенә яҡын. Ҡайһы берҙә интернет киңлектәрендә урамдағы ағастарҙың ҡырҡылыуына бәйле хәүефләнеүҙәрҙе уҡыйым. Ләкин, минеңсә, был урынһыҙ. Ағастар мәңгелек түгел, улар ҙа яңыртыуҙы талап итә, шуға күрә ҡала хакимиәтенең иҫке ағастарҙы ҡырҡыуҙарын хуплайым. Мәҫәлән, Октябрь революцияһы урамындағы йәшәрен йәшәгән ағастар урынына яңылары ултыртыласаҡ, тип уҡыным. Әлеге ваҡытта бында 200-ҙән ашыу ағас үҫә һәм уларҙың уртаса йәше 70-те уҙған. Уларҙың урынына 600 төптән ашыу йәш ағас үҫентеләре ултыртыласаҡ, тип хәбәр иттеләр. Был бит бик яҡшы, оҙаҡламай улар ҙурайып, урамды йәшеллеккә төрөндөрөп үҫеп ултырасаҡ. Иң мөһиме, был башланғыс һүҙҙә йәки ҡағыҙҙа ғына ҡалмаһын.

**(Дауамы 2-се биттә).**

12+

***✓ Әллә айырылышып яңынан ҡауышыу тәьҫир итте, әллә үҙебеҙгә аҡыл ултырҙы, ғаилә тормошобоҙ хәҙер бик матур. Элек булған аңлашылмаусылыҡтарҙы бөтөрҙөк, кәләшем хатта хыянатты ғәфү итергә үҙендә көс тапты.***



БАШ ҠАЛАМ

## ЯҘМЫШЫМ ҺИҢӘ БӘЙЛЕ...

**(Башы 1-се биттә).**

Былтыр йәй Өфөнөң Ленин һәм Пушкин урамдарында киң ҡоласлы төҙөкләндереү эштәре башҡарылды. Быйыл шулай уҡ Цюрупа, Коммунистик, Карл Маркс урамдарында юлдарға гранит түшәләсәк, мәҙәни мираҫ объекттарының йөҙлөктәре төҙөкләндереләсәк, йәшелләндереү эше башҡарыласаҡ һәм велосипедсылар өсөн махсус юлдар төҙөләсәк, тип көтөлә. Ҡала халҡы өсөн тағы ла мәшәҡәттәр тыуасаҡ, ләкин быларҙың барыһы ла кәрәкле һәм үҙ ваҡытында башҡарыласаҡ эштәр икәнлеген һәр кем яҡшы аңлай. Ҡунаҡ килер алдынан һәр кем үҙ өйөн йыйыштырған кеүек, Өфөбөҙ ҙә төрлө тарафтан йыйыласаҡ ҡунаҡтарын тағы ла матурыраҡ булып ҡаршыларға тейеш.

Спортҡа ҙур иғтибар бүленә Өфөлә. Менделеев урамында яңы асылған физкультура-һауыҡтырыу үҙәген күреп ҡайтырға насип булды. Боҙ һарайы, спорт һәм тренажер залдары, ике бассейны, көрәш өсөн махсус залы булған был комплекстан кеше өҙөлмәҫә көн кеүек асыҡ.

Беләһегеҙме Өфөлә миңә тағы нимә оҡшай? Ҡалалағы ҡайнап торған тормош. Бында һәр кем үҙенә оҡшаған шөғөл таба ала, күңеленә яҡҡан сараларға йөрөргә мөмкин. Ике көнлөк ялдарҙа ғына ла әллә күпме сара уҙа Өфөлә. Шулай февраль ялдарында улыбыҙ өҫтәл теннисы буйынса турнирҙа ҡатнашты, ә беҙ Локотки ауылында уҙған "Кышҡы спорт фестивале"нә барып ял итеп ҡайттыҡ, унан һуң бергәләп "Арт-квадрат" майҙанындағы музейҙа ойошторолған шәп күргәҙмәне барып ҡараныҡ. Барыбыҙға ла бик оҡшаны, "Ғаилә йылы"нда бөтә ғаиләбеҙ менән төрлө сараларға йышыраҡ йөрөргә килештек.

Һәр ҡаланың йөҙө - автобус, тимер юл вокзалдары, аэропорт. Поезд менән килеүселәрҙе яңыртылған тимер юл вокзалы ҡаршы ала. Бында, әлбиттә, башҡараһы эштәр етерлек, шулай ҙа ҡунаҡтар ҡаршы алғанда йөҙгә ҡыҙыллыҡ килерҙәй түгел. Тукталҡа мәсьәләһе ҡырҡыу тора, әлбиттә, ләкин вокзал урынлашҡан урындың бик үҙенсәлекле булыуын иҫәпкә алғанда, быныһына ғына түҙергә була.

Аэропорт та күҙгә күренеп үҙгәрә. Эске авиалиния терминалына барыу өсөн яңы юлдың асылыуын күптән көтә инек, яныраҡ уҡ эшләй башланы. Шулай уҡ аэропорттың эсендәге үҙгәрештәр ҙә ҡыуандыра.

Ә бына Көньяҡ автовокзал хаҡында маҡтау һүҙҙәрен әйтергә телем әйләнмәй, ҡыҙғаныҫҡа күрә. Уҙған быуаттың 80-се йылдарында тороп ҡалған кеүек был урын. Ремонт күрмәгән бина, үҙ эштәрен теләр-теләмәҫ башҡарған кассирҙар, әле булһа түләүле һәм, иң ояты, бысраҡ, һаҫыҡ бәҙрәф - быларҙың барыһы бергә автовокзалды тик алама яҡтан ғына һүрәтләй. Автовокзал кем ҡарамағындалыр, белмәйем, ләкин был хәл тиҙ арала үҙгәреш талап итә.

Гүзәл ҡалам - баш ҡалам Өфөм. Яҙмышым һинең менән бәйле булыуына, һиндә барған үҙгәрештәрҙе күреүемә, һинең тарихыңда миңә лә урын булыуына ғорурланам. Юбилейың менән, Өфөм!

**Рәжәп ФӘТТӘХОВ.**

БЫЛ АЙҘА...

# БАЛАҺЫҘ ҒҮМЕР - ҺҮНГӘН КҮМЕР

**Март тыуа, ергә тағы яҙ килә! " Мартта шарт та шорт" тиһәләр ҙә, буранай атамаһы йөрөтһә лә, барыбер "март" тигәндә иң тәүҙә ҡыйыҡтан тамған тамсылар, епшек ҡарлы юлдар һәм, әлбиттә, фирүзә төҫөнә ингән күк йөҙөнән баҡҡан көләс ҡояш күҙ алдына килә. Дөрөҫ, алда әле ҡыш буйы яуып, ҡалын көрт һалған ҡарҙың итеп бөтөүен, буранайҙың хәтәр боларыуҙары - аҡман-тоҡман, бишҡунаҡ бурандарын имен-аман үткәреп ебәреү кәрәк.**

Һәм, ғөмүмән, астрономик яҙ 20 март - яҙғы көн тигеҙләнешенән һуң ғына башлана (Наурыз байрамы). Рәсәй Гидрометүҙәктең ғилми етәксеһе Роман Вильфандтың быйылғы мартҡа күҙаллауҙары ла шуны раҫлай кеүек. Март - ҡышҡы ай әле, ти ул һәм был осорҙа һауа температураһы ҡарҙың мульлығына бәйле, шунлыҡтан термометр бағанаһында кисҡен үҙгәрештәр булып алыуы бер ҙә ғәжәп түгел. Синоптик фаразлауынса, Урал, Волга буйы һәм Себерҙә йәшәүселәр март баштарында, айырыуса төндәрен 25-30 градус, көндөҙ иһә минус 9-14-тән минус 4-8 градусҡа тиклем тирбәлештәргә лә әҙер булырға тейештәр. Ҡар ҡатламы айҙың өсөнсө ун көнлөгөнә шәпләп ирей башлаясаҡ, ти метеорологтар.

Юрағандары юш киләме, юҡмы - уларҙың үҙ ҡағиҙәһе, ә бына беҙҙең өсөн йылдар буйына күнегелгән йәшәйешебеҙ ҡағиҙәһе буйынса март тыуыуы - үҙе байрамға тин: сәскә магазиндары, баҙар тирәһенән мимоза, роза, хризантема еҫтәре аңҡый. Эйе, нимә генә тимә, март көләс, ҡояшлы ай ул; сибәрҙәр, уңғандар, изгелекле һәм йомарттар - әсәйҙәр, әләсәйҙәр, һеңелдәр-апайҙар, килендәр-кәләштәр, еңгәләр байрамы менән башланып киткәнгәләр, ул, күрәһең. Шуныһы үкенес: 8 март кеүек тулҡынландырғыс байрам йыл эсендә ни бары бер генә көн шул, шуға ла, бәлки, танһыҡ һәм күңелгә яҡындыр. Ләкин, 8 март тойғоһо көн дә килмәгән кеүек, һәр ҡатын-ҡыҙға ла ул, билдәле хәлдәргә бәйле, байрам ҡыуанысы түгел, ә бәхетле мәлдәр иҫтәлеге, һары һағыш булып киләләр - Хоҙай Тәғәлә ҡайы-

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**?**

## *Һеҙҙең ғаиләлә кем баш, кем муйын? Әллә был ҡағиҙә инде иҫкергәнме? Ғөмүмән, нисек билдәләйһегеҙ ир менән ҡатын бурыстарын?*

***Рәмис МОРАТШИН, завод хеҙмәткәре, Өфө ҡалаһы:*** Кәләш менән студент йылдарында өйләнештек. Ул замандарҙа 1-се һәм 2-се курстарҙы картуф сүпләргә тип Өфөгә яҡынтирә баҫыуҙарға ебәрерҙәр ине. Шунда тоҡанды ла инде мөхәббәт уты һәм 2-се курс башында өйләнешеп тә ҡуйҙыҡ. Дипломға ҡушып, 3 йәшлек малай ҙа алып сыҡтыҡ вуздан.

Бөгөнгө көн күҙлегенән ҡарағанда, хәҙерге аҡыл буйһа, бәлки, өйләнешмәгән дә булыр инек, тип уйлайым. Беренсенән, икебеҙҙең дә атай-әсәйҙәр ни өсөндөр беҙҙең һайлағанды ҡабул итә алманы һәм ваҡытлы-ваҡытлы менән былай ҙа тыныс булмаған тормошобоҙға ҡуҙ өҫтәп торҙо. Икенсенән, икебеҙҙең дә холоҡтар ауыр икәнлеге асыҡланды, һәр беребеҙ "баш" ролендә булырға тырышты. Кәләш күберәген көсөн карьера эшләүгә йүнәлтте, миңә һәм малайға әллә ни наҙ бирмәне. Мин ситкә йөрөштөрҙөм. Ғөмүмән, ике яҡлап та ғаиләне ныҡытыуға түгел, ә уны тарҡатыуға алып килгән аҙымдар эшләнек. Шулай ҙа ниндәйҙер көс менән бергә ҡала килдек, ҡыҙыбыҙ тыуҙы. Берсә йәйланып һөлмәк кенә аҡҡан, берсә вулкан һымаҡ бөтә тирәяҡты дер һелкеткән тормошта 20 йылдан ашыу йәшәгәндән һуң, айырылыштыҡ. Ләкин бер аҙ айырым йәшәгәс, кире ҡауыштыҡ, өсөнсө балабыҙ тыуҙы.

Әллә айырылышып яңынан ҡауышыу тәьҫир итте, әллә үҙебеҙгә аҡыл ултырҙы, ғаилә тормошобоҙ хәҙер бик матур. Элек булған аңлашылмаусылыҡтарҙы бөтөрҙөк, кәләшем хатта хыянатты ғәфү итергә үҙендә көс тапты һәм бер ҡасан да был хаҡта иҫкә алмай. Хәҙер кем баш, кем муйын темаһына ла бәхәс ҡупмай, барыһын да уртаға һалып һөйләшәбеҙ ҙә, нисек унайлыраҡ, шулай эшләйбеҙ. Әйткәндәй, нисә йыл үткәндән һуң атай-әсәйҙәрҙәрҙең дә ҡарашы үҙгәрҙе, хәҙер "килен", "кейәү", тип өҙөләп торалар.

Ғаилә бурыстары мәсьәләһенә ҡарата ла бәхәстәр тыумай. Аныҡлап әйткәндә, ул турала бөтөнләй һүҙ ҡуйыртмайбыҙ. Тура килһә, мин ашарға бешерәм, һауыт-һабаны ла йыуып ҡуям, мәктәпкә йыйылыштарға ла йөрөйөм. Хәҙер ҡыҙыҡ күренһә лә, ваҡытында беренсе малайҙың йыйылыштарына йөрөүҙе ҡатын-ҡыҙ эше, мин бармайым да, йөрөмәйем дә, тип яу ҡуптара инем. Кәләш тә хәҙер "мин кухня ҡоло түгел", тигән принцибынан арынып, тәмле итеп аш-һыу әҙерләй.

Икебеҙ ҙә яҡшы килем алабыҙ. Шуны билдәләп үткем килә. Ҡатыным барыбер ҙә үҙенекен һүҙ итеп, үҙе теләгән йүнәлештән тайпылмайынса тырышып эшләп, хәҙер ҙур үрҙәр яуланы. Ваҡытында минең "тырнаҡ игәп аҡса эшләп буламы ни, бар, эшкә урынлаш", тип әрләшкәнемде тыңламайынса, үҙ маҡсатына барыуын дауам итте. Һәм әлеге мәлдә ул үҙенең бер нисә "Матурлыҡ салоны"н асып, уңышлы эшмәкәрлек алып бара. Әгәр ҙә мин элек үк уның башланғысын, ынтылыштарын хуплап, күтәреп, ярҙам итеп торһам, был уңышҡа ул күпкә иртәрәк килер ине, биллаһи.

Кәләшемдең тағы бер ыңғай яғын билдәләп үтмәйенсә булмай. Төрлө саҡтар - эшһеҙ ҡалып йәки алданып аҡсаһыҙ ҡайтып ингән саҡтар йыш булды. Айҙар буйы даими килем алмаған мәлдәрҙә лә йәшәнек. Тик ул бер ҡасан да миңә был мәсьәлә буйынса тәнҡит һүҙе әйтмәне, һәр саҡ "Барыһы ла яҡшы буласаҡ", тип күтәрмәләп торҙо. Бының өсөн уға рәхмәтлемен.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин 2024 йылдың 29 февралендә Рәсәй Федерацияһының Федераль Йыйылышына йыллыҡ мөрәжәғәтнамә менән сығыш яһай. Был хаҡта Кремлдең рәсми сайтында хәбәр ителә. 2023 йылда Президент Федераль Йыйылышҡа 21 февралдә мөрәжәғәт иткәйне.

✓Мәскәүҙә Башҡортостан Башлығының Рәсәй иҡтисади үҫеш министры Максим Решетников менән осрашыуында Өфө районында һәм Салауатта "Алға" сәнәғәт-производство тибындағы махсус иҡтисади зона майҙандарын киңәйтеү мәсьәләләре ҡаралды. Улар шулай уҡ Сибай - Подольск - Новорудная тимер юл тармағын төҙөү проекты тормошҡа ашырыу барышын, шулай уҡ 2024 йылдың көҙөндә Өфөлә үтергә тейешле Рәсәй менән Ҡаҙағстандың XX төбәкара хеҙмәттәшлек форумына әҙерлектә тикшерҙе.

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин Ленинград һәм Мәскәү хәрби округтарын яңынан тергеҙҙе. Документҡа ярашлы, Мәскәү хәрби округы составына Ярославль, Тула, Тверь, Тамбов, Смоленск, Рязань, Орел, Түбәнге Новгород, Липецк, Курск, Кострома, Калуга, Иваново, Воронеж, Владимир, Брянск, Белгород һәм Мәскәү өлкәләре, шулай уҡ Мәскәү инде. Ленинград округы составында - Карелия һәм Коми республикалары, Ненец автономиялы округы, Псков, Новгород, Мурманск, Калининград, Вологда һәм Ленинград өлкәләре. Донецк һәм Луганск халыҡ республикалары, Запорожье һәм Херсон өлкәләре Көньяҡ хәрби округы составына инде.

✓2023 йылда Башҡортостанда тренер-уҡытыусылар бер тапҡыр бирелә торған 1 миллион һум аҡса алды, тип хәбәр итте республиканың спорт министры Руслан Хәбибов. Һүҙ ауыл еренә эшкә ҡайтҡан 55 уҡытыусы хаҡында бара. Быға "Ауыл тренеры", шул иҫәптән штаттағы физкультура һәм спорт хеҙмәткәрҙәрен арттырыуға йүнәлтелгән программа ярҙамында өлгәшелде. 2020 йылдан 2023 йылға тиклем проект буйынса 103 ауыл тренерына 600-әр мең һумлыҡ ярҙам күрһәтелде. Күптән түгел республикала "Кала тренеры" программаһы ла старт алды.

*✓ Ҡайһы бер йәш ғаиләләр беренсе тапҡыр һүҙгә килешкән осраҡта ла "холоҡтар тап килмәй", тип айырылышыу тураһында уйлай башлай. Бер-береңде тыңларға, аңларға өйрәнеүҙән башлана ла инде ныҡлы ғаилә тормошо.*





лағы әсәләргә, килендәргә сабырлыҡтар бирһен...

Тик бына донъя тәгәрмәсе үҙ яйына тәгәрәүен белә, уға һис бер ниндәй ҡаршылыҡ юҡ: яҙ килә, тормош ҡышҡы йоҡонан уяна. Кеше йәшәйешен дауам итеүсе яңы ғүмерҙәргә йән биреүсе - ул, әлбиттә, ғаилә. Халҡыбыҙ борон-борондан ғаилә традицияларына һәм ҡиммәттәренә тоғро ҡалған, сөнки донъябыҙ асылына мәғәнә биреүсе һәм бөтөн яҡшылыҡтың, изгелектең төп сығанағы - ғаилә икәнен борондан яҡшы аңлағандар. Әйткәндәй, был айҙың иң тәүге көнө Башҡорт ғаиләһенә бағышлана бит! Ҡағиҙә булараҡ, башҡорт ғаиләләренең иң төп бурысы - татыу, мул тормошта милләтебеҙгә аҡыллы һәм мөмкин тиклем күберәк балалар тәрбиәләп үҫтереү. Һуңғы ун йыл эсендә Башҡортостанда күп балалы ғаиләләр һаны 27 процентҡа артты, беҙҙә 59 меңдән ашыу күп балалы ғаилә йәшәй. Был Волга буйы федераль округында - беренсе һәм Рәсәйҙә 7-се урын, тип белдергәйне бынан йыл самаһы элек республика Премьер-министры Андрей Назаров. Ошо һан эсендә күпме башҡорт ғаиләһе барҙыр һәм уларҙың тормош кимәле ниндәйҙер - быныһы беҙгә мәғлүм түгел.

Билдәле булыуынса, башҡорт ғаиләһе хәле, балалыҡ, ҡатын-ҡыҙ, йәштәр, шулай уҡ милләт генофонды темалары Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының 1-се һәм 2-се йыйындарының көн тәртибендә үҙәк мәсьәләләр булараҡ ҡарала ине. Шул йылдарҙа иңенә Ҡоролтайҙың Башҡарма комитеты рәйесе вазифаһын йөкмәгән арҙаҡлы ғалимыбыҙ, академик Нияз Мәжитовтың башҡорт демографияһы, милләтебеҙ яңырыуы, йәмғиәткә кәрәкле, халыҡ мәнфәғәтен күҙҙә тотоусы алдынғы ҡарашлы милли интеллигенция вәкилдәре тәрбиәләүҙә ғаиләнең әһәмиәте, күп балалы башҡорт ғаиләләрен яҡлау һәм арттырыу тураһындағы төплө, дәлилле сығыштары, ул йылдарҙан алып сирек быуаттан ашыу ваҡыт үтеүгә ҡарамаҫтан, тап бөгөнгө көнгә төбәлгәндәй, күп йылдарға программа булып тора. Ҡоролтайҙың артабанғы йыйындары ла ишле ғаиләләр һанын арттырыу бурысын халыҡҡа еткереү буйынса үҙ һүҙен әйтә барыр, моғайын. Әйткәндәй, быйыл илдә Ғаилә йылын иғлан итеү традицион ғаилә ҡиммәттәрен һаҡлау, үҫтереү бурысын ҡуя. Был йәһәттән башҡарыла торған эштәр шаушоу рәүешендә ғаилә конкурстары үткәреү менән генә сикләнергә түгел, бәлки, һәр бер ғаилә мәнфәғәтен хәстәрләү, шул маҡсаттарҙа урындарҙағы башҡарма власть органдарына аныҡ бурыстар йөкмәтеү һәм уны контролдә тотоуҙы бурыс итеп ҡуялыр. Иң мөһиме, Ғаилә йылы беҙгә именлек, бәрәкәт һәм ишле балалар алып килһен ине, тип теләйек.

Календарҙағы тағы бер көн иғтибарҙы йәлеп итә: ул да булһа, Кеше хоҡуҡтары һәм ҡорбандарҙың кешелек бәҫен тупаҫ боҙоу менән бәйле хәҡиҡәт булдырыуға халыҡ-ара хоҡуҡ көнө **(24)**. Был көн 1980 йылдың 24 мартында Сан-Сальвадор архиепискобы Оскар Ромероның йәмәғәт ғибәҙәте алып барған ваҡытында үлтерелеүе айҡанлы, БМО Генераль Ассамблеяһы тарафынан 2010 йылда булдырыла. Ромеро кеше хоҡуҡтарын боҙоуға, фәҡирлеккә, социаль тигеҙһеҙлеккә һәм язалауҙарға ҡаршы эҙмә-эҙлекле һәм ҡыйыу рәүештә көрәше менән танылған шәхес була. Уның: "Тауышы бар кеше унан мәхрүм ителгәндәр өсөн дә һүҙ әйтергә тейеш", - тигән ҡанатлы әйтеменә БМО-ның Генераль секретары Антониу Гуттериш: "Хәҡиҡәт уты һүнә икән, ерҙе ҡараңғылыҡ, янауҙар һәм алдыҡ баҫа", - тип яуаплай...

Буранай календарында билдәләнеүсе иҫтәлекле даталар: Башҡорт ғаиләһе көнө, шулай уҡ Граждандар обороһы **(1)**, Халыҡ-ара шырпы **(2)**, Бөтөн донъя яҙыусылар; Ҡырағай тәбиғәт; Балалар телевидениеһы **(3)**, Ҡоралһыҙланыу һәм ҡоралланыуҙы таратмау буйынса Халыҡ-ара мәғрифәт; Теш табибы көндәре **(5)**, Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар; РФ архивтар көндәре **(8)**, Наркотиктарҙы контролләү органдары хеҙмәткәрҙәре көнө **(11)**, Башҡортостандың Ф.Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбленә 85 йыл тулған көн **(11 март 1939 йыл)**, Бөтөн донъя ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау; Исламға ҡарата кире ҡараш менән Халыҡ-ара көрәш көндәре **(15)**, БР (БАССР) Яҙыусылар берлеге ойошторолоуға 90 йыл тулған көн **(15 март 1934)**, Көнкүреш хеҙмәте һәм торлаҡ-коммуналь хеҙмәт эшсәндәре; Масленица **(17)** көндәре, Ҡырымдың Рәсәй менән берләшкән көнө. Ҡырым Республикаһын Рәсәй составына ҡабул итеү тураһында килешеүгә ҡул ҡуйылған көн **(18 март 2014)**, Һыу аҫты диңгеҙселәре; Бөтөн донъя социаль эш **(19)**, Башҡорт Совет Автономияһы тураһында Башҡортостан хөкүмәтенең Рәсәй Совет власы үҙәге менән килешеүгә ҡул ҡуйыуға 105 йыл тулған көн **(20 март 1919 йыл)**; Бөтөн донъя Ер көнө; Халыҡ-ара бәхет; Көн менән төндөң яҙғы тигеҙләнеш **(20)** көндәре, Бөтөн донъя шиғриәт; Халыҡ-ара урман; Халыҡ-ара Наурыз **(21)** көндәре, Һыу ресурстары **(22)**, Туберкулезға ҡаршы көрәш; Кеше хоҡуҡтарын һәм ҡорбандарҙың кешелек бәҫен тупаҫ боҙоуҙар менән бәйле хәҡиҡәт булдырыуға Халыҡ-ара хоҡуҡ көнө **(24)**, Рәсәй мәҙәни хеҙмәткәрҙәр **(25)**, Бөтөн донъя театр **(27)**, Ерҙе һаҡлау **(30)** көндәре.

**Буранайҙа тыуғандар:**

**3 -** физика-математика фәндәре докторы, профессор, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре, А. Леонтьев исемендәге ғилми премия лауреаты **Әхтәр Ғайсинға - 70 йәш** (1954).

**8 -** медицина фәндәре докторы, профессор, 1995-2010 йылдарҙа "Иммунопрепарат" дәүләт предприятиеһының генераль директоры, Рәсәйҙең атҡаҙанған һаулыҡ һаҡлау хеҙмәткәре, Петр Беренсе исемендәге Милли премия лауреаты, Дуҫлыҡ һәм С.Юлаев ордендары кавалеры **Мәхәмәт Алсынбаевҡа - 75 йәш** (1949).

**10 -** Белорет ҡыҙы, билбау көрәше буйынса донъя чемпионы, Рәсәй йыйылма командаһы ағзаһы, халыҡ-ара класлы спорт мастеры **Олимпия Махийәноваға - 20 йәш** (2004).

**24 -** дәүләт эшмәкәре, БР мәҙәниәт министры **Әминә Шафиҡоваға - 50 йәш** (1974).

**30 -** күренекле Рәсәй спортсыһы, йәмәғәт эшмәкәре, "Рәсәйҙең иң көслө кешеһе" турнирында дүрт тапҡыр еңеүсе, пауэрлифтинг һәм армрестлинг буйынса спорт мастеры, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты **Эльбрус Ниғмәтуллинға - 50 йәш** (1974).

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## ? Һеҙҙең ғаиләлә кем баш, кем муйын? Әллә был ҡағиҙә инде иҫкергәнме? Ғөмүмән, нисек билдәләйһегеҙ ир менән ҡатын бурыстарын?

***Гөлйөҙөм ҒИНИӘТУЛЛИНА, китапханасы, Шишмә районы:*** Ирем менән 12 йыл йәшәйбеҙ. Әҙ ҙә түгел, күп тә түгел, шулай ҙа ниндәйҙер һығымталар эшләргә мөмкин.

Йәшәй-йәшәй бер-береңдең холҡон, ҡылыҡтарын, ғәҙәттәрен яҡшылап аңлай башлайһың. Ваҡыт үтә килә икенсе яртыңдың теге йәки был хәлдә үҙен нисек тотасағын һәм хатта нимә әйтәсәген дә белеп тораһың. Ҡайһы бер йәш ғаиләләр беренсе тапҡыр һүҙгә килешкән осраҡта ла "холоҡтар тап килмәй", тип айырылышыу тураһында уйлай башлай. Бер-береңде тыңларға, аңларға өйрәнеүҙән башлана ла инде ныҡлы ғаилә тормошо. Ҡайһы бер урында шымып ҡала белергә лә кәрәк.

Тормош булғас, ҡайһы берҙә "баш" булырға ла тура килә, "муйын" да булып кителә. Шулай ҙа ҡатын кеше һығылмалыраҡ, хәйләкәрерәк булырға тейештер, тигән уйҙамын. "Баш"мын тип күкрәк киргән ирҙе был уйынан дүндермәй генә, үҙеңсә эшләргә лә мөмкин бит. Мин бер ҡасан да ирем менән бәхәсләшмәйем, ләкин был һәр саҡ барыһы ла тик унынса ғына була, тигәнде аңлатмай.

Ғаиләлә ир менән ҡатын бурыстары барлығын кем, ҡасан һәм ниндәй ҡараштан сығып билдәләгән? Айырыуса бөгөнгө заманда был көнүҙәк түгел, тип иҫәпләйем.

Ғаилә ныҡ булһын өсөн "баш-муйынға" бүленергә түгел, ә уларҙың бергә эшләй белеүе мөһим. Ғаиләләге бурыстарҙы бүлмәҫкә, ә уларҙың йәшәйешебеҙҙе уңайлы һәм файҙалы итеүенә йүнәлтә белергә кәрәк.

**Гөлназ МАНАПОВА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Өфөлә архитектор Ришат Муллагилдинға арналған мәғлүмәт таҡтаһы асылды. Ул "Торатау" конгресс-холы бинаһына (5-се ишек, Вәлиди һәм Ғафури урамдары мөйөшө) ҡуйылды. Конгресс-холдың матбуғат хеҙмәтендә белдереүҙәренсә, таҡтаташта учреждение сайтында архитектор хаҡындағы сәхифәгә инеү өсөн QR-код урынлаштырылды. Һуңынан мәҙәниәт йорто эсендә Ришат Муллагилдиндың тормошона һәм ижадына арналған күргәҙмә асылды.

✓Өфөлә өсөнсө SMART-баҡсасы форумында коммерцияға ҡарамаған баҡсасылыҡ ширҡәттәре араһындағы конкурс еңеүселәре иғлан ителә. Уларға төҙөкләндереү өсөн 500-әр мең һумлыҡ грант бирелә. "Ике йыл эсендә баҡсасыларға республика бюджетынан 360 миллион һум аҡса бүленде. Ошо аҡсаға 223 баҡсасылыҡ ширҡәтенең инфраструктураһы яҡшыртылды, 140 коммерцияға ҡарамаған баҡсасылыҡ ширҡәтендә инә торған юлдар ремонтланды, 16-һында электр энергияһын иҫәпләү приборҙары ҡуйылды", - тип яҙҙы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

✓Башҡортостан Республикаһы Башлығының тейешле указына ярашлы, 2024 йылдың сентябрендә, артабан йыл һайын, Өфөлә "Әйҙә, уйнарға" Бөтә Рәсәй уйынсыҡтар һәм уйындар фестивале, шулай уҡ ҙур-ҙур ҡурсаҡтар һәм мобиль артобъекттар ҡатнашлығында мультпарад була. Фестиваль Башҡортостандың балалар тауарҙары индустрияһын үҫтереү, етештерелгән балалар уйынсыҡтары һәм өҫтәл уйындары ассортиментын күрһәтеү, ошо тармаҡтың үҫеш мөмкинлектәренә анализ яһау маҡсатында ойоштороla.

✓Дәүләт Думаһы депутаттары икенсе һәм өсөнсө уҡыуҙа юғалған кешеләрҙе эҙләү өсөн өҫтәмә мөмкинлектәр булдырған закон ҡабул итте. Закон проекты буйынса хәбәрһеҙ юғалған граждандарҙың яҡын туғандарын мотлаҡ дәүләт геном теркәүе үтергә тейешле кешеләр исемлегенә индерергә тәҡдим ителә. Улар - ата-әсәләр, балалар, бер туғандар. Алынған геном мәғлүмәттәре кешенең ҡайҙа икәнен асыҡлағансы һаҡлана, әгәр ул һәләк булһа, уны таныуҙа ярҙам итәсәк.

✓Белорет районында рөхсәтһеҙ ике мышы аулаған браконьерҙар табылған. Башҡортостан Экология министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, тағылмалы машинаны туҡтатҡан ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре ҡанлы балта һәм бысаҡтар тапҡан. Браконьерҙарҙың мылтығы һәм ҡаргиҙәре тартып алынған. Тәбиғәтте һаҡлау ведомствоһы баһалауынса, улар 640 мең һумлыҡ зыян килтергән.

✓ *"Беҙ һәр ваҡыт Ирәндек һыртын айырым һаҡланыусы биләмә итеү яҡлы булдыҡ. Был урындар үҙенсәлекле бай тәбиғәте һәм биологик төрлөлөгө менән айырылып тора", - тине министр.*



ҠЫҪҠАСА

# ВРАЧТАР БУРЫС ҮТӘЙ

**Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин республикабыҙ табиптарының 20 сменаһын Луганск Халыҡ Республикаһына командировкаға оҙатты.** Ошо арала улар урынға барып етеп, эш урындарында элекке бригаданы алмаштырырға тейеш. Табиптарҙың яңы төркөмөндә неврологтар, эндокринологтар, рентгенологтар, офтальмологтар, кардиологтар, ультратауыш диагностикаһы табиптары, шәфҡәт туташтары бар. "Красный Луч ҡалаһының тыныс халҡы ошо белгестәрҙең ярҙамына мохтаж. Ә Башҡортостан ярҙам күрһәтеүен дауам итә. Шефлыҡҡа алынған территорияла эшләү осоронда табиптарыбыҙ 65 меңдән ашыу өлкән кешене һәм 59 мең баланы ҡабул итте, 96 меңдән ашыу тикшереү үткәрҙе", - тип яҙа Айрат Рәхмәтуллин социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

✓ **Башҡортостандың спорт министры Руслан Хәбибов республика Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә спорт менән шөғөлләнеү хаҡын ҡаплау буйынса дәүләт социаль заказын киңәйтергә һәм исемлеккә һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән кешеләрҙе, инвалид балаларҙы индерергә тәҡдим итте.** "Федераль үҙәк беҙҙең проектты иң яҡшыларҙың береһе тип танны. Бөгөн бында ГТО нормативтарын үтәп, сертификат алған һәм йыл буйына спорт менән шөғөлләнгән өлкән быуын вәкилдәре инә. Был категорияға сәләмәтлек мөмкинлектәре сикләнгән кешеләр ҙә инһә, шәп булыр ине", - тине ведомство етәксеһе. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров башланғысты хупланы һәм республиканың министрҙар кабинетына өҫтәмә финанслау мәсьәләһен ентекләп өйрәнергә ҡушты.

✓ **Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы урындағы үҙидара тураһында республика законына үҙгәрештәр индерҙе.** Хәҙер урындағы үҙидара органдары ҡарары буйынса төҙөкләндереү өлкәһендә муниципаль контроль функцияларын муниципаль учреждениеларға йөкмәтеү мөмкинлеге ҡаралған. Был хаҡта Башҡортостан Дәүләт Йыйылышының матбуғат хеҙмәте хәбәр итә. Республика парламенты рәйесе Константин Толкачев һүҙҙәренсә, федераль ҡануниәттәге үҙгәрештәргә ярашлы, административ комиссиялар төҙөкләндереү ҡағиҙәләрен үтәмәгән өсөн хоҡуҡ боҙоусыларҙы яуаплылыҡҡа тарттыра алмай. Өфөлә 9 белгес кенә ошондай вәкәләттәргә эйә. Закон ҡабул ителһә, вәкәләттәрҙе даирәһен киңәйтеү һәм халыҡ уңайлығы йәшәһен өсөн ҡалаларҙың, ауылдарҙың тышҡы күренешенә тейешле контролде яйға һалыу мөмкинлеге барлыҡҡа килә. Өфөнөң 450 йыллығы алдынан был айырыуса мөһим.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ИРӘНДЕК ҺАҠЛАНАСАҠ!

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров башланғысы менән Баймаҡ районының Ирәндек һыртында геология-эҙләнеү һәм ер аҫты ҡаҙылмалары эшкәртеүҙе тыйыу тураһында ҡарар ҡабул ителде.**

Радий Хәбиров республиканың Экология министрлығына бында айырым һаҡланыусы тәбиғәт биләмәһе булдырыу хаҡында мәсьәләне ҡарарға ҡушты. БР тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министры Нияз Фазылов "Тураһын әйткәндә" программаһы эфирында үҙе етәкләгән ведомствоның тейешле документтарҙы әҙерләүен һәм Ирәндек һыртында айырым һаҡланыусы тәбиғәт биләмәһе булдырыу хаҡында башланғыс менән федераль министрлыҡҡа мөрәжәғәт итергә йыйыныуҙарын белдерҙе. Мәсьәләнең ошолай хәл ителеше менән Ер аҫты ҡаҙылмаларын файҙаланыу буйынса федераль агентлыҡта ла (Роснедра) килешеләр һәм тиҙҙән республика картаһында тағы ла бер ҡурсаулыҡ-биләмә барлыҡҡа киләсәк.

"Беҙ һәр ваҡыт Ирәндек һыртын айырым һаҡланыусы биләмә итеү яҡлы булдыҡ. Был урындар үҙенсәлекле бай тәбиғәте һәм биологик төрлөлөгө менән айырылып тора", - тине министр. Нияз Фазылов һүҙҙәренсә, был ниәт күптән тыуғайны инде. Мәҫәлән, ошо ергә яҡындағы Талҡаҫ күле айырым һаҡланыусы тәбиғәт биләмәһе статусына эйә, хәҙер Ирәндек һырты ла ошондай уҡ ҡурсыуға алынасаҡ.

Республика властары башланғысы былтыр Ирәндек буйында геологтарҙың эҙләнеү эштәре менән бәйле борсолоуға ҡалған Көньяҡ Урал халҡы һәм йәмәғәтселеге тарафынан хупланды. Асыҡланыуынса, Роснедра тарафынан бында марганец ятҡылыҡтарын эҙләү буйынса Башҡортостан менән килешеүһеҙ төҙөлгән контракт нигеҙендә подрядсы компания эш алып барған. Шулай итеп, биләмәне өйрәнеү документтарҙы анализлау менән генә сикләнелгән (элегәрәк, 1930 һәм 1970 йылдарҙа ла эҙләнеү эштәре үткәрелгән булған). Хәҙер Ирәндек һыртында эҙләнеү эштәрен дауам итмәҫкә тигән ҡарар ҡабул ителде.

# ҮҘЕБЕҘҘЕКЕ - ҮҘЕБЕҘГӘ

**Башҡортостанда 2023 йыл йомғаҡтары буйынса аҙыҡ-түлек бойондороҡһоҙлоғона өлгәшелде. Төбәк етештереүселәре республика халҡын бөтә төр аҙыҡ-түлек менән етерлек тәъмин итә, тине БР ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов.**

Аҙыҡ-түлек һәм эшкәртеүсе сәнәғәт ойошмалары тарафынан 2023 йылда 160 млрд һумлыҡ аҙыҡ-түлек етештерелде, тине Илшат Фәзрахманов Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә. Шул иҫәптән 130,5 млрд һумлыҡ аҙыҡ-түлек (104,2 процент) һәм 29,1 млрд һумлыҡ эсемлек (118 процент) һатылды. "Төбәк һөт һәм һөт аҙыҡтары, (үҙтәъминәт 121,6 процент), сусҡа ите (140 процент), һыйыр ите (108,1 процент), шәкәр (6,7 тапҡырға), үҫемлек майы (6.8 тапҡырға), картуф (149 процент), ҡыяр (108 процент) һәм помидор (152 процент) буйынса тулыһынса үҙ ихтыяждарын ҡаплай. Ҡош ите, он һәм он-аҙыҡтар, шулай уҡ сыр һәм борщ йыйылмаһы йәшелсәләренә мохтажлыҡ бар", - тип билдәләне аграр ведомство башлығы.

Былтыр Башҡортостанда етештерелгән аҙыҡ-түлектең дөйөм күләме 2 млн тоннанан артып китте. Был 2022 йылдағына ҡарағанда 11 процентҡа күберәк. "Үҫеш бара, ләкин таһы ла әүҙемерәк эш кәрәк. Плюс 11 процент - яҡшы һөҙөмтә, шулай ҙа артабан да һынтылыш кәрәк",- тип һығымта яһаны Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Илшат Фәзрахмановтың сығышын баһалап.

# БАЙЛЫҠҠА КЕМ ХУЖА?

**Башҡортостанда ер хужаһының рөхсәтенән тыш алтын һәм башҡа ҡиммәтле ресурстарҙы эҙләү һәм эшкәртеүгә лицензия бирмәйәсәктәр. Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министры Нияз Фазылов билдәләүенсә, ведомство федераль регламентта ҡаралмаған күп кенә үҙгәрештәргә нигеҙ һалған.**

БР Башлығы тарафынан булдырылған ведомства-ара комиссия физик һәм юридик шәхестәрҙең законды нисек үтәүен тикшереп, әлеге ваҡытта алтын табыуға бирелгән лицензия хужаларының эшмәкәрлегенә тәртип индереү менән шөғөлләнә. "Алтын табыу цивилизациялы булырға тейеш. Әле алтынды эҙләү территорияһы сикләнмәгән, траншеяны 100 квадрат километрға тиклем ҡаҙһалар ҙа була. Урындағы халыҡ был ерҙәрҙә алтын эҙләйәсәктәрен белмәй ҙә ҡала. Әгәр ҙә уларҙы ярты йыл элек уҡ иҫкәртһәләр, һөйләшеү икенсерәк барыр ине, моғайын. Ә былай ниндәйҙер кешеләр килә лә, ерҙе ҡаҙа башлай кеүек күренә", - тине Фазылов.

Комиссия эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә алтын эҙләүселәргә тәбиғәтҡә зыян килтергән өсөн суд тарафынан 35 млрд һум штраф һалынған. Яныраҡ арбитраж суд тарафынан "Альтинвест" ойошмаһының эшмәкәрлеге туҡтатылды.

# РЕСПУБЛИКАНАН СИТТӘГЕЛӘРГӘ...

**Башҡорттар күпләп йәшәгән Рәсәй субъекттарында һәм сит илдәрҙә ватандаштарыбыҙға ярҙам итеү, башҡорт мәҙәниәтен һаҡлау һәм популярлаштырыу маҡсатында 2020 йылда башҡорт тарихи-мәҙәни үҙәктәре асылды. Был хаҡта Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә республиканың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова хәбәр итте.**

- Бындай үҙәктәр бөгөн Ырымбур, Свердловск, Силәбе, Ҡурған өлкәләрендә, Пермь крайында, Ханты-Манси автономиялы округы-Юграла уңышлы эшләй, - тине Әминә Шафиҡова. - Әлеге көндә Һамар өлкәһенең Һамар ҡалаһында башҡорт тарихи-мәҙәни үҙәген асыу тураһында рәсми мөрәжәғәт бар. Мәҙәниәт һәм сәнғәт өлкәһендә Башҡортостан Республикаһы менән Беларусь, Ҡаҙағстан, Үзбәкстан республикалары араһында килешеүҙәр төҙөлгән. Уҙған йылда Рәсәй төбәктәрендә һәм сит илдәрҙә йәшәгән яҡташтарыбыҙ өсөн халыҡ ижады буйынса 24 оҫталыҡ дәреҫе үткәрелде, башҡорт милли кейемдәрен тегеүҙә, тирмә эшләүҙә ярҙам күрһәтелде, башҡорт теләндә сыҡҡан китаптар һәм милли инструменттар тапшырылды. Рәсәй төбәктәрендә һәм сит илдәрҙә йәшәгән ватандаштарыбыҙҙы берләштергән Милли һабантуй байрамы бөгөнгө көнгә тиклем имидж сараларының береһе булып тора, - тип билдәләне Әминә Шафиҡова. - 2023 йылда Рәсәйҙең 17 төбәгендә, шул иҫәптән Үзбәкстанда һабантуйҙар уҙғарылды. Сарала ҡатнашыусыларҙың дөйөм һаны бер миллиондан ашты. Мәскәүҙә һәм Санкт-Петербургта һабантуйҙар йылдағыһа иң күләмлеһе булып ҡала, былтыр унда ярты миллионға яҡын кеше ҡатнашты...

Министр һүҙҙәренсә, быйыл Өфөлә "Тамырым - башҡорт" төбәк-ара балалар һәм үҫмерҙәр форумын үткәреү планлаштырыла. Унда Рәсәйҙең алты төбәгенән (Ханты-Манси автономиялы округы-Югра, Силәбе, Ырымбур, Свердловск, Ҡурған өлкәләренән, Пермь крайынан) килгән балалар Өфөнөң төп музейҙарында, белем биреү учреждениеларында һөнәри йүнәлештәге экскурсиялар менән танышасаҡ.

**Ләйлә АРАЛБАЕВА.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөлә халыҡ һаны билдәле булды. Бөгөн Өфөлә 1 миллион 181 мең кеше йәшәй, тип хәбәр итте баш ҡала мэры Ратмир Мәүлиев 5-се саҡырылыш муниципалитет советының сираттағы ултырышында. Өфө хакимиәте башлығы һүҙҙәренсә, баш ҡала Рәсәйҙең иң ҙур 10 ҡалаһы иҫәбендә, ә тыуым кимәле буйынса 5-се урынды биләй. Былтыр ғинуар-февраль айҙарында миграция үҫеше 4,5 мең кеше тәшкил иткән.

✓Өфөнөң тарихи үҙәгендә быйыл түләүле машина ҡуйыу урындары барлыҡҡа килә. Был хаҡта бишенсе саҡырылыш ҡала Советының сираттағы 35-се ултырышында Өфө хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев хәбәр итте. "3,5 меңдән ашыу машина ҡуйыу урыны эшләргә уйлайбыҙ, был ҡала урамдарын бушатырға мөмкинлек бирә", - тип хәбәр итте ул. Бынан алдараҡ "Башинформ" Өфөнөң Цюрупа урамындағы тротуарҙы төҙөкләндереү тураһында хәбәр иткәйне.

✓5 марттан Өфөнән Астанаға рейстар башлана. Өфө аэропортының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, Red Wings авиакомпанияһы Ҡаҙағстандың баш ҡалаһына осоштарҙы тергеҙә. Рейстар шишәмбе көндө 100 пассажирға иҫәпләнгән Sukhoi Superjet 100 самолеттарында башҡарыла. Өфөнән осоу - урындағы ваҡыт менән киске 6-сы 15 минутта. Осош ваҡыты - ике сәғәт.

✓Өфөнән Белорет районына ҡала яны поездарының теҙмәһе үҙгәрҙе, тип хәбәр итә Башҡортостан ҡала яны пассажирҙар компанияһы. Мәҫәлән, 26 февралдән Өфө - Белорет электричкаһы (ул иртәнге сәғәт 7-се 7 минутта ҡуҙғала һәм көндөҙгө 12-гә барып етә; кире йүнәлештә - 6-сы 46 минутта) көн һайын йөрөй. Туристарҙы тау саңғыһы курортына алып барған Өфө - Яңы Абҙаҡ - Өфө поезд-дублеры 2 мартта уҡ (шәмбе) теҙмәнән сығарыла - ҡышҡы миҙгел тамамлана. Был ял һәм байрам көндәрендә йөрөгән "Урал легендаһы" поезы.

✓Был аҙнала Гагарин кубогының плей-офф уйындары башлана. "Салауат Юлаев" беренсе раундты Силәбенең "Трактор"ы менән үткәрә. "Салауат Юлаев"тың үҙ майҙанындағы тәүге ике уйыны 29 февралдә һәм 2 мартта була. 4 мартта һәм 6 мартта юлаевсылар Силәбелә уйнай. Һуңынан, әгәр талап ителһә, ҡалған өс осрашыу 8 мартта (Өфөлә), 10 мартта (Силәбелә) һәм 12 мартта (Өфөлә) үткәрелә.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✔ *Ул - "треш-стрим" йәғни ҡанһыҙлыҡ менән ҡылынған законға ҡаршы ҡылыҡтар һәм уларҙың эҙемтәһен күрһәткән фото һәм видеоматериалдар. Роскомнадзор уларҙы оператив рәүештә туҡтатыу хоҡуғына эйә буласаҡ.*



*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*



# ҠАРШЫ ТОРОУ - ЕҢЕҮМЕ?

**Үткән аҙнала Катарҙың баш ҡалаһы Дохала Египет, Катар, АҠШ, Израил һәм "Хамас" Палестина хәрәкәте вәкилдәре Газа секторында тыныслыҡ килешеүе буйынса Парижда башланған һөйләшеүҙәрҙе дауам итеү маҡсатында осрашты. Египет мәғлүмәт сығанаҡтарына һылтанып, киләһе осрашыуҙың Ҡаһирәлә үтәсәге хаҡында хәбәр ителә.**

Газа секторын утҡа тотоуҙы туҡтатыу һәм Израил менән Палестина әсирҙәрен алмашыу хаҡында һүҙ барғайны унда. Тәүге этапта "Хамас" һуғышсылары ҡулындағы 40 әсирҙе Израил төрмәһендә яфа сигеүсе 200-300-ләгән палестинға алмаштырыу мәсьәләһе ҡаралды. Украина менән Рәсәй конфликтында ла ыңғай үҙгәрештәргә ишаралаусы хәбәрҙәр юҡ-юҡта ишетелә биреп ҡуя. Евросоюздың сит ил эштәре һәм хәүефһеҙлек сәйәсәте буйынса вәкиле Жозеп Боррель фаразлауынса, Украина конфликтының яҡындағы айҙар эсендә хәл ителеүе ихтимал. Шулай тип белдереүенә ҡарамаҫтан, ул үҙенең бындай хәл ителеш яҡлы түгеллегенә баҫым яһай: "Әгәр беҙ Украинаның ҡаршы тороуын теләйбеҙ икән, уға ярҙамды тиҙләтергә тейешбеҙ. Ҡаршы тороу - тимәк, еңеү ул", - тине ул El País гәзите менән әңгәмәһендә. Бының менән Боррель Европаны "уянырға" саҡырыуын белдерҙе.

Унын һүҙҙәрен йөпләгәндәй, Владимир Зеленский Fox News телеканалына интервьюһында Украинаның яңы контрһөжүмгә әҙерләнеүе хаҡында һөйләне һәм бының Рәсәй армияһы өсөн "сюрприз" буласағын белдерҙе. Ләкин күҙәтеүселәр башҡасараҡ фекерҙә. Мәҫәлән, журналист Штеффен Шварцкопф, Украина Ҡоралды көстәренең территорияларҙы ташлап китеүенә боеприпастар ҡытлығы сәбәпсе булып тора, ти. Хәрби эксперт Андрей Кошкин да "Известия" гәзите менән әңгәмәһендә, снаряд ҡытлығы Украина Ҡоралды көстәрен яҡшыға килтермәйәсәк, тине. Белоруссия президенты Александр Лукашенко: "Әгәр Көнбайыш Украинаға әлеге кеүек "ярҙам итә" икән, уның көндәре һанаулы", - тип белдерҙе. Украинаның финанс министрлығы ла Көнбайыштан етерлек күләмдә ярҙам булмауына зарланды. "Рәсәй менән һөйләшеүҙәргә әҙер булыу өсөн Украинаға көслөрәк позиция алыу кәрәк",- тине АҠШ Дәүләт секретарының сәйәсәт буйынса урынбаҫары Виктория Нуланд.

Рәсәй Президенты Владимир Путин иһә был хаҡта бер нисә тапҡыр инде, Мәскәү һөйләшеүҙәргә әҙер, тип белдерҙе, тик бына Киевтың был йәһәттән ҡуҙғалырға йыйынмауын күрәбеҙ. Өҫтәүенә, Украина быйыл йәй НАТО составына инергә өмөт итә, ләкин уның бөгөнгө хәле ысынбарлыҡҡа әйләнеп ҡайтырға мәжбүр итә. Германияның Tagesschau баҫмаһында сыҡҡан мәҡәләһендә хәрби күҙәтеүсе Хендрик, Украина миллиондарса һанда артиллерия ҡоралы алған хәлдә лә конфликтта өҫтөнлөккә өлгәшә алмаясаҡ, тип белдерҙе.

Үткән аҙнаның һуңғы яңылыҡтары таҫмаһынан алынған хәбәр иғтибарҙы йәлеп итә. Зеленский офисы башлығы Андрей Ермак һүҙҙәренсә, 160-тан ашыу ил лидерҙары ҡатнашасаҡ "Украина тыныслыҡ форумы"ның Киевта үтәсәк беренсе саммитына Рәсәйҙе лә саҡырыуҙары ихтимал. Әммә Владимир Путин Зеленскийҙың "тыныслыҡ форумы"н тәнҡитләп сыҡты. "Көнбайышта һәм Украинала һүҙ алып барылған "тыныслыҡ форумы", асылда, Украина президентының Рәсәй менән һөйләшеүҙәр алып барыуҙы тыйыусы декретын бойомға ашырыуҙы дауам итеү ул", - тине В. Путин РФ субъекттары башлыҡтары менән осрашыуында.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ДЕПУТАТ ҺӨЙЛӘЙ*

# КӨС ҠУЛЛАНЫУҘЫ СИКЛӘҮ



**Һуңғы йылдарҙа интернетта кеше психикаһына, бигерәк тә балаларҙыҡына зыян килтергән, мәҫәлән, кеше туҡмау, хайуандарҙы яҙалау кеүек видеолар барлыҡҡа килә башланы. Бындай зарарлы мәғлүмәтте артабан таратыуға юл ҡуймау маҡсатында, уларҙы тыйыу буйынса закон проекттары ҡабул иттек һәм яуаплылыҡ билдәләнек.**

Беренсе закон проекты менән тыйылған мәғлүмәттең яңы категорияһын индерәбеҙ. Ул - "треш-стрим" йәғни ҡанһыҙлыҡ менән ҡылынған законға ҡаршы ҡылыҡтар һәм уларҙың эҙемтәһен күрһәткән фото һәм видеоматериалдар. Роскомнадзор тейешле мәғлүмәтте, тура эфирҙарҙы, видеоларҙы оператив рәүештә туҡтатыу хоҡуғына эйә буласаҡ. Социаль селтәр эйәләре фото, видеолағы аяуһыҙ күренештәрҙе үҙҙәре күҙәтергә һәм уларҙы блокка ҡуйырға бурыслы. Шулай итеп, трешстримерҙар зарарлы мәғлүмәтте интернетта тарата һәм шуның менән аҡса эшләй алмай.

Икенсе закон проекты РФ Административ хоҡуҡ боҙоуҙар Кодексының 12.35-се статьяһына үҙгәрештәр индерә. Ул интернетта законһыҙ ғәмәлдәрҙе, уларҙың эҙемтәләрен һүрәтләгән фото һәм видеоматериалдарҙы тараткан өсөн яуаплылыҡты күҙ уңында тота. Штраф күләме граждандар өсөн 200-ҙән 600 мең һумға тиклем; вазифалы кешеләр өсөн 300-ҙән 700 мең һумға тиклем тәшкил итәсәк. Бынан тыш, бындай материалдар эшләү өсөн ҡорамалдарҙы, мәҫәлән, камераны тартып алыу ҡарала.

Өсөнсө закон проекты менән РФ Енәйәт кодексын 10 төр енәйәт буйынса асыҡ күрһәтеү менән енәйәтязалау ғәмәлен башҡарыуҙы ауырлаштырыусы сәбәп итеп танытан пункт менән тулыландырабыҙ. Улар араһында үлтереү, аңлы рәүештә һаулыҡҡа ауыр, уртаса һәм еңел зыян килтереү, туҡмау, яҙалау, үлтереү йәки һаулыҡҡа ауыр зыян килтереү менән янау, кешене урлау, законһыҙ рәүештә иркенән мәхрүм итеү, шулай уҡ ҡол итеп тотоу.

Был проекттар законлы көсөнә ингәс, көс күрһәткәнен, көсһөҙҙәрҙе кәмһеткәнен, уларҙы яҙалағанын төшөрөп, социаль селтәрҙәргә һалған кешеләрҙе яуаплылыҡҡа тарттырыу өсөн нигеҙ барлыҡҡа киләсәк. Беҙ кешеләрҙе, бигерәк тә балаларҙы бындай кадрҙарҙан һаҡларға тейешбеҙ.

**Зариф БАЙҒУСҠАРОВ, РФ Дәүләт Думаһы депутаты.**

*"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ*

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**Балалар, йәштәр фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһен өсөн, ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапкан арҙаҡлы шәхестәребеҙ хаҡында һөйләйбеҙ.**

## ХАММАТОВ ЯНЫБАЙ ХАММАТ УЛЫ

Я.Х. Хамматов - яҙыусы, хужалыҡ һәм дәүләт эшмәкәре, партия һәм комсомол органдары ветераны. Ул 1925 йылдың 16 ғинуарында Башҡорт АССР-ының Тамьян-Ҡатай кантоны Исмаҡай ауылында (хәҙерге Белорет районы) тыуған. Ата-бабалары ҡатай ырыуынан. 15 йәшенән Үрге Әүжән алтын приискыһында эшләй. Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнаша (1942-1945). КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитеты ҡарамағындағы ике йыллыҡ партия мәктәбендә уҡый. 1946 йылдан ВЛКСМ-дың Белорет район комитетында инструктор, унан бүлек мөдире була. 1947 йылда 1-се секретарь итеп һайлана. 1949 йылдан башлап ВЛКСМ-дың Башҡортостан өлкә комитетында эшләй, унан һуң 1952 йылға тиклем "Башзолото" трестында сәйәси бүлек етәксеһе урынбаҫары була. 1954 йылда КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитетына инструктор итеп күсерелә.

1956 йылда К.А. Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтын тамамлай. 1960 йылдан хеҙмәтсәндәр депутаттарының Әбйәлил район Советы башҡарма комитеты рәйесе булып эшләй. 1963-1969 йылдарҙа - БАССР Эске эштәр министрлығында бүлек етәксеһе. 1966 йылдан - СССР Яҙыусылар союзы ағзаһы. "Бөртөкләп йыйыла алтын" (1966), "Аҡман-тоҡман" (1971), "Йәшенле йәй" (1975), "Юрғашты" (1980), "Руда" (1982) романдарын эсенә алған пенталогияһы Башҡортостанда алтын табыу сәнәғәте формалашыуы тарихын сағылдыра. Шулай уҡ "Төньяҡ амурҙары", "Тыуған көн", "Башҡорттар китте һуғышҡа", "Комбриг Мортазин" "Ҡара яу", "Ағиҙел Иҙелгә ҡоя", "Салауат", "Һырдарья", "Башҡорт ханы", "Иҙел башы" романдары авторы.

Бүләктәре һәм маҡтаулы исемдәре: ВЦСПС һәм СССР Яҙыусылар союзы премияһы (1974), РСФСР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре (1985), Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы (1994), Ким Әхмәтйәнов исемендәге (1997) һәм Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге (2001) премиялар лауреаты, Башҡортостан Республикаһының Маҡтау ҡағыҙы (2000), Белорет ҡалаһының һәм Белорет районының Почётлы гражданы (2014).

Әбйәлил районы Аҫҡар ауылы, Белорет районы Черновка ауылы урамдарына яҙыусының исеме бирелгән. Тыуған ауылында Яныбай Хамматов музейы асылған. Өфөлә ул йәшәгән йортҡа мемориаль таҡтаташ ҡуйылған. 2006 йылда Белорет районы Советы Президиумы тарафынан уның исемендәге премия булдырылған. Белорет ҡалаһының 22-се башҡорт гимназияһына Яныбай Хамматов исеме бирелгән.

# Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Үҙәк көйһә

Үҙәк көйгәндә ҡәһүә, сәй, иҫерткес эсемлектәр эсеүҙән, тәмәке тартыуҙан баш тартығыҙ. Ашағандан һуң шундуҡ ятмай торогоҙ, эсте һығып торған кейем киймәгеҙ, йоҡларҙан 2 сәғәт алда ризыҡланығыҙ. Бындай торош 3 көн дауам итһә, табипҡа мөрәжәғәт итеү кәрәк.

❖ Үҙәк көйөүҙән киләлә иҙелгән йәки ҡырылған 1-әр ҡалаҡ әстерхан сәтләүеге йәки миндаль ашарға була.

❖ Көнөнә 1-2 тапҡыр ас ҡарынға 1-2 ҡалаҡ яңы әҙерләнгән картуф һуты эсергә, йәки көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда сей картуф һутын 1-әр десерт ҡалағы эсергә.

❖ 0,25 балғалаҡ соданы 0,5 стакан һыуҙа болғатып эсергә.

### Барбарис

Барбарис май аҙағы, июндә сәскә ата, сентябрь-октябрҙә емештәре өлгәрә. Барбарис емешендә 7 процентка тиклем шәкәрҙәр, бик күп алма һәм лимон кислотаһы, 100 грамға 150 мг тиклем аскорбин кислотаһы, рутин, пектин һәм дуплау матдәләре, калий бар. Япраҡтары аскорбин кислотаһына һәм каротинға бай. Дауаланыуҙа емеше, япрағы, ҡайыры һәм тамыры ҡулланыла. Емешен бешкәс йыйырға, тамырын көҙ аҙағында, япрағын - яҙ. Емеше бәүел ҡыуҙырыусы, тынысландырыусы, елһенеүгә ҡаршы, аппетитты асыусы, үт ҡыуҙырыусы тьҫиргә эйә. Емешенән әҙерләнгән һут бизгәк тотҡанда, пневмония, йөтәл, диабет ауырыуҙарынан ярҙам итә. Емешен яңы көйөнә ашамайҙар, сөнки әсе һәм ауыҙҙы ҡурыштыра.

❖ Артриттан 20 грамм барбарис емешенә ярты литр ҡайнар һыу койоп, 1 тәүлек тәнәтергә һәм көн дауамында эсеп бөтөргә.

❖ Шәкәр диабеты булып, тамаҡ кипһә, кипкән барбаристы ваҡлап, 1:10 нисбәтендә ҡайнар һыу өҫтәп, термоста 2 сәғәт төнәтергә. Һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр яртышар стакан эсергә.

❖ Аналыҡтан ҡан килһә, эс китһә 1 балғалаҡ ваҡланған барбарис ҡайырыһына йәки тамырына 2 стакан һыуыҡ һыу ҡойоп, 4 сәғәт төнәтеп һөҙөргә. Көнөнә 4 тапҡыр яртышар стакан эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Ҡарасабан

**(Обыкновенный турпан)**



Эре сума торған ҡош, кәүҙәле, башы ҙур, муйыны ҡыҫҡа. Ата ҡарасабандың ҡаурыйҙары шәмәхә-йәшкелт булып ялтырап торған ҡап-ҡара төҫтә. Суҡышы киң, башланған ерендә бер аҙ бөгөлөп тора, күҙҙәренең аҫтында ярым ай рәүешендәге аҡ тап. Ҡанатындағы "көҙгө"һө - аҡ. Тәпәйҙәре сағыу алһыу-ҡыҙыл. Инә ҡош инә ҡара-буҙ, суҡышы һоро, ҡанаттарында аҡ "көҙгө"һө бар. Ҡарасабан яҡшы суа, осорға бик яратмай, һауала саҡта ҡош тубы оҙон бер буйға теҙелеп оса. Ата ҡош тауышланмай, инә ҡоштоң быжылдауы ла ныҡ яңғыраҡлы түгел.

Башҡортостанда һирәк осрай. Көньяҡ Үләнде, Атауҙы, Яҡтыгүл (Әбйәлил), Ҡарағайлы, Оло Учалы, Өргөн (Учалы) күлдәрендә оя ҡорған осраҡтары билдәле. Шулай ҙа ҡарасабандар башлыса яҙын осоп килешләй, көҙөн осоп китешләй генә күлдәрҙә туҡтап китә торған ҡош. Йәшкелт-һары төҫтә, эре 6-10 йомортҡа һала. Уларҙы 1 ай тирәһе баҫа. Бәпкәләр яй үҫә, октябрь урталарында ғына оса башлай. Һыу умыртҡаһыҙҙары, һирәгерәк ваҡ балыҡ һәм үлән тамырҙары менән туҡлана. Ҡара, Каспий диңгеҙҙәре буйында ҡышлай.

## Синьга



Ҡарасабандар төркөмөнә ҡараған ҡош, ҙурлығы һуна өйрәк кеүек. Ата ҡош тап-ҡара төҫтә - есеме исеменә тап килә. Инә ҡош буҙ, сикәләре, муйыны асыҡ төҫтә. Уларҙы ҡарасабандан асыҡ төҫтәге "көҙгө"һө булмауы айырып тора.

Ата ҡоштоң тауышы моңло, "тю-йюк, тю-йюк" тип, сут-сут һайрай тиһәк тә яңылышмабыҙ. Инә ҡош "террек, террек" тип тауышлана. Быны башлыса осҡан сағында ишетергә була. Шулай уҡ ҡанаттары ла ҡеүәтле, төнөн осоп барғанын әллә ҡайҙан аңларға була.

Синьга тураһында мәғлүмәт аҙ. Һирәк кенә Кама буйында осраған. Асылыҡүлдә лә туҡтап китеү осраҡтары теркәлгән.

Рәсәйҙең Европа өлөшөндә, Себерҙә оя ҡора. Балтик диңгеҙҙә, Көнбайыш Европала Атлантик диңгеҙ ярында, һирәгерәк Каспий һәм Ҡара диңгеҙҙәрҙә ҡышлай.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

ИЛҺӨЙӘРЛЕК

# ЕГЕТТӘР - ЫСЫН ГЕРОЙҘАР

**Танылған музыкант, йырсы һәм актер, Башҡортостандың халыҡ артисы Рәсүл ҠАРАБУЛАТОВ Махсус хәрби операция үткәрелгән урындарҙа яҡташ яугирҙар алдында сығыш яһаны. Былай концерттар тәүге тапҡыр фронт линияһынан алыҫ түгел блиндаждарҙа үтте. Артист Башҡортостан батальондары яугирҙары өсөн ете концерт бирҙе. Ошо хаҡта ентекләберәк ул "Башинформ" агентлығына интервьюһында һөйләне.**





**➔ Рәсүл Рафиҡ улы, Махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан яугирҙар алдында концерт менән сығыш яһау ниәте нисек тыуҙы?**

- Мин быға тиклем дә егеттәр хәрби әҙерлек үткән урындарға йыш йөрөнөм. 2022 йылда яугирҙарҙы оҙатыр алдынан концерттар Һарытауҙа, 2023 йылда Түбәнге Новгород өлкәһендә булды. Унда республика Башлығы Радий Хәбиров Салауат Юлаев исемендәге батальонға флаг тапшырҙы. Былай концерттар ваҡытында бер төркөм музыканттар менән окоптарҙағы, һуғыш барған урындарҙағы егеттәр янына барыу идеяһы ла тыуҙы. Үҙемдең был фекеремде Башҡортостан Хөкүмәте вице-премьеры Азат Бадрановҡа еткерҙем, ул хупланы. Ләкин төркөм менән түгел, бер үҙемә килергә тәҡдим итте. Был юлы сәфәргә коллегам Фаил Раил улы Ғафаров менән барҙым. Унда, урында, Азат Шамил улы менән осраштыҡ, сығыштар графигын төҙөнөк, полк һәм батальон командирҙары менән һөйләшеп килештек. Һуңынан бер хәрби офицер оҙатыуында яҡташтарыбыҙ хеҙмәт иткән, мобилизацияланғандар урынлашҡан ергә юл тоттоҡ. Беҙ фронтҡа иң ныҡ яҡынлашҡан линияла, ҡайһы саҡта ни бары 3-4 километр алыҫлыҡта булдыҡ.

**➔ Хәүеф үҙен аҡланымы? Егеттәр һеҙҙең концерттарҙан рухи аҙыҡ алдымы?**

- Әлбиттә! Бында, Өфөлә, ҙур һәм уңайлы һарайҙарҙа концерттар ҡуйыу - бер эш. Унда иһә бөтөнләй башҡа күренеш. Яугирҙар бөтөнләй башҡаса ҡабул итә. Барыһы ла үҙ эше менән мәшғүл, үҙ бурыстарын белә һәм үтәй. Тамашасыларым фронттың тәүге линияһынан ҡайтып ял иткән егеттәр ине, блиндаждарҙа 15-30 кеше йыйылды. Бөтәһе ете концерт булды. Күберәк блиндаждарҙа сығыш яһарға тура килде. Үҙебеҙ менән бәләкәй генә, батарейкаларҙа эшләгән аппаратура алғайныҡ. Беренсе көндә, техниканы көйләгән саҡта, беҙҙең яҡтан арт-атыш ("выход" тип атала) башланды, ер тетрәгәндәй булды... Шул саҡта мин ысынлап та фронт һыҙығында булғанымды тойҙом.

Беҙ күберәк "УАЗ" машинаһында йөрөнөк. Юлдарҙың береһендә машина баҫыу уртаһында бысраҡҡа батты. Ә баҫыуҙы быға тиклем йыш ҡына утҡа тотоп торғандар. Оҙаҡ ҡына, бер 15-20 минут самаһы, машинаны сығара алмай маташтыҡ. Был бик ҡурҡыныс ине. Үлемдең эргәлә генә икәнен тойҙом - теләһә ҡайһы ваҡытта ракеталар, дрондар осоп килеп, шартлата ала ине....

**➔ Егеттәр һеҙҙең сығыштарығыҙҙы нисек ҡабул итте?**

- Бик шәп ҡабул иттеләр! Яугирҙар алдында, ғөмүмән, икенсе тойғолар кисерелә. Уларҙа тыуған яғын, туғандарын һағыныу тойғоһо көслө, күҙ йәштәрһеҙ һөйләп булмай. Әбйәлил, Ейәнсура, Күгәрсен, Туймазы, Ишембай, Белорет, Хәйбулла, Бәләбәй, Благовар һәм башҡа райондарҙан күп яҡташтарҙы осраттыҡ.

Егеттәр бик татыу. Уларҙың ныҡлы ирҙәр дуҫлығы мине хайран ҡалдырҙы. Нисек кенә булмаһын, улар бер-береһенә ярҙамға килә, бер-береһен бәләлә ҡалдырмаясаҡ. Улар - йәшәү менән үлемдең нимә икәнен белгән хәрби дуҫтар.

Беҙҙе оҙатып йөрөгән "Сегән" позывнойлы офицер һөйләүенсә, пехотала хеҙмәт иткән яугирҙар оҙайлы ваҡыт окоптарҙа йәшәй. Егеттәр - ысын геройҙар, мин улар алдында сал башымды эйәм, улар - киләсәк быуындар өсөн ысын ҡаһарманлыҡ һәм илһөйәрлек өлгөһө.

**➔ Барыһын да үҙ күҙҙәрегеҙ менән күреп, тағы нимәләр белдегеҙ?**

- Тәү сиратта республика Башлығы Радий Фәрит улы Хәбировҡа, Хөкүмәтебеҙгә, район һәм ҡала башлыҡтарына, эшҡыуарҙарға һәм республика халҡына рәхмәт әйткем килә, сөнки Башҡортостаныбыҙ яҡташ яугирҙарына нисек ярҙам иткәнен үҙ күҙҙәрем менән күрҙем! Был бик ҙур ярҙам! Беҙҙең батальондар һәм полктар туҡланыу, кейем-һалым, башҡа кәрәк-яраҡтар менән тәьмин ителгән, бер нәмәгә лә мохтаж түгелдәр. Улар урынлашҡан урындарҙа мунсамискәләр ҙә тора, хатта утыңды ла Башҡортостандан ебәрәләр. Бәлки, тәүге осорҙа ауырлыҡтар ҙа булғандыр, ләкин хәҙер беҙҙең батальондар тулыһынса тәьмин ителгән. Мин Махсус хәрби операция биләмәһендә булған 10 көн эсендә Башҡортостан райондары етәкселеге өс-дүрт тапҡыр килде.

**➔ Концерттарҙа ниндәй йырҙарығыҙҙы башҡарҙығыҙ?**

- Мин бер сәғәтлек программа әҙерләнем, репертуарға төрлө йырҙар индерелде. Беҙҙең батальондарҙа төрлө милләт вәкилдәре бар: башҡорттар ҙа, рустар ҙа, татарҙар ҙа, сыуаштар ҙа... Хәрби әҙерлек үткәреү урындарына барғанда уҡ күп егеттәрҙең Виктор Цойҙың "Кәкүк" йырын башҡарыуҙы һорағанын һәм коллегам Александр Карташов менән уны ҡурайҙа, инструменталь вариантта әҙерләгәнде хәтерләйем. Киләһе сәфәрҙә мин "Кәкүк"те мотлаҡ йырлаясаҡмын.

Александра Пахмутованың билдәле "Надежда" әҫәрен дә үҙем менән алдым - был йырҙы бик яҡшы ҡабул иттеләр. Яугирҙарға йырҙың һүҙҙәрен тараттыҡ, һәм беҙ бергәләп йырланыҡ.

Әлбиттә, "Ай-һай, гөлкәйем", "Аҡ ҡалфаҡ", "Ырымбур-ҡала", "Бик һағындым һине, тыуған илем", "Беҙҙең ил" кеүек башҡорт халыҡ һәм автор йырҙарын, башҡорт бейеү попурриҙарын башҡарҙым. Егеттәргә был йырҙар бик оҡшай. Мин ҡурайҙа уйнағанда ҡайһы бер яугирҙарҙың күҙҙәре йәшләнде. Әммә уларға былай ҙа еңел түгел, шуға күрә яҡташтарҙың хәрби рухын һәм кәйефен күтәреү өсөн күңелле, күңелсәк йырҙар, композициялар башҡарҙым.

**➔ Егеттәр һеҙҙең аша туғандарына сәләмдәр тапшырҙымы?**

- Һәр концерт алдынан яугирҙарға блокнот менән ручка бирҙем һәм туғандарына сәләм һүҙҙәрен яҙырға тәҡдим иттем. Мобиль элемтә бөтә ерҙә лә юҡ. Егеттәр яҡындарын һағынған, ата-әсәләренә, апай-һеңлеләренә, ағай-энеләренә яҙҙы... Мин 30-ҙан ашыу оșондай хат алып ҡайттым, уларҙың һәр береһе тиерлек "Еңеү менән ҡайтырбыҙ!" тигән һүҙҙәр менән тамамлана.

Өфөгә ҡайтҡас, ике көн яугирҙарҙың туғандарына һәм яҡындарына шылтыраттым. Кемдер шылтыратыуыма яуап бирҙе, кемдер - юҡ, әммә мин ихлас күңелдән улар көтөп алған хәбәрҙе еткерергә теләнем.

Концерттарҙан һуң сәй эсеү ойошторолдо, ихлас күңелдән аралаштыҡ. Мин йырҙар, һөйләшеүҙәр аша егеттәргә Башҡортостандың бер өлөшөн, тыуған йорт йылыһын тапшырырға тырыштым. Был улар өсөн бик ҡәҙерле ине.

Мин унда мотлаҡ рәүештә тағы барасаҡмын. Егеттәр - ысын геройҙар. Яугирҙарыбыҙҙың хәрби рухы, уларҙың ныҡлы ирҙәр дуҫлығы һәм уларҙың еңеү менән ҡайтырына ышанысы айырыуса ныҡ тәьҫир итте.

**БАШИНФОРМ.**

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

23

# Ғаиләм-ҡәлғәм

1-7 март (буранай) 2024 йыл №8 (1101)

ҺАЙ, АФАРИН!

# БАҠСАСЫ МАЛАЙ...

## буласаҡ һөнәренә юл яра булыр

**Һүрәттә йылмайып торған малай - Әбйәлил районы Асҡар ауылында йәшәүсе Искәндәр Абдуллин. Ул Т. Кусимов исемендәге гимназияның 4В синыфында белем ала.**



Февраль айында Искәндәр өсөн ҡыҙыу баҡса эштәренең тәүге осоро башланды. Эйе, бәләкәй булыуына ҡарамаҫтан, уны ысын мәғәнәһендә оҫта, тәжрибәле баҡсасылар рәтенә ҡуйырға була. Әле ҡулында тотоп торған мул ҡыяр үрсетмәһен дә ул үҙе үҫтергән. Былтыр апрель айында уҡ әле Абдуллиндар ғаиләһе теплицала үҫтергән тәүге ҡыяр уңышынан ауыҙ иткән. Һәм бында әсәйһенең ҙур ярҙамсыһы, баҡса эштәренең бөтә нескәлектәрен төшөнөргә тырышып йөрөгән Искәндәрҙең хеҙмәте ҙур булған.

Быйыл иһә Искәндәр был эште үҙ ҡулына алған. Көҙҙән ҡалдырған ҡара тупраҡты минералдар менән байытылған магазин тупрағы менән ҡушып, уңдырышлы ҡушымта эшләгән. Уны махсус торф һауыттарға һалып, 5 сантиметр тәрәнлегендә соҡорҙар эшләп, ҡыяр һәм помидор орлоҡтары сәскән. Тәҙрә төбөнә ҡуйылған үҫентеләренә ҡарҙы иретеп әҙерләгән һыуҙы ҡоя. 14 февраль сәскән орлоҡтарҙан бер аҙна тигәндә 2 япраҡлы үҫентеләр ҡалҡҡан. Һауа температураһына, тупраҡтың нисек йылыныуына ҡарап, ҡыярҙарын теплицаға күсерәсәк.

Йәш баҡсасы орлоҡтар менән тәжрибәләр ҙә үткәрә. Мәҫәлән, быйыл ултыртҡан тәмле борсаҡ орлоҡтарын ул үҙе әҙерләгән. Бынан өсөн былтыр баҡсаларында үҫкән борсаҡтарҙан ҡалған орлоҡтарҙы йыйып киптерел, ҡағыҙ ҡыптырҙарға һаҡларға ҡуйған. Быйыл иһә ошо орлоҡтарынан мул уңыш алырға йыйына. Орлоҡтарҙы ҡышҡылыҡҡа дөрөҫ әҙерләү, уларҙы дөрөҫ сәсеү өсөн махсус тапшырыуҙар ҡарай, интернет селтәрендә тәжрибәле баҡсасылар яҙған кәңәштәрҙе уҡый, йәғни, был эште бөтә яуаплылыҡ һалып башҡара.

Искәндәргә баҡсасылыҡ эшенең бөтә төрө лә оҡшай, ти әсәһе Әнүзә Әхтәм ҡыҙы. Мәҫәлән, ул сәскә үҫентеләренә лә ашлама һала, уларҙың үҫкәнен күҙәтергә ярата. Быйыл шулай уҡ финик сәскән, уны ашлай, температура режимы боҙолмауын күҙ уңынан ысҡындырмайынса үҫкәнен күҙәтә.

Үрсетмәләрен үҙ баҡсаларында үҫтереүҙән тыш, һатырға ла иҫәп тота Искәндәр. Ғөмүмән, эшҡыуарлыҡ һәләте был малайҙа ярылып ята. Әсәһе эшләгән буҙаны ла һатырға әүәҫ, өйҙәрендә йомортҡа күбәйеп китһә, уларҙы ла аҡсаға әйләндерергә генә тора. Шулай уҡ мәктәптә уҙғарылған төрлө йәрминкәләрҙә лә ихлас ҡатнаша. Эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнгән атаһынан был эштең үҙенсәлектәре тураһында белешә, аҡса эшләүҙең һәм килемен арттырыуҙың башҡа төрлө юлдарын эҙләй.

Искәндәр шулай уҡ авиамоделләү менән шөғөлләнә, үҫкәс, ошо өлкәлә эшләүсе белгес булғыһы килә. Һәм хыялына табан ныҡлы аҙымдарын әлеге мәлдә уҡ эшләй - ул илдең төрлө төбәгендә уҙған ярыштарҙа ҡатнаша, разряды бар. "Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ", тигән мәҡәлә нәҡ Искәндәр кеүек егеттәр хаҡында әйтелгәндер. Тырыш, маҡсатлы, уңған егеткә бәхетле бала саҡ, матур киләсәк теләйек.

**Гөлназ САФУАНОВА.**

ПСИХОЛОГ ЫҢҒАЙҒА КӨЙЛӘЙ

**Ғәйәт шәп үҙгәреүсән заманда йәшәйбеҙ. Ваҡыт та һыу кеүек аға. Көн һайын тиерлек яңы һүҙҙәр ишетәбеҙ, күренештәргә юлығабыҙ. Тән дауалаусы табиптар менән бер рәттән, йәнде дауалаусы белгестәрҙең - психологтарҙың - барлыҡҡа килеүенә лә хан заман. Тәүҙә киноларҙа ғына күреп ғәжәпкә һалған психологтарға мөрәжәғәт итеү бөгөнгө көндә ҡәҙимге хәл. Психологтарҙың һөнәри даирәһенә ҡараған "паникалы һөжүм", "депрессия" һәм башҡа һүҙҙәрҙе һәм күренештәрҙе лә әллә ни иғтибар бирмәй генә ҡабул итәбеҙ. Ә улар артында нимә ята? Яҡындарыбыҙҙы нисек һаҡларға? Ошо һәм башҡа һорауҙарға клиник һәм ғаилә психологы Гөлсинә ҒӘНИЕВА яуап бирә.**

# ҮҘЕҢДЕ ЯРАТЫРҒА ӨЙРӘНМӘЙСӘ...

## башҡаларҙы яратып булмай

**Бөгөнгө көндә психологияла "паникалы һөжүм" (паническая атака), тигән күренеш киң таралған. Нимә ул һәм нисек сағылыш таба?**



- Ысынлап та, һуңғы ваҡытта паникалы һөжүмдән яфа сигеүселәр һаны арта. Кешелә ҡапыл ғына ныҡ итеп ҡурҡыу тойғоһо барлыҡҡа килә, йөрәк тибеше көсәйә, тыны ҡысыла, тәне ҡалтырай, күкрәгендә ауыртыу көсәйергә, башы әйләнергә, эсе китергә, ҡоҫа башларға мөмкин. Уны үлем тураһындағы уйҙар биләп ала, өйҙән сығырға, аҡылдан яҙыуҙан ҡурҡа, ул ысынбарлыҡ менән бәйләнеште, үҙ-үҙен контролдә тотоу һәләтен юғалта.

Ҡайны берҙә паникалы һөжүм ҡурҡыуһыҙ ҙа булырға мөмкин. Был осраҡта тын быуыла, һауа етмәй, баш әйләнә, тирә-яҡ менән бәйләнеш юғала һәм башҡалар. Ниндәй осраҡта ла ул бик ҡурҡыныс күренеш һәм кешенең тормошон баштан аяҡ әйләндерергә мөмкин. Уны енеп сығыуы ла ауыр. Бындай осраҡта кешене тынысланырға саҡырыу мәғәнәһеҙлек, сөнки был ярҙам итмәйәсәк. Әлбиттә, яҡындарының таяныс булыуы паникалы һөжүмдә еңелерәк үткәрергә ярҙам итә, ләкин бөтөнләй еңеүгә булышлыҡ итә алмай.

Бөтә кеше лә үҙ ғүмерендә эмоциональ йәһәттән ныҡ тәьҫир иткән ваҡиғалар кисерә, ниндәйҙер психик яралар ала. Тормош бит ул шуға ла. Барыһын да дөрөҫ итеп кисерә белеү, уны үтеп сыға алыу мөһим. "Тиреһе ҡалын" кешеләр төрлө ваҡиғаларға әллә ни әһәмиәт бирмәйенсә үткәрә белә. Улар күҙлегенән сығып ҡарағанда, паникалы һөжүмгә дусар булыусылар үҙ-үҙҙәрен ҡулға алырға һәләтле, ләкин тырышлыҡ һалмаған, үҙ хәлдәрен еңеләйтеү буйынса эшләмәгән кеүек. Был төптә хата фекер. Шуға күрә, яҡын кешегеҙҙә ошондай хәл күргән осраҡта, уның психик торошо киҫкенләшмәһен өсөн, белгескә күрһәтеү иң дөрөҫ юл.

**Психолог бындай осраҡта ниндәй ярҙам күрһәтә ала?**

- Тормош мәшәҡәттәренә сумып, бөтмәҫтөкәнмәҫ эштәр менән булышып, ҡайһы берәүҙәр үҙенә иғтибар итмәй башлай. Ә кеше, тәү сиратта, үҙен яратырға, үҙенең тәненә, йәненә, күңел торошона иғтибарлы булырға тейеш. Психологтар кешегә үҙ-үҙен яратырға, тәне ебәргән сигналдарҙы ваҡытында тойорға, үҙенең хис-тойғоларын аңларға һәм уларҙы яҡшы яҡҡа борорға ярҙам итә. Һүҙ менән, уларҙы тыңлай һәм аңлай белеүе менән. Әгәр ҙә кешенең психик хәләте ныҡ зыян күрһә, уға психотерапевт һәм ул билдәләгән дарыуҙар кәрәк буласаҡ.

Психолог паникалы һөжүм өйәнәген еңеп сығырға өйрәтә. Һәм, иң мөһиме, паникалы һөжүмдең барлыҡҡа килеү сәбәбен аңларға һәм уны юҡ итеү өҫтөндә эшләргә булышлыҡ итә. Психолог 70 - 90 процент осраҡта паникалы һөжүм менән яфаланыусыға ярҙам итә ала. Шуға күрә, белгескә мөрәжәғәт итеүҙән хеҙмәҫкә, оялмаҫҡа кәрәк. Һәр кем үҙенең психологик торошоноң ниндәй кимәлдә булыуына үҙе яуаплы, тимәк, кәрәк саҡта уны көйләү, яйға һалыу һәм ниндәйҙер мәсьәләне енеп сығыу өсөн бар тырышлығын һалыу мөһим. Белгескә мөрәжәғәт итеү ошондай аҙымдың береһе булып тора ла.

**Элегерәк беҙ депрессияға, энергия юҡлығына зарланғандарҙы күрмәнек тә, ишетмәнек тә. Бөгөнгө көндә һәр икенсе кеше күңел төшөнкөлөгөнә зарлана. Заманы шулаймы, әллә үҙебеҙ барыһын да шул тиклем ауыр кисерәбеҙме...**

- Күңел төшөнкөлөгөнә бирелеүҙең төп сәбәбе - кешенең күңел күтәренкелегенә ынтылышы һәм ниндәй ҙә булһа дискомфортҡа түҙмәүе. Барыһы ла тормошта ниндәйҙер һөҙөмтәгә ынтыла, ләкин бөтәһе лә аныҡ маҡсат ҡуйып, уны тормошҡа ашыра алмай. Юлында барлыҡҡа килгән кәртәләрҙе, ҡаршылыҡтарҙы енеп сығырға, үҙенең характерын, комплекстарын, ҡурҡыуҙарын, ғәҙәтен үтеп сығыу өсөн ихтыяр көсөн тапмай. Бәләкәй генә миҫал. Көн һайын йүгерергә сығыу теләге бар, ләкин был ауырлыҡ тыуҙыра. Иртәрәк йоҡларға ятырға һәм иртән иртүк торорға - шулай уҡ тормошҡа ашырылмай. Бындай миҫалдарҙы күп килтерергә мөмкин. Үҙенең хыялында йөрөткән тормошта йәшәргә теләүе, ләкин уны ысынбарлыҡ итеү өсөн бер нәмә лә эшләмәүҙән ул күңел төшөнкөлөгөнә дусар була.

Бөгөнгө заман кешеһенә ойошҡанлыҡ һәм үҙ-үҙенә ярҙам итеү етмәй. Шулай уҡ хәҙер хеҙмәттең баһаһын төшөрҙөләр, ялҡаулыҡ көслө. Хатта телевизор ҡабыҙыу өсөн дә ултырған урындан торорға кәрәкмәй. Элекке заманды алып ҡараһаҡ, бөтөнләй башҡа төрлө хәлде күрәбеҙ. Балалар хеҙмәткә өйрәнеп үҫте, үҙ өҫтәренә яуаплылыҡ алырға ҡурҡманы, кеше тормошто һөйөп йәшәне, ғаиләлә лә, мәктәптә лә аралашыу етерлек булды. Йәшәү шарттары ауырыраҡ булһа ла, күңелдәре көр булып, күңелле йәшәне.

(Дауамы 9-сы биттә).

**Бөтөн нәмә ғаиләнән башлана. Баланың холоҡ-ҡылыҡтары, донъяға ҡарашы ғына түгел, милләтенә ниндәй ул йәки ҡыҙ булып үҫеүе лә ғаиләнән тора. Яҙҙың тәүге байрамы Башҡорт ғаиләһе көнө уңайынан ҡорға саҡырылған ҡунаҡтарыбыҙ - баш ҡалала йәшәүсе АСАИНОВтар ҙа күптән инанған быға. Уларҙың татыу һәм рухлы ғаиләһендә 4 бала үҫә. Дилара һәм Вадим менән уларҙың ғаиләһе, балалар тәрбиәһе тураһында әңгәмәләшәбеҙ.**

# ИРТӘ ӨЙЛӘНГӘН...

## улынан, ҡыҙынан кинәнгән

**Ғәҙәттә, кем менән генә танышһаҡ та, ҡайһы яҡтанһың, тиеп һорау йолаһы бар халҡыбыҙҙа. Өфөлә йәшәһәгеҙ ҙә, сығышығыҙ менән ҡайһы яҡтарҙан һеҙ?**

**Вадим:** Мин Йылайыр районы Һабыр ауылынан. Саҡрымлап һанағанда, Өфөгә йыраҡ ҡына булһа ла, күңелгә яҡын ул. Ауылда тыуып, унан ситтә йәшәгәндәрҙең барыһының да шулайҙыр. Унда атайым, әсәйем йәшәй, форсат сыҡҡан һайын ҡайтырға тырышабыҙ.

**Дилара:** Беҙ бер ауылдан, тейем дә ҡуям ул мин. Үҙем Өфөлә тыуғанмын, әммә атайым Һабырҙан, шуға ла йыл һайын йәйге каникулдарҙы ауылда, ҡартәсәйемдәрҙә үткәрә инем. Шунда Вадимдың Гөлфара исемле һеңлеһе менән дуҫлашып, яҡынайып киттек. Әммә ағаһын күргәнбелгән кеше түгел инем. БДУның Сибай институтында ситтән тороп белем алғанда сессия мәлендә шул буласаҡ бикәсем әрмеләге ағаһына бер нисә тапҡыр минең телефондан шылтыратты. Ул саҡта кеҫә телефондары саҡ күренә башлаған ғына мәл, барыһында ла юҡ. Аҙаҡтан инде Вадим миңә шылтырата, һөйләшә башланыҡ. Ошо һөйләшеүҙәр аша арала һөйөү уянды.

**Вадим:** Мин әрменән һуң бер йылға контракт буйынса хеҙмәт итергә ҡалдым. Шунан ҡайтып килешләй тура Диларапарға инеп, аталары менән таныштым да, уны ауылға алып ҡайтып та киттем.

**Дилара:** Мин уны ошо хеҙмәтенән, оҙайлы командировкаларынан көтөп алдым. Утлы нөктәләргә китә, тап шул саҡта Абхазия менән Грузия араһында низағ булды. Яңы йыл алдынан ҡайтҡайны, ата-әсәләребеҙ тиҙләтеп, мартта никах уҡытып, йәй туй үткәреп тә ҡуйҙылар. Ҡайным менән атайым класташ, бер ауылдан булғас, бер-береһен яҡшы беләләр, ике яҡтан да атай-әсәйҙәр беҙҙең дуҫлашып йөрөгәнде белгәс, беҙгә әйтеп тә тормайынса, шунда уҡ туй тураһында ла һөйләшә башланылар.

**Бөгөнгө көн күҙлегенән ҡараһаҡ, һеҙ иртә ғаилә ҡорғанһығыҙ, быны, һис шикһеҙ, ыңғай яҡтары күп, шулай ҙа уларҙың иң ҙуры нимәлә?**

**Дилара:** Беҙ ул саҡта иртә тип уйламаныҡ та. Шулай ҙа атай-әсәйҙәрҙең шулай барыһын да үҙ ҡулдарына алып, беҙҙе өйләндереп ҡуйыуының да үҙ мәғәнәһе булған. Граждандар никахы тигән нәмә таралып киткәйне, былар һуҙылып йөрөмәһен, тип уйлағандарҙыр. Халҡыбыҙ ҙа боронборондан ҡыҙҙарын иртә кейәүгә биргән, улдарын йәһәтерәк өйләндерергә тырышҡан. Шулай ҙа ике арала хистәр булырға тейеш, тип иҫәпләйем. Һөйөү булмаһа, ғаилә ҡорғанда ла йәшәп китеп булмайҙыр ул.

**Вадим:** Өйләнгәндә миңә - 21, Дилараға 20 йәш ине. Әле үҙебеҙ 40-ҡа ла етмәгәнбеҙ, балаларыбыҙ инде ҙурайған. Өлкән ҡыҙыбыҙ Азалияға 14 йәш тулды. Илназарға - 12, Миланаға - 7, оя төбө, кинйәкәү Вилданға 4 йәш. Бына улар инде беҙҙең иң ҙур бәхетебеҙ һәм уңышыбыҙ. Иртә өйләнгән улынан, ҡыҙынан кинәнгән, тиҙәр бит. Атай-әсәйҙәребеҙҙең һау-сәләмәт булыуы, балаларҙың уларҙың тәрбиәһен ала алыуы ла бәхет ҡәҙерен белгән кешегә.

Дилараға ныҡ рәхмәтлемен, унын, көтөп алдым, тиеүе дөрөҫ. Контракт тамамланғас, Эске эштәр министрлығына эшкә урынлашҡайным, унда ҡыҫҡартыуға эләгеп, аҙаҡтан тағы ла ғаиләнән ситкә китеп, хәрби хеҙмәткә күсергә тура килде. Әле генә мин хаҡлы ялдағы хәрби, ә ул мәлдә тағы ла оҙаҡ йылдар шулай командировкаларға йөрөнөм. Балаларҙы бәләкәй саҡтарында Дилара ҡараны. Ай ярымға отпускыға ҡайтып киткәндә генә күрә инем уларҙы. Хатта Милананы бала тыуҙырыу йортонан барып ала алманым, мин ҡайтҡанда ҡыҙыма 5 ай булып киткәйне. Ҡайным менән ҡәйнәмә рәхмәтлемен, беҙ башта улар менән бергә йәшәнек. Мин балаларҙың эргәһендә була алмағанда ла күңелем тыныс ине. Улдарға ғаиләләге ир тәрбиәһен бирергә ҡайным булды.

**Дилара:** Ҡатын-ҡыҙҙар төрлө була, әлбиттә. Тик мин бер ҡасан да бала ҡарауҙы үҙем өсөн ауыр эш тип иҫәпләмәнем. Һис шикһеҙ, мин дә карьера эшләйем, йәки, һин гел ситтә, яңғыҙыма балалар менән ҡыйын, тип тә әйтә ала инем. Әммә беҙ быңдай уйҙарҙан, ғәйепләүҙәрҙән өҫтөн була белдек, шөкөр. Һәр бала - бәхет, тип тулы ышаныс менән әйтәм. Азалия менән Илназарҙың йәш араһы ныҡ яҡын, улар бер-береһе менән уйнап, бер-береһенә әүрәп үҫтеләр. Бер бала ул үҙенә иғтибарҙы ла күп талап итә, холҡо ла башҡараҡ була. Шуға ла Милана тыуғас, уға ла иптәш булһын тип, 4-сеһен табырға ниәтләнем. Хәҙер улар, ысынлап та, Вилдан менән дуҫтар, бергә уйнайҙар, ҡыҙыҡһыныуҙары уртаҡ.

**Егет кәләшен әсәһенә, ҡыҙ атаһына ҡарап һайлай, тигәне дөрөҫмө? Ҡайны-ҡәйнәләр һеҙҙе нисек ҡабул итте?**

**Вадим:** Ҡайным-ҡәйнәмдәр менән 10 йыл бергә йәшәнек, тип әйткәйнем инде. Беҙҙең ғаиләнең ныҡлығында уларҙың да өлөшө бар. Ә Дилара, ысынлап та, әсәйемә ныҡ оҡшаған. Хатта килене тип түгел, ҡыҙы тип ҡабул итә белмәгән кешеләр. Холҡо ла оҡшаған, икеһе лә эшкә шәп, талапсан да. Бер урында ултыра белмәйҙәр, улар өсөн даими хәрәкәттә булырға, нимә менәндер булышырға кәрәк.

**Дилара:** Күреп йөрөйбөҙ, ҡайһы бер ғаиләләрҙә ирҙәр бала тәрбиәләү эшенә бөтөнләй ҡыҫылмай. Атайым бәләкәйҙән гел эргәлә булғас, Вадимдың да балалар менән яҡын булыуына ҡыуанам. Икеһе лә балалар ярата. Шулай уҡ эсеү-тартыу кеүек кире ғәҙәттәр уларға хас түгел, минең өсөн быныһы ла бик мөһим. Атай кеше рухи һәм физик йәһәттән сәләмәт булғанда ғына ғаилә имен була ала.

Ә бейем менән ҡайнымдың миңә ҡарата мөнәсәбәте ныҡ һәйбәт, 14 йыл эсендә бер насар һүҙҙәрен ишетмәнем. Малын да көтәләр, баҡсаһын да үҫтерәләр, тик торған көндәре юҡ. Беҙгә лә ярҙамдары ҙур. Бейем өйөн дә бөхтә тота, фольклор ансамленә лә йөрөп өлгөрә. Мин дә бәләкәйҙән бейергә яратҡас, хатта декрет ялында ултырғанда "Байыҡ" телевизион бәйгеһендә ҡатнашып өлгөрҙөм. Ҡатын-ҡыҙ ғаилә, бала тип, үҙен онторға тейеш түгел. Был шөғөл минең күңелемде үҫтерә, ә яҡшы кәйефле әсәй балаһына ла күпте бирә ала. Шуға ла күңел төшөнкөлөгөнә бирелеү миңә хас түгел.

**Дилара, һеҙҙе күптәр милли биҙәүестәр оҫтаһы итеп тә белә, был шөғөлгә нисек килдегеҙ?**

**Дилара:** Тап декрет ялында саҡта биҙәүестәр модаға инеп китте лә, мин дә уларҙы үҙем өсөн эшләп ҡараным. Миндәген күреп, миңә лә эшләп бирмәҫһеңме, тип әйтеүселәр күбәйеп китте. Яйлап миңә һеңлем дә ҡушылды. Һаҡал, селтәрҙәрҙе төрлөсә итеп эшләйбеҙ - боронғоларына оҡшатып та, стилләштереп тә. Башҡорт халҡының боронғо биҙәүес әйберҙәрен тергеҙеү маҡсаты менән янып йөрөйбөҙ. Төрлө сараларҙа ҡатнаша башланыҡ, хәҙер инде оҫталыҡ дәрестәре һорап мөрәжәғәт итеүселәр күп. Үҙең белгәнде башҡаларға өйрәтеү ҙә, халҡыбыҙҙың мәҙәниәтен күтәрмәләп, уны күрһәтә алыу ҙа шатлыҡ. Мәскәүҙә ВДНХ-ла булған Башҡортостан көндәрендә лә оҫталыҡ дәрестәре күрһәтеп ҡайттыҡ.

Иң мөһиме, минең был шөғөләмә ғаиләм көлөп ҡарамай. Киреһенсә, ирем менән улдарым тәңкәләр тишеп бирә, өлкән ҡыҙым үҙе хәҙер биҙәүестәр яһай. Ошолар балаларҙы ла милли мәҙәниәткә ылыҡтырырға ярҙам итә. Беҙ башҡорттар, былары беҙҙең милли кейемебеҙ, тип әйтеүгә ҡарағанда, бергә уларҙы эшләү күпкә әһәмиәтлерәк. Ғаиләлә нимә күреп үҫәләр, шуны аҙаҡтан үҙ ғаиләләрендә ҡабатлаясаҡтар. Һәр береһенең милли костюмы бар, уларҙы уҡыған лицейҙарындағы төрлө сараларға, башҡорт кейеме көнөндә мотлаҡ кейеү ғәҙәттәренә ингән.

**Атай балалар тәрбиәһендә нисек ҡатнаша? Улдарға ниндәйҙер айырыуса талаптар ҡуяһығыҙмы?**

**Вадим:** Ҡыҙҙар, ысынлап та, әсәй тәрбиәһендә. Ә улдар мотлаҡ спорт менән дуҫ булырға тейеш, тигән фекерҙәмен. Быны маҡсаты ябай ғына - егет кеше үҙен яҡлай белергә тейеш. Әрмелә хеҙмәт иткәндә күп күрелде, саҡ ҡына сибегерәк, көсһөҙөрәк егет булһа, уны шунда уҡ рәнйетергә генә торалар. Өйҙә, әлбиттә, һәр бала ҡәҙерле, әммә урамда ла тормош бар бит. Уның үҙ ҡанундары, шуға ла үҙҙәре өсөн тора, үҙҙәрен яҡлай алһындар тигән бәләкәй генә ниәт менән тотонғанбыҙ был эшкә. Киләсәктә профессиональ йәһәттән шөғөлләнергә уйлаһалар, үҙҙәре хәл итер. Үҙем дә бәләкәй саҡтан бокс, көрәш менән шөғөлләндем һәм был миңә тормошта ярҙам ғына итте.

Өйҙә махсус спорт мөйөшө булдырғанбыҙ. Илназарҙы



✓ *Баланы тыңларға өйрәнегеҙ. Әгәр ҙә бәләкәй сағында уға ҡарата иғтибарһыҙлыҡ күрһәтһәгеҙ, ул ҙурайғас үҙегеҙгә ҡарата ла ошондай уҡ мөнәсәбәттә булырға мөмкин.*



бокс алымдарына өйрәткәйнем, Вилдан да ҡушылып китте. Спорт бит ул беләктә генә түгел, рухты ла нығыта. Үҙенә ышанысы булған кешенең ҡарашы ла башҡа. Ҡурҡаҡты тәүҙә ҡарашы "һата".

**▸ Һәр ғаиләнең үҙенең генә йолалары була. Асаиновтарҙа бармы бындай йолалар?**

**Дилара:** Кисен барыһы ла өйҙә йыйылғанда бергәләп ултырып киске аш ашауға, һөйләшеүгә нык иғтибар бирәбеҙ. Иртәнге, төшкө аш мәлендә бындай мөмкинлегебеҙ юҡ, ә бына кис беҙҙең бергә уҙғара торған мәлебеҙ. Көнө буйына кем менән ниндәй хәлдәр булды, нимә хәтерҙәрендә ҡалды, нимәгә ҡыуандылар, нимәгә борсолдолар - барыһы менән дә уртаҡлашабыҙ.

**Вадим:** Үҙебеҙ ҙә, балалар ҙа сәйәхәт ярата. Йәш ярым булһа, йөрөтә башлайбыҙ. Бала бәләкәй тип, өйҙә ултырыу дөрөҫ түгелдер ул. Ете урынлыҡ машинабыҙ бар, тейәләбеҙ ҙә, сыға ла китәбеҙ. Балалар, был ялда ҡайҙа барабыҙ, тип уҙҙәре үк һорай башлай. Өфө тирәһенән башлап, республиканың Аҡташ, Шүлгәнташ, Моразым тарлауы, Асылыкүл кеүек ерҙәрендә булдыҡ, планда төньяҡ-көнсығыш районар. Шулай уҡ Ҡырымды ла барып күрҙек. Бергә йөрөгәндә бала асыла, үҙен борсоған темаларға ла һөйләшә, был да улар менән яҡын булыуҙың бер ысулы.

**▸ Ҡала шарттарында баланың башҡортса аралашыуы ла сетерекле мәсьәлә, һеҙҙең был йәһәттән ниндәй тәжрибәгеҙ бар?**

**Дилара:** Үҙебеҙ өйҙә башҡортса һөйләшкәс, Азалия менән Илназарҙың теле башҡортса асылһа ла, өй эргәһендәге рус балалар баҡсаһына йөрөгәс, улар русса белһен тип, русса күберәк өйрәттек. Был яңылышлыҡ булыуын бөгөн яҡшы аңлайым. Ул саҡта был шартҡа күнергә тура килгәйне.

Тел - ул милләтте һаҡлаусы. Башҡорт ғаиләһе башҡортса һөйләшергә, башҡортса уҡырға тейеш. Тел булмаһа, милләт тә булмай. Хәҙер йөрөтәргә лә, һайларға ла мөмкинлек булғас, Вилданды 308-се башҡорт балалар баҡсаһына бирҙек. Сөнки рус балалар баҡсаһынан 136-сы Башҡорт лицейына уҡырға барғас, Илназарға ҡыйыныраҡ булды, ә Азалия тиҙ генә башҡорт теленә күсте лә китте. Ҡыҙҙарға тел өйрәнеүе еңелерәктер, ахыры. Вилдандың башҡорт балалар баҡсаһына йөрөгәненә үҙебеҙ ҡыуанабыҙ. Бер көндө аталары унда инеп сыҡҡан да, "Ҡалай йәнгә йылы ул балалар баҡсаһында, барыһы ла башҡортса һөйләшә, ауылға ҡайтҡан кеүек булдым", тип, ҡыуанып ҡайтҡан.

**Вадим:** Йәйге каникулда балаларҙы мотлаҡ ауылға ҡайтарабыҙ. Велосипедтары, башҡа техникалары менән алып барып ҡуябыҙ. Әсәйҙәр улар менән башҡортса ғына һөйләшә. Телгә лә, эшкә лә өйрәнәләр. Ҡаҙ, өйрәк ҡарайҙар, һарыҡ ҡаршылайҙар, мал көтәләр. Апайымдың - 3, һеңлемдең 2 ҡыҙы бар, беҙҙең балалар улар менән бергәләп атайыма эйәреп, көтөү көтөргә лә сығып китәләр. Ҡартаталары балыҡ тотоп, уха бешереп ашата. Ҡала балаһы өсөн йәйгеһен генә булһа ла ошондай мөхиткә сумып алыу үҙе бер бәхет, кәрәкле нәмә. Үҙебеҙ ҙә мотлаҡ бесән эшләшергә ҡайтабыҙ.

Азалия уҡырға ла шәп, йәмәғәт тормошонда ла әүҙем ҡатнашҡас, 2022 йылда "Йәйләү" лагерына барып килде. Бик оҡшатҡайны. Былтыр русса эшләгән ябай лагерҙа ял иткәйне, унда береһе лә тел белмәй, минең башҡортса һөйләшкем килгәйне, тип ҡайтты. Быйыл тағы ла башҡорт лагерына барам, тип, үҙе белешеп йөрөй. Тимәк, уға ошо мөхит оҡшай.

**▸ Өлкән ҡыҙығыҙға хәҙер 14 йәш, ул да һеҙҙең йәштә кейәүгә сығам тиһә, риза булыр инегеҙме? Буласаҡ килендәр, кейәүҙәр үҙ милләтеңдән булһын, тип әйтәһегеҙме?**

**Вадим:** Минең был турала уйлағаным юҡ, шулай ҙа ҡыҙымды иртә кейәүгә бирергә йәлләйем. Һәр атай кеүек үк, башта уҡыһын әле, тип әйтер инем ул. Үҙе лә уҡыйым тигән була инде.

**Дилара:** Әлегә киләсәк тураһында һөйләшкәндә һөнәр, уҡыу темаларын ғына ҡуҙғатабыҙ. Мин дә был хаҡта һөйләшергә иртәрәк тип уйлайым. Ә буласаҡ килен-кейәүҙәргә килгәндә, был көн дә килер, Алла бирһә. Балаларҙың үҙ милләтенән йәр һайларына ла ышанам, сөнки улар әле үк башҡорт лицейында, башҡорт мөхитендә, башҡорт балалары араһында белем ала. Быны мин үҙ миҫалымдан сығып та әйтәм. Мин уҡырға барғанда Өфөлә башҡорт мәктәптәре юҡ ине, атайымдың Сипайловола башҡорт мәктәбен асыу өсөн ҡултамға йыйып йөрөгәнен дә беләм. Беренсе класҡа 136-сы мәктәптә башҡорт класы астылар ҙа, мин шунда барҙым. 2-се класҡа иһә лицей асылды. Ә ошо мәктәптәр булмаһа, Өфөлә башҡорт теле бөгөнгө кимәлгә күтәрелмәҫ, башҡорт булып та күпме бала рус телендә һөйләшеп кенә үҫер ине. Башҡорт мәктәбендә уҡығандарҙы ундағы үҙенсәлекле мөхит тәрбиәләйҙер ул. Башҡорт балалары тәртиплерәк, итәғәтлерәк, ягымлы, тип, бер танышым балаһын рус мәктәбенән беҙҙең балалар уҡыған лицейға күсерҙе. Үҙе кеүек милли һыҙаттарға эйә булған балаға, әлбиттә, үҙ мөхитендә анһатыраҡ. Шуға ла икенсе милләт кешеһе менән ғаилә ҡороуҙы баштарына ла индермәҫтәр, тип уйлайым.

Әле бала тип ҡараһаҡ та, Азалия үҙе үк беҙҙе тәрбиәләй. Ҡыҙыҡһынып китеп, мәсеткә йөрөй башланы ла, беҙгә хәләл туҡланыу һ.б. буйынса кәңәштәрен дә бирә. Балалар ата-әсәһенә ҡарағанда яҡшыраҡ булырға тейештәр инде, йәмғиәттең үҫеше лә ошоға нигеҙләнгән.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Һәр кем ғаилә бәхетен үҙенсә күрә. Асаиновтарҙың ғаилә бәхете иһә ата-әсәләре, ҡайны-ҡәйнәләре менән аралашып, олоно - оло, кесене кесе итеп, үҙ-ара йылы мөнәсәбәттәр ҡороп, халҡыбыҙҙың йола-ғәҙәттәренә таянып йәшәүгә нигеҙләнгән. Дәүләт башлыҡтары ла тап ошондай ҡиммәттәргә өҫтөнлөк биргән ғаиләләрҙе башҡаларға өлгө итеп ҡуя - былтыр улар илебеҙ Президенты ҡулынан "Ата-әсә даны" миҙалы алыуға өлгәшкән.**

Ләйсән ВӘЛИЕВА
әңгәмәләште.

ПСИХОЛОГ ЫҢҒАЙҒА КӨЙЛӘЙ

# ҮҘЕҢДЕ ЯРАТЫРҒА ӨЙРӘНМӘЙСӘ...

## башҡаларҙы яратып булмай



(Башы 7-се биттә).

**▸ Күптәр йылдар дауамында бер яйға һалынған, өйрәнелгән уңайлы зонанан сығырға көс тапмай. Нисек күңелгә ауырлыҡ һалмайынса, ошо зонанан сығырға һәм нимәләр эшләй башларға?**

- Уңайлы зона эсендә кеше тормошон үҙгәртерлек, яңы бейеклектәргә илткән стимулды тоймай. Уның тормошо бер үк ҡаҙанда ҡайнай, уны үҙгәртеү өсөн талап ителгән ҡыйыулыҡ бөтөнләй юҡ. Был, тәбиғи, кешегә үҫергә ҡамасаулай. Уңайлы зонанан нисек сығыуҙы һәр кем үҙе хәл итә, шулай ҙа барыһы өсөн дә файҙалы уртаҡ кәңәштәр ҙә бар. Мәҫәлән, спорт менән шөғөлләнеү. Ә бына йөҙөүгә йөрөү яҡшы физик көйләнеш кенә бирмәй, стресстан ҡотолорға булышлыҡ итә. Спорт өйрәнелгән сиктәрҙән сығырға һәм шәхси үҫеште башларға булышлыҡ итеүҙә ҙур роль уйнай.

Ғәҙәттәрҙе яйлап үҙгәрткәндә уңайлы зонанан сығыуы әллә ни ауырлыҡ тыуҙырмаясаҡ. Эшкә һәр ваҡыт бер генә юлдан йөрөйһөгөҙмө? Иртәгә өйҙән сыҡҡас өйрәнелгән маршрут буйынса түгел, ә икенсе яҡтан китегеҙ. Ҡайтҡанда ла ғәҙәттәге юлды үҙгәртегеҙ. Бер ғәҙәтте үҙгәрткәндән һуң, икенселәренә тотонорға була. Ҙур еңеүҙәргә бәләкәй аҙымдар илткәнен онотторға ярамай. Сәйәхәт итегеҙ. Сәйәхәт мотлаҡ сит илдәргә сығыуҙы аңлатмай. Иң мөһиме - яңы тойғолар, тәьҫораттар бүләк итеүсе сәйәхәттәр. Ҡалала яңы парк асылғанмы? Барығыҙ шунда һәм унан мотлаҡ күңелегеҙ үҫеп, яңы уйҙар менән янып ҡайтасаҡһығыҙ. Күрше ауылда йәшәгән туғаныңа барып әйләнеү, икенсе райондағы курсташыңа ҡунаҡҡа барыу - быларҙың барыһы ла сәйәхәт. Донъя мәшәҡәттәре бер ҡасан да бөтмәй, үҙегеҙгә үҙегеҙ ял ойоштора белегеҙ. Иң мөһиме - тәүге аҙымды эшләргә, артабан үҙенән-үҙе көйләнәсәк.

**▸ Иң күбе ниндәй ғаилә проблемалары менән һеҙгә мөрәжәғәт итәләр?**

- Ғаилә психологы булараҡ, миңә ата-әсә менән балалар араһындағы мөнәсәбәтте яйға һалыуҙа, балалар һәм үҫмерҙәрҙең проблемаларын хәл итеүҙә ярҙам һорап мөрәжәғәт итәләр. Балаларҙың тотороҡһоҙлоғон, бәйһеҙлеген еңә алмайынса, уларҙың өйҙә, балалар баҡсаһында йәки мәктәптә агрессия күрһәтеүҙәренән арып киләләр. Шулай уҡ социумда үҙҙәренә урын таба алмаған балалар күп - уларҙың дуҫтары юҡ, аралашыу нык ауырлыҡ тыуҙыра, шаяртыуҙы аңламайҙар, ҡыҙып баралар һәм башҡалар. Тағы ла балалар араһында аппетит юҡлығы, яҡшылап ашамау, ашауҙан бөтөнләй баш тартыу, йоҡоһоҙлоҡтан интегеү кеүек психолог ярҙамы талап итеүсе мәсьәләләр йыш осрай.

Шулай уҡ миңә ҡатын менән ир араһындағы мөнәсәбәттәрҙә ҡытыршылыҡ, аңлашылмаусанлыҡ килеп тыуғанда ла мөрәжәғәт итеүселәр күп. Күп кенә ғаилә парҙары араһында бер-береһенә көнкүреш кимәлендә дәғүәләр күп. Психологтың төп бурысы - үҙенә килгән һәр кемдең, һәр парҙың, ата-әсә менән баланың араһындағы ығы-зығының төп сәбәбен төшөнөү һәм ярҙам ҡулы һуҙыу. Ғәҙәттә, проблема ябай ғына күренһә лә, уның тамырҙары бик тәрәндә була.

Гәзит уҡыусыларға шундай кәңәш бирер инем. Баланы тыңларға өйрәнегеҙ. Уға бүленгән 10 минут ваҡыт эсендә донъя емерелмәйәсәк, эш ҡасмаясаҡ. Әгәр ҙә бәләкәй сағында уға ҡарата иғтибарһыҙлыҡ күрһәтһәгеҙ, ул ҙурайғас үҙегеҙгә ҡарата ла ошондай уҡ мөнәсәбәттә булырға мөмкин.

Бәләкәй генә булһа ла, баланан кәңәш һораған булығыҙ, теге йәки был ваҡиғаға ҡарашы менән ҡыҙыҡһыныгыҙ. Ниндәйҙер аш-һыуҙы яратмауын белдерһә, "файҙалы", "шулай кәрәк" тигән принциптарға таянып, баланы көсләп ашатмағыҙ. Һеҙ үҙегеҙгә оҡшамаған аш-һыуҙы ашамайһығыҙ бит, уның да теләгенә төкөрөп ҡарамағыҙ.

Үҙ балағыҙға ышанығыҙ. Уның бәләкәй генә ҡыуанысын да ҙур күреп бергә шатланығыҙ, илап йәки ниндәйҙер проблема менән килһә, ҡул һелтәп ҡарамағыҙ. Ул үҙенең ышаныслы таянысы булыуын күреп-тойоп үҫергә тейеш.

Ғаилә парҙарына иһә килеп тыуған мәсьәләне бергә ултырып һөйләшеп хәл итегеҙ, тип әйткем килә. Ирегеҙҙең йәки ҡатынығыҙҙың ниндәйҙер ҡылығы, әйткән һүҙе оҡшаманымы - уға был хаҡта асыҡтан-асыҡ әйтеү һәм проблеманы шул урында юҡ итеү мөһим. Икенсе яртығыҙ һеҙҙең нимәгә үсегеп йөрөүегеҙ тураһында күрәҙәселек итергә тейеш түгел. Ғаилә - ике яҡтың да тойғолар, мөнәсәбәттәр өҫтөндә берҙәм эшләүе.

**▸ Ғаиләлә кемдер "Мин бәхетһеҙ", "Миңә ауыр", тиһә, нимә эшләргә, уның яҡындарына үҙҙәрен нисек тоторға?**

- Тәү сиратта, уның яңғыҙын ҡалдырмаҫҡа. Ләкин был хәстәрлек артыҡ баҫымлы булырға тейеш түгел. Бындай саҡта уның менән рухи бәйләнештәре нык булған кеше һөйләшергә, был хәлдең сәбәбен аңларға тырышыуы кәрәк. Иң мөһиме, уны рухи көсһөҙлөктә ғәйепләргә, "Һин бит атай йәки әсәй, нимәгә мәүешләнеп йөрөйһөң?", "Һинә күпме кеше ҡарап тора, үҙеңде ҡулға ал!" һәм башҡа ошондай һүҙҙәр әйтеүҙән тыйылыу кәрәк. Эйе, бәлки, бындай һүҙҙәрҙән һуң ул һеҙгә үҙенең ғәҙәттәге хәленә ҡайтҡандай тойолор, ләкин был алдаҡ тойғо булыр. Был хәлгә илткән сәбәптең айышына төшөп, уның өҫтөндә эшләмәйенсә тороп, кеше үҙ хәленә ҡайта алмаясаҡ. Ә хәл ителмәгән мәсьәлә артабан тағы ла ауырыраҡ эҙемтәләргә килтерергә мөмкин.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Был тормошта һау булып, үҙебеҙҙе аңлап һәм ҡабул итеп, килеп тыуған мәсьәләләрҙе хәл итерлек рухи көскә эйә булып йәшәргә яҙһын һәр кемгә. Иң мөһиме, йән яраларын төҙәтерлек саралар табып, күңел тыныслығында һәм таҙалығында ғүмер итеүҙәр, могайын.**

Гөлназ МАНАПОВА
әңгәмәләште.

УЙЛЫҒА - УЙ



# АУЫР ХӘЛГӘ ТАРЫҒАНДА ЛА...

## сабыр булыу фарыз

**Фәүзиә Мөхәмәтшинаның һәр саҡ көнүҙәк хәлдәр сағылдырылған мауыҡтырғыс мәҡәләләрен ҙур ҡыҙыҡһыныу менән уҡыйым. Башҡортостан, Рәсәй күләмендәге йә донъя хәлдәренә ҡағылышлы булһынмы, уның тос фекерҙәре менән танышып, ҡәнәғәтлек табам. Яҙмаларының береһендә ул хөкүмәт йыйылышында "күтәрелә яҙған" бер мәсьәләгә ҡағыла. Тормош ҡороға йыйынған йәштәрҙән генетик ярашлылыҡ хаҡында белешмә талап ителеү ихтималлығы тураһындағы хәбәр ул. Тап ана шул хаҡта мин дә интернет селтәренән уҡып, бер аҙ тынысһыҙлана биргәйнем. Ярай әле, ул һорау көн тәртибенә ҡуйылмаған, шулай ҙа, өйләнешергә йөрөгән бер килке йәштәрҙе тулҡынландырып алғандыр был хәбәр.**

Фәүзиә һылыуҙың "Бүләктерме, һынауҙырмы..." тип аталған шул мәҡәләһе гәзитебеҙҙә сыҡҡас, бер яҡташ ғаилә менән элегерәк булған хәлде иҫләнем. Өйләнергә ниәтләнеп йөрөгән бер йәш егет һөйгән ҡыҙын үҙенең ата-әсәһе менән таныштыра. Улын яратҡан, хәстәрлекле ата-әсә, әлбиттә, булаҫаҡ киленден ғаилә хәле менән ҡыҙыҡһынған. Егеттең ата-әсәһе ҡыҙҙың туғандарының береһе тыуымыштан һаңғырау-телһеҙ икәнлеген белгәс тә, улдарын "тоҡомо ауырыу" булған ҡыҙға өйләнмәҫкә өгөтләргә тотона. Егет ата-әсәһенең һүҙенән сыҡмай һәм һөйгәнен кире ҡаға. Сәләмәт ғаиләлә үҫкән икенсе бер ҡыҙҙы кәләшлеккә ала. Күңелдә ҡырып торған проблеманан "әҫе мәлендә" ҡотолғас, хәҙер инде һис бер нәмә өсөн хәүефләнмәй, йәшә лә йәшә!.. Бер йылдан был йәш ғаиләнең сабыйы донъяға килә. Тик, оҙаҡламай, бәләкәстең тома һаңғырау икәнлеге беленә... Ошоғаса этиологияһы (барлыҡҡа килеү сәбәбе) яҡшылап асыҡланмаған был сир медицинала "глухонемота" тип атала.

Бына шулай, хатта саманан тыш хәстәрлек тә үҙен һәр саҡ ҡына аҡламай икән шул. Үҙ күләгәңдән ҡасып китә алмаған кеүек, Аллаһы Тәғәлә яҙған яҙмыштан бер ҡайҙа ла тайшанып булмай. Халҡыбыҙҙа "Бүренән ҡаскан - айыуға ҡапҡан" тигән әйтем дә йөрөй. Беҙҙең яҡта әйтмешләй, берәүҙең дә эсен ярып ҡарай алмайбыҙ. Бик һирәк кенә осраҡтарҙа генетик анализдар арҡаһында киләсәк быуындың һаулығы хаҡында тик ниҙер фаразлау ғына мөмкин, әлбиттә, әммә шунан да ашып китеп булмай. Ир менән ҡатын бергә йәшәй башлағас, УЗИ, компьютер томографияһы һымаҡ тикшеренеүҙәр инде үҫеше башланған яралғы хаҡында ниндәйҙер мәғлүмәт биреүе лә бар, әммә, быныһы - башҡа тема.

Мин хеҙмәт иткән часта бер һалдат "ҡалаҡҡа һалып йоторлоҡ" бер һылыуға ғашиҡ булды. Тик шуныһы... һалдаттың һөйгәне тыуымыштан "телһеҙ" ине. Үҙе лә төҫкә-башҡа матур булған егет ҡыҙҙы алдаштырып, "былай ғына" йөрөйҙәр тип уйлағайны күптәр. Әммә һалдат етди, намыҫлы булып сыҡты. Рәсми никахҡа тороп, "һалдат туйы" яһап, кәләше менән бергә дембелгә ҡайтып китте. Үҙе тыуып үҫкән ғаиләлә бер туған апайының да тап шундай сире булған икән. Бала сағынан шул апайы менән аралашып, телһеҙҙәрҙең телен яҡшы үҙләштергән егет был ҡыҙ менән дә бик тиҙ уртаҡ тел тапҡан. Һалдаттың атаәсәһе телһеҙ киленгә риза булып, уны ихлас ҡаршы алғандыр һәм йәш ғаилә бәхетле йәшәп алып киткәндер, моғайын, тип ышанам.

Эйе, борон башҡорт халҡы сит ауылдан берәй таныш булмаған ғаилә менән туғанлашыр булһа, булаҫаҡ ҡоҙа-ҡоҙағыйҙары, уларҙың нәҫел-нәсәбе хаҡында белешергә тырышҡан. Белгән кешеләрҙән һорашып, башлыса, был ғаиләнең әхлаҡи, шулай уҡ матди хәле менән дә ҡыҙыҡһынған. Һәр ата-әсә балаһының яҡшы кешегә юлығып, бәхетле ғүмер итеүен теләй бит инде... Ғөмүмән, күпме генә тырышһаҡ та, булаҫаҡ ҡатындың (ирҙең) эсен-тышын барыбер "үтә күрә" алмайбыҙ, тураһын ярып әйткәндә, ғәмәлдә "тоҡ эсендәге бесәй"ҙе өйөбөҙгә алып ҡайтабыҙ бит инде. "Өләшөбөҙгә тейгән көмөшөбөҙ"ҙең кемлеген күпмеләр ваҡыттан һуң ғына аңлай башлайбыҙ. Әлеге әйтмешләй, генетик ярашлылыҡ хаҡында әллә күпме справкаң булһа ла, ғаиләнең киләсәген хәл итеп булмаясаҡ.

Икенсе яҡтан, гуманлыҡ күҙлегенән сығып ҡараһаҡ, туғаны (хатта үҙе лә!) сирле егеттең йә ҡыҙҙың да ғаилә ҡороп йәшәргә хаҡы бар. Мәҡәлә авторы Фәүзиә Мөхәмәтшина балаларҙың тыумыштан була торған сирҙәренең эске һәм тышҡы факторҙарын, бихисап сәбәптәрен дә килтереп, аҙаҡ "бала ата-әсә өсөн иң ҡәҙерле бүләк, ә бәлки, Аллаһы Тәғәлә һынауылыр" тигән фекерҙе ҡуйыуы бигерәк күңелгә ятты. Ысынлап та, Раббыбыҙ тарафынан бер-береһенә хәләл итеп яраклылған ир менән ҡатынға ана шундай һынау ҙа ҡуйыуы хаҡында етди фекерләүгә көйләй автор. Зәғиф тыуған балаһынан (үҙенең гәзизенән!) баш тартыусылар, йә "нәҫеле насар" тигән һылтау менән никахын тарҡатҡан кешеләрҙең дә булыуы хаҡында иҫкә төшөргән авторҙың һүҙҙәренә нисек ҡолаҡ һалмаҫһың! Үҙенең фекерен һәр тарафтан дәлилләп, кәрәк саҡта ярайһы ғына ҡыйыу сығыш яһаған был авторҙан мин үҙем дә йыш ҡына үрнәк алырға тырышам.

Халыҡ-ара сәйәсәт темаһында ла тәрән йөҙгән был журналистың бөгөнгө көнөбөҙгә ҡағылышлы тағы бер яҙмаһына иғтибар итәйек. Гәзитебеҙҙең күптән түгел сыҡҡан һанында уның "Картлыҡтан көләү - көлкө түгел" исемле бер мәҡәләһе менән дә таныштыҡ. АҠШ президенты Байден телгә алынған был материалды күптәр уҡып, автор менән килешеп, хатта баш ҡағып та ултырғандарҙыр, тип уйлайым. Ысынлап та, бөгөн власть башында торған шул бабайҙың киләһе һайлауҙа тағын да президентлыҡҡа баш тығыуы - иҫ-аҡыл китерлек бит! Өс-дүрт йыл элек, Трамп урынына тәхеткә был ҡарт килергә йыйынып йөрөгәндә, минең "Керән ҡара шалҡанға ҡарағанда татлыраҡ түгел" (Урыҫса - "Хрен редьки не слаще") тигән мәҡәләм баҫылып сыҡҡайны. Хәҙер ҙә ана шул мәл етеп килә. Бер яҡтан уйлағанда, ғәйәт оҫта журналисты ла һүҙҙә отторманған, физик яҡтан типһә - тимер өҙөрҙәй президентыбыҙ фонында ана шул "дуҫ булмаған" илдең етәксеһе тәнтерәкләп йөрөгән үтә ҡарт кеше булыуы беҙҙең өсөн мәҙәк һымағыраҡ та тойола. Әммә... уның ҡулында ла - "Йәҙрә суманы"! Ысын мәғәнәһендә! Йыш ҡына уның яңылыш хәбәр һөйләп йә ике өҫтәл араһында аҙашып китеүен дә беҙ телеэкрандарҙа күргеләйбеҙ. "Старческий атеросклероз головного мозга" тип аталған ҡартлыҡ ауырыуы, гәҙәттә, тәрәнәйә генә бара бит ул! Был ҡарт, кәбе "эште боҙоп" ташламаһын, тип тә борсолоусылар бар. Ҡартлыҡтан көләү, әлбиттә, көлкө түгел, әстәғфируллаһ! Былдай хәлдән беребеҙ ҙә гарантияланмағанбыҙ. Мейес боштың арҡаһын ҡыҙҙырып ҡына ятыу урынына, инде туғыҙынсы тиҫтәһен ҡыуып барған меҫкен бабай ҡайсаҡ йәл дә булып китә. Уны ҡурсаҡ итеп уйнатып ҡына йөрөтөүсе хәйләкәр ярҙамсылары ла юҡ түгелдер. Һәр хәлдә, беҙ тик ана шулай итеп үҙ-ара ғына әңгәмәләшеп алабыҙ инде...

Фәүзиә һылыуҙың һәр мәҡәләһен уҡыған һайын, үҙең дә һиҙмәҫтән, тағы әллә ниндәй фәлсәфәләргә төшөп китәһең. Әлеге халыҡ-ара хәлдәрҙе ғаилә тормошо менән дә сағыштырып алырға була. Илдәр араһында түгел, бәғзе ваҡыт, хатта бер бәләкәс ғаилә эсендәге үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе йайлап ала алмайбыҙ. Һәр ғаилә - үҙе бер кескенә донъя һымаҡ бит ул. Әгәр ғаилә башлыҡтары дөрөҫ сәйәсәт алып бармай икән, ығы-зығыны көт тә тор. Ә бит, ысынлап та, күп кенә ғаиләләрҙә ир менән ҡатын бер-береһенә ниндәй генә "санкциялар" иғлан итмәй, ҡайһы берҙә хатта һуғышҡаса барып етә. Тормошта, күп кенә нәмәгә сабырлыҡ ҡылып, балаларҙың бәхете өсөн, бер аҙ "сигенә биреп" булһа ла, үҙ-ара мөнәсәбәтте яйлау яғын ҡарарға кәрәктәр. "Түнәрәк өҫтәл" артында ултырып, аҡыллы ғына һөйләшеп, уртаҡ тел табырға тырышырға кәрәклеген аңларға теләмәү яҡшыға алып бармай шул. Һөҙөмтәлә бер ниндәй ҙә гәйебе булмаған балалар зыян күрә. Ата-әсәһе татыу булған ғаиләлә балалар ҙа үҙҙәрен бәхетле тоя бит. Ә инде икеһе - ике яҡҡа тартып торған ата-әсәнең гәзиздәренә ни эшләргә?.. Улары ололарҙың бына ошондай сәләмәт булмаған мөнәсәбәтен күреп үҫә. Һөҙөмтәлә - киләсәкке быуындар ҙа ана шундайыраҡ юҫыҡҡа көйләнә. Бына ниңәһе - ҡыҙғаныс! "Йәштәребеҙ һыйыша алмай, никахтарын тарҡата, илебеҙҙә айырылышыуҙар күп", тип саң ҡағабыҙ. Иң тәү сиратта үҙебеҙ балаларыбыҙға, йәштәргә үрнәк булырға тейешбеҙ түгелме, йәмәғәт?

Һүҙ аҙағында. Башта иҫкә алған мәҡәләнең һорауына ярашлы, Аллаһы Тәғәләнең һәр һынауын лайыҡлы үтәйек, тимәксе инем. "Мосолман кешеһе өсөн хатта сәнскәккә сәнселеп алыу ҙа хәйерле", тигән хәҙис бар. Ниндәй генә сетерекле, ауыр хәлдәрҙә тороп ҡалыуыбыҙға ҡарамаҫтан, Аллаһ илсеһе с.ғ.с. "Әлхәмдүлилләһи ғәлә күлли хәл" (һәр хәлдә лә Аллаһҡа маҡтау) тип әйтергә ҡушҡан. Ҡылған сабырлығыбыҙ өсөн Раббыбыҙ ҙур әжер (бүләкләү) вәғәҙә итә. Әммә быны һәр саҡ түҙеп, ҡул ҡаушырып ҡына ултырырға кәрәк икән тип аңлау ярамай, әлбиттә. Хәлебеҙҙән килгәнсе һәр төрлө ауырлыҡтарҙы еңеп сығырға ынтылыу мөмкинлеге лә бирелгәнен иҫтән сығармайыҡ.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

---

*ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!*

# МАШИНА "ТЕГЕП" ТӘ...




**Тормош йәме - балалар. Барыбыҙ ҙа уларҙың һаулығы өсөн борсолабыҙ, унайлыҡтарын уйлайбыҙ, күңелдәрен күрәбеҙ, төрлө уйын төрҙәре уйлап сығарабыҙ һәм башҡалар. Ошо турала уйлап йөрөй торғас, үҙем өсөн килемле генә шөғөл табып алдым. Гәзит уҡыусыларға уның хаҡында яҙып үтәйем тимен, бәлки, кемгәләр оҡшап төшөр ҙә әҙме-күпме килем килтерер шөғөлөнә әйләнер.**

Ҡалала йәшәгән балалар өсөн төрлө уйын бүлмәләренең күплегенә иҫ-аҡыл китер. Йәндәре теләгәнен һайлап, сәғәттәр буйы уйнарға була, ата-әсәләренең кеҫәләре генә ҡалын булһын. Ләкин бына беҙҙең һымаҡ ауылда йәшәгәндәрҙең балалары был йәһәттән үҙ көндәрен үҙҙәре күрә. Бер шулай икенсе ауылдан ҡунаҡҡа килгән ейәндәремдең ике машинаны бергә ултыртып, таксист булып уйнауҙарын күреп ҡалдым. Ниндәйҙер ҡара ҡумта табып, шунда "Такси", тип яҙған булғандар ҙа иҫтәре китеп уйнай былар.

Икенсе көн иртән тороуҙарына әллә ҡасандан һандыҡ төбөндә ятҡан материалдарҙан ултырғысҡа кейҙермәле, такси машинаһын хәтерләткән тышлыҡ тегеп ҡуйҙым. Алдына һандар яҙылған номер "һуҡтым", тәҙрәләр эшләнем, ғөмүмән, рәтен килтерҙем инде. Ҡыуанғандарын күрһәгеҙ ине ике баланың, көнө буйы уйнанылар ҙа ҡуйҙылар. Икенсе көнөнә күрше балалар ҙа "такси"ла йөрөргә килделәр.

Был япманың шундай ҙур иғтибарға лайыҡ булыуын күргәс, башҡа төрлө япмалар эшләү тураһында ла уй барлыҡҡа килде. Бер нисә йыл эсендә өйөбөҙҙә ГИБДД, тиҙ ярҙам, янғын һүндереү һәм башҡа машиналар, тракторҙарҙың бер нисә төрө барлыҡҡа килде. Шулай уҡ ҡыҙҙар уйыны өсөн газ плитәһен хәтерләткән япма эшләүҙе лә яйға һалып алдым. Үҙебеҙҙә лә, балаларҙың өйҙәрендә лә берәр дана япмалар эшләп ҡуйғас, күршеләр, туғандар, таныштарҙың һорауы буйынса уларҙың балаларына ла тегеп бирә башланым. Дан таралған һайын клиенттар ҙа күбәйҙе, килем дә артты. Бына ошо рәүешле уйламағанда килемле генә шөғөл таптым үҙемә. Тауарҙы күпләп һатып алам да, кәрәкле "машинаны" тегеп тә ҡуям.

Бөгөн генә түгел, һәр ваҡытта ла аҡса эшләүҙең төрлө юлдарын эҙләгән кешемен. Минең ысулым берәйһенең ҡолағына эләгеп, килем килтерергә булышлыҡ итһә, мин бик шат булырмын. Һеҙгә - аҡса, балаларға - ҡыуаныс булһын.

**Сәйҙә МЫРҘАБУЛАТОВА.**
**Әбйәлил районы.**




- Тик унының һөйөүе, аҙаҡ аңлауымса, әсәйеңә яуап итеп түгел, ә беҙҙең ярайһы ғына бөтөн донъябыҙға ҡарата тоҡанып киткән. Була бит ер йөҙөндә әҙәмдәрҙең шундайы ла. Мин үҙем уны тәү күргәндән үк мөрхәтһенмәнем. Күңелем нимәлер һиҙгән һымаҡ, һеркелдәп тик торҙо. Саманан артыҡ ябай, бигерәк татлы телле һәм ялағайлыҡҡа тартым итәғәтле ине ул. Ә ир кешегә юхаланыуҙың артығы килешмәй. Ана шуныһы оҡшаманы миңә.

- Ә әсәйем? Әсәйем күрмәнеме һуң ошоларҙы?

- Әсәйеңме? Ул тегенең яһалма ҡыланышынан һушын юйҙы. Бәләкәйҙән атайһыҙ ҡалып, ысын ир затының ниндәйерәк булырға тейеш икәнлеген белмәгәс ни. Өйләнешергә тәҡдим алыу менән шунда уҡ, уйлап та тормаҫтан, ризалығын бирә һалды. Һыңар бөртөк баламдың күңелен китмәйем, тигән булып үҙем дә өндәшмәнем. Ә, яҡшатланып тормайыса, өндәшергә кәрәк булған. Хәйер, минең әйтеүемдән фәтүә булыр инеме икән, белмәйем. Ҡолағына ҡәҙәр ғишыҡ утына сумған әсәйең ул мәлдә бер кемде лә тыңлап торорға һәләтле түгел ине шикелле.

- Өләсәй! Ә ғишыҡ уты тигәнең нимә була?

- Ғишыҡ утымы? Ул һәр кемде аҡылдан яҙҙырыр хәлгә еткереп, бар булмышын йә көйҙөрөп, йә күктең етенсе ҡатына күтәреп алыр көс. Ул көскә әле бер кешенең дә ҡаршы тора алғаны юҡ. Бындай осраҡта, ғәҙәттә, йөрәгеңдән алда аҡылыңа ҡолаҡ һал, тиҙәр ҙә бит... - Сәғиҙә һөйләүенән туҡталып, ирекһеҙҙән эркелеп киткән күҙ йәштәрен ҡоротоп алды. Алда әйткәнемсә, аҡыл тигәнең әлеге мәлдә зәғифләнгән була. Аҡылды тыңлай белер өсөн дә аҡыл кәрәк. Ҡыҙғаныс, күңелендә боҙоҡлоҡтоң тамсыһы ла булмаған әсәйеңден дә йөрәге аҡылынан алды йөрөнө. Эй-й, йәшлек! Нимәләр генә ҡыландырмайһың һин кешеләр менән!

...Туйға тиклем, тигән булып теге ир әсәйеңде район үҙәгенә күсереп алды. Тәүге осорҙа былай арыу ғына йәшәп киткән һымаҡтар ине. Тормоштарының көйлө генә башланып китеүенә мин дә ҡыуанып йөрөнөм. Әле һуғыштан алда һалынған уҫаҡ өйөбөҙ иҫкереп киткәнлектән, яңы торлаҡ йүнләргә ҡарар иттек. Барлы-юҡлы аҡсамды, һуңғы тиненә ҡәҙәр, буласаҡ атайыңа тотторҙом да сығарҙым. Йә инде, исмаһам, ҡош телендәй булһа ла ҡағыҙ яҙҙырып алһамсы!..

- Алданымы? - Мәҙинәнең был һорауы балаларға хас ябайлыҡ менән яңғыраны.

- Алдауҙы ғына һөйләйһең, ищеү нисегерәк төп башына ултыртты. Уның ошоғаса эшләгән һәр эше яһалма, һәр һүҙе ялған, барлыҡ ҡыланыштары ла исем өсөн генә булған икән. Хатта өйләнеүе лә дөйөм ятаҡтан урын алыу өсөн генә булған. Сөнки буйҙаҡтарға унан урын бирмәйҙәр.

Ә иң аптыратҡаны, яһил әҙәмдең Сибай ҡалаһында ғаиләһе барлығы асыҡланғас булды. Бер йәше тулыр-тулмаҫ улын ҡарап ултырған ҡатыны тегенең мажаралары хаҡында белмәгән дә. Ҡайҙан белһен, уны ла бит: "Себерҙә эшләп йөрөйөм, тиҙҙән күп итеп аҡса алып ҡайтам", - тип алдаған булған. Хәйер, күп итеп аҡса алып ҡайтам, тигәне дөрөҫлөккә тап килә инде былай.

Ғәзиз баламдың ауыҙынан өҙөп, үҙемде ҡыҫып йыйған егерме мең һумды ҡулына төшөрөү менән уның холҡо ҡырҡа алышынды, шунда уҡ күрҙем. Егерме мең - ул саҡтарҙа ҙур дәүләт һаналды. Уға өрйәңынан ике-өс машина, йәиһә, һәйбәттән фатир һатып алырға була ине. Әйткәнемсә, теге оңҡоттоң холҡо шунда уҡ кире яҡҡа үҙгәрҙе. Юҡ сәбәпте бар итеп, әсәйеңә бәйләнер булып китте, теләһә кемдән ҡыҙғанып маташҡан булды, урынһыҙға ҡыйырһытты. Ахырҙа, никахһыҙ-никеҙ бергә йәшәүҙәренә йыл тулыр-тулмаҫ, әсәйеңде ҡыуалап ҡайтарып та ебәрҙе. Беҙ уның менән һуҡыр тин аҡсаһыҙ көйө, ошо ярым серек өйҙә тороп ҡалдыҡ. Бер айҙан һин донъяға килдең. Ҡыуанаһы урынға әсәйең дә, мин дә быға бик ҡайғырҙыҡ. Ҡайғырмаҫлыҡмы, ҡаш төҙәтәбеҙ, тип, күҙҙе сығарҙыҡ та баһаң: үҙ ҡулдарыбыҙ менән һине бәхетһеҙ итеп, кеше алдында мәсхәрәгә ҡалдыҡ. Ояты ни тора! Шулай ҙа әлеге хәлдәрҙең нисегерәк барып бөтөрө тураһында уйлау түгел, башыма ла килтерә алмай инем. Артабан һинең менән мине ҡот осҡос фажиғә һағалап торған булған. Һиңә ике ай ҙа тулмаған ине әле, намыҫы тапалып бысраныуҙан рухы һынған әсәйең... үҙ-үҙенә ҡул һалды. Бәләкәс сабыйын етем итерен дә уйлап торманы хатта... Сөнки уйларлыҡ һәләте ҡалмаған ине. - Тауышы ҡалтыранып киткән Сәғиҙә ҡапыл-ҡара шымып ҡалып, оҙаҡ ҡына өндәшмәй торҙо.

- Тимәк, әсәйемде атайым үлтергән булып сыға? - Ишеткәндәренән һушын йыя алмай ултырған Мәҙинә ауыр тынлыҡты боҙҙо.

- Эйе, үлтереүен үлтермәһә лә, шул аҙымға барырға мәжбүр итте.

- Әҙәм аҡтығы икән...

- Юҡ, яңылышаһың. Иң аҡтыҡ һаналған әҙәми зат та яҡындары менән ул рәүешле ҡыланмаҫ. Әсәйеңде лә әйтер инем, ниндәйҙер бер мөртәт арҡаһында балаһын үкһеҙ ҡалдырҙы. - Сәғиҙә ауыр көрһөндө. - Шулай итеп, ҡыҙым, бөгөнгө ҡырағай заман менән күҙгә-күҙ ҡарашып икебеҙ генә тороп ҡалдыҡ. Иң терәшкәндәй бер кемебеҙ ҙә юҡ. Мин инде, ярай, йәшәрен йәшәгәнмен, исмаһам, һин бәхетле булһаң ине...

"Исмаһам, һин бәхетле булһаң ине, бәпкәм... " - Мәҙинәнең ҡолаҡ төбөндә ҡасандыр өләсәһе әйткән һүҙҙәр яңғырап киткәндәй булды. Их, өләсәйем! Минең өсөн әсәй ҙә, атай ҙа, башҡаһы ла булған өләсәй генәм! Мин, тип, минең бәхет хаҡына нужаларҙың ниндәйен күрмәнең икән! Үҙең бит аслы-туҡлы булһаң-булдың, әммә мине бер ваҡытта ла тәғәм ризыҡҡа тилмертеп ултыртманың, үҙең уңып бөткән хан заманғы кейемдәреңде кейеп йөрөһәң дә, мине ҡурсаҡ ише тоттоң. Кеше алдында кәм-хур булмаһын тигәнһеңдер инде, әй, намыҫсан өләсәй! Ошоларҙың барыһын да күреп йөрөһә лә был бер нәмә лә аңламай тип уйлағанһыңдыр. Ә мин күрҙем дә, аңлай ҙа торған инем. Шулай ҙа һинең үҙ яҙмышыңды минең бәхетем хаҡына ҡорбан итеүеңдең мәғәнәһен тулыһынса әле килеп саҡ төшөнә алдым шикелле. Һинән айырылып йәшәй башлағас ҡына.

Яңғыҙ кешегә тейешле таҡа-тоҡа пенсияңды өҙөп-йолҡоп икәүебеҙгә еткерергә була, көскә осто-осҡа ялғап йәшәнең дә баһаң! Ҡулыңа аҙ ғына аҡса кергән булһа, әүәл мине ҡайғыртыр инең. Матур итеп кейендереп ҡуяһың да, үҙең, ситтән ҡарап, эй ҡыуанған булаһың. Лавканан бер нисә бөртөк "лампаси" алып ҡайтаһың да, минең шуларҙы һурғанымды күреп, йәнә ҡыуанып бөтә алмайһың. Ә үҙеңдең шул мәлдә яңы күлдәк кейәһең, татлы ризыҡты ауыҙ итеп ҡарайһың килмәнеме икән?..

Әле бына әллә ҡасан үткәндәрҙе хәтергә төшөрөүҙән һине йәлләп ултырған булам, ә шуларҙың бәйәһен бер килеп кире ҡайтара алырмынмы? Ҡайтарырмын! Үлһәм үлермен, өләсәй, ҡайтарырға тырышырмын. Изгелек ерҙә ятып ҡалмаҫ. Шулай ҙа хәҙергә ниәтләгән ниәттәрҙе тормошҡа ашыраһы бар, ғәфү ит...

* * *

Теге фотоны күреп тетрәнгән Мәҙинә, был хаҡта берәүгә лә өндәшмәй торорға ҡарар итте. Хатта ғүмерҙә серен йәшермәгән өләсәһенә лә! Ҡағыҙ киҫәгендәге һүрәткә ышанғанда Нәҙир бит уның бер туған ағайы килеп сыға. Ошоно был өйҙә әлегә унан башҡа бер кем дә белмәй. Белмәгәне хәйерле лә. Туҡта, ә ни рәүешле Нәҙир унан өлкәнерәк булып сыға һуң? Ә, иҫенә төштө, өләсәһе бит, әсәйеңә өйләнмәҫ элек уның ҡатыны булған, тигән ине. Тимәк ҡатыны ғына түгел, улы ла булған. Үәт эт нәмә!

Әстәғи! Этҡә тиңләп ултырһа ла ул кеше минең атайым була бит әле. Минең яҡты донъяға килеүемдә уның да ҡатнашлығы бар. Ә һин уны, ана, нимә эшләтергә йыйынаһың. Көфөр ғәмәл булып сыҡмаҫмы ошо? Әлегә һуң түгел, әллә кире уйларға ла ҡуйырғамы? Ә әсәйем яҙмышы? Өләсәйемдең бөтмәҫ рәнйеүҙәре? Үҙемдең күҙ йәштәрем? Улары шул килеш ҡалырға тейеш буламы? Улар өсөн кем ҡон ҡайтарыр? Ю-юҡ, яуызлыҡтың күңелен ирәйтеп, шул көйө ҡалдырырға ярамай! Яуызлыҡ ҡылынған икән, уны ҡылыусыһы һис һүҙһеҙ яуап тоторға һәм тәғәйен язаһын алырға тейешле. Башҡаса булыуы мөмкин түгел. Һәр хәлдә, мәктәптә беҙҙе шулай өйрәттеләр: хатта тылсымлы әкиәттәрҙә лә яҡшылыҡ яманлыҡтан һәр саҡ өҫтөн сыға.

**(Дауамы бар).**

---

СӘХНӘЛӘ...



# КЕШЕ БУЛЫП ҠАЛЫРҒА...

**Салауат башҡорт дәүләт драма театрында "Метранпаж мажаралары" тигән яңы спектакль сәхнәгә ҡуйылды. Премьера Башҡортостандың халыҡ артисы Фәтих Ҡолһариндың юбилейына ла арналған. Актерҙар тамашасыны нимә менән шатландырыр, спектакль нимә тураһында - ошо һәм башҡа нәмәләр хаҡында спектаклдең ҡуйыусы режиссеры Эдуард Шахов менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**

**Эдуард Зөфәр улы, белеүебеҙсә, Салауат театры һеҙгә сит түгел. Режиссерлыҡ карьераһын да ошонда башлағанһығыҙ түгелме?**

- Тап шулай, Салауат театры миңә бик яҡын. Диплом эшемде, Мольерҙың пьесаһы буйынса "Ҡарун" спектаклен, ошонда ҡуйҙым. Институтты тамамлағандан һуң дүрт йыл Ырымбурҙа эшләнем. 2003 - 2005 йылдарҙа Салауат театрында баш режиссер булдым. "Кавардак Forever" тигән тәүге спектаклем бик шәп килеп сыҡты һәм тәнҡтиселәр уны юғары баһаланы. Ошо спектакль өсөн Өфөләге фестивалдә иң яҡшыһы тип танылдыҡ, Мәскәүҙәге фестивалдә лә ыңғай фекерҙәр ишеттек. Шуны ла билдәләп үтергә кәрәк, был фестиваль театр тарихында илебеҙҙең баш ҡалаһындағы тәүге гастролебеҙ булды.

**Яңы премьера нимә тураһында?**

- Спектакль Башҡортостандың халыҡ артисы Фәтих Ҡолһариндың апрель айында билдәләнәсәк матур юбилейына арнала. Александр Вампиловтың пьесаһы ике ҡыҫҡа пьесанан тора: беренсеһе - "Метранпаж мажаралары", икенсеһе - "Фәрештә менән бер минут". Беҙ беренсеһен һайланыҡ. Пьеса бәләкәй чиновниктың ҙур ҡурҡыуы тураһында. Пьесаның төп геройы Калошин - ҡунаҡхана администраторы, мәртәбәле булып күренергә теләгән ғәҙәти ябай кеше. Мәскәүҙән командировкаға килеп, ул эшләгән ҡунаҡханала туҡталған Потапов әфәнде менән уның араһында ыҙғыш сыға һәм администратор ҡунаҡты үпкәләтә. Уға кемдер теге кешенең метранпаж, йәғни ҙур кеше булыуын әйтә. Ә ул метранпаждың кем икәнлеген белмәй, быны ул ҙур начальник тип уйлай һәм урынынан ҡолаҡ ҡағыуынан ҡурҡа. Кем ул метранпаж, артабанғы ваҡиғалар ниндәй боролош ала - серҙе асып бөтөрмәйек. Тамашасы быға үҙе төшөнөр. Төп темаһы, әлбиттә, намыҫлы, кешелекле булып ҡала белеү. Үрҙә әйтеп үтелгәнсә, төп роль администратор Калошин юбиляр Фәтих Ҡолһаринға бирелгән. Был роль уның артист талантын асыуға бик тап килә.

**Оҙаҡ йылдар үткәндән һуң Салауат театрына кире килеп спектакль ҡуйырға ниәт иткәнһегеҙ. Был коллективты нисек ҡылыҡһырлай алаһығыҙ?**

- Салауат театры, һис шикһеҙ, республикалағы иң уңышлы, үҫешеүсән театрҙарҙың береһе. Уларҙың ижади мөмкинлеге ҙур. Дөрөҫ, мин эшләгән ваҡыттағы артистар хәҙер хаҡлы ялдалар инде. Иң өлкәндәрҙән Гөлсәсәк һәм Яҡуп Шәриповтар ҡалды. Йәш артистарҙың уйнағанын ҡарайым да, уларҙың киләсәге өмөтлө, тигән фекергә киләм, һәләтлеләр, яҡшы уйнайҙар. Уларға өлкән ағай-апайҙарынан өйрәнәһе лә өйрәнәһе әле. Шулай булырға тейеш тә. Был бит - быуындар күсәгилешлеге.

**Динә ҒӘЛИЕВА.**

*✓ Туризмға ҙур иғтибар бүленә республикала. Башҡа төбәктәрҙән дә туристарҙы йәлеп итеү өсөн, ысынлап та, уңайлыҡтар булдырылырға тейеш, әммә уларҙың Башҡортостан тәбиғәтенә зыян килтермәүе мөһим.*

ИНТЕРНЕТТАН



# ГҮЗӘЛ ЗАТҠА ҠӘҺҮӘ

■ Тромб барлыҡҡа килеү организмда холестерин юғары булыу менән бәйле. Табип-диетолог Марина Макишина белдереүенсә, юғары холестерин һөҙөмтәһендә ҡан тамырҙары һығылмалылығы юғала һәм был атеросклерозға килтерә. Яйлап уға тромбтар өҫтәлә. Былар булмаһын өсөн омега-3 майҙарына бай булған балыҡ, әйтәйек, скумбрия, сельд ашарға кәрәк. Бынан тыш, кивилағы С витамины ла тамырҙарҙы һаҡларға ярҙам итә. Диетолог әйтеүенсә, йәштәрҙә тромбоз насар ғәҙәттәр менән дуҫ булыуҙан килә. Мәҫәлән, һимереү ҡан тамырҙарын ҡыҫа, аяҡтар шешенә. Бындай кешеләргә даими рәүештә анализ биреп торорға кәрәк, ти табип. Быға тиклем тромбоз етерлек һыу эсмәү менән бәйле тиҙәр ине.

■ Көнөнә 2-3 сынаяҡ ҡәһүә эсеү ҡатын-ҡыҙҙар өсөн файҙалы. Белгестәр раҫлауынса, был йәш көйөнсә ҡалырға, бит тиреһен матур килеш һаҡларға ярҙам итә икән. Һынауҙарҙа 60 мең кеше ҡатнашҡан һәм көн һайын 400 мл ҡәһүә эсеүселәр араһында тире яман шеше осрамай. Тағы бер һынауҙарҙа ҡатнашыусы 84 мең гүзәл зат розацеа менән яфаланған. Улар көн һайын ҡәһүә эсеп, ошо сиренән ҡотолған. Ғалимдар билдәләүенсә, сәй, ҡара шоколад кеүек кофеинға бай башҡа эсемлектәр бындай файҙа бирмәгән. Ҡәһүәләге антиоксиданттар ультрафиолеттың насар тәьҫиренән һаҡланырға ярҙам итә.

■ Ҡысҡырып китап уҡыу хәтерҙе һаҡлай, ти ғалимдар. Был осраҡта текст хәтерҙә лә оҙағыраҡ һаҡлана. Экспериментта 95 кеше ҡатнашҡан. Улар тексты хәтерҙә ҡалдырыуҙың 4 ысулын үҙендә һынап ҡараған. Кемдер үҙ-аллы, кемдер ҡысҡырып уҡыған, берәүҙәр яҙманан, берәүҙәр икенсе кешенең ҡысҡырып уҡығанын тыңлаған. Һөҙөмтәлә, үҙең ҡысҡырып уҡығанда хәтерҙә ҡалдырыу яҡшыраҡ булып сыҡҡан. Ғалимдар быны шулай аңлата: ҡысҡырып уҡыған саҡта баш мейеһендә бер юлы бер нисә система эшләй - һүҙҙе үҙең уҡыһаң, ҡысҡырып әйтһәң, ул оҙайлы хәтерҙә сағыуыраҡ һаҡлана. Бигерәк тә өлкән йәштәге кешеләр өсөн был файҙалы. Хатта башватҡыстар сисеү ҙә бындай тәьҫиргә өлгәшергә мөмкинлек бирмәй икән.

■ Сеченов университетының Йәмәғәт сәләмәтлеген өйрәнеү үҙәге рәсәйҙәрҙең яртыһында артыҡ ауырлыҡ күҙәтелә, тип белдерә. Тикшеренеүҙәрҙә 2150 кеше ҡатнашҡан, респонденттарға уртаса - 45 йәш. 52 процент кешең ауырлығы тейешенән артыҡ, уларҙың 22 процентында һимеҙлек асыҡланған. Бөтөн донъяла был һан - 13 процент. Статистикаға ярашлы, айына килеме 20 мең булған граждандар төркөмөндә артыҡ ауырлыҡтары булғандар 30 процент һәм был категориялағы 30 процент кешелә һимеҙлек күҙәтелә. Шул уҡ ваҡытта, халыҡ үҙен физик йәһәттән ярайһы әүҙем иҫәпләй. 55 проценты аҙнаһына бер нисә тапҡыр спорт менән шөғөлләнә, 74 проценты спорт залына һирәгерәк йөрөй. Әммә ниндәйҙер ауырыу менән, мәҫәлән, диабет менән ауырыусылар араһында физик күнекмә яһаусылар 8 процент ҡына. Тап ауырыу кешеләр өсөн физик әүҙемлек күберәк кәрәк, шул саҡта ғына уларҙың хәле күпкә яҡшыраҡ буласаҡ.

БАШҠОРТОСТАНЫМ!

# ЗЫЯН КИЛТЕРМӘЙ ГЕНӘ...

## матурлыҡҡа һоҡланһын ҡунаҡтар!

**Республикабыҙ Рәсәй составындағы иң матур, алдынғы төбәктәрҙең береһе. Уның хаҡында күп һөйләргә һәм яҙырға була. Бөгөнгө яҙмамда ҡайһы бер күҙәтеүҙәрем менән бүлешеп үткем килә.**



Учалы ҡалаһында яһалма япмалы, һәр миҙгелдә лә эшләйәсәк сноуборд трассаһы асылыуы һәр яҡлап маҡтауға лайыҡ. Урындағылар ғына түгел, ә республиканың төрлө төбәгенән, сит өлкәләрҙән дә сноуборд спортын яратыусылар ҙа был трассала күпләп киләсәгенә шик юҡ. Төбәктәге бындай үҙгәрештәр туризмды үҫтереүгә килтерәсәк, тимәк, урындағы бюджет та тулыланасаҡ. Әйткәндәй, бындай йыл әйләнәһенә эшләгән трасса Рәсәйҙә өс кенә урында бар - Мәскәү өлкәһенең Красногорск ҡалаһында, Эльбруста һәм Учалыла. Ғорурланырлыҡ!

Шулай уҡ ошо көндәрҙә беҙ һәр йәй ҙур кинәнес менән ял иткән Нөгөш һыуһаҡлағысында ике саңғы маршруты асылды. Береһе 2,5, икенсеһе 1,5 саҡрымға һуҙылған трассалар буйлап йөрөп тә килдек. Был төбәктең хозур тәбиғәте тураһында күп тыңлағансы, барып бер тапҡыр үҙ күҙең менән күрергә кәрәк. Шуға күрә һәр кемде ҡышҡы Нөгөш буйлап сәйәхәткә саҡырам. Үкенмәйәсәкһегеҙ!

Туризмға ҙур иғтибар бүленә республикала. Башҡа төбәктәрҙән дә туристарҙы йәлеп итеү өсөн, ысынлап та, уңайлыҡтар булдырылырға тейеш, иң мөһиме, уларҙың Башҡортостан тәбиғәтенә зыян килтермәүе һәм һәр үҙгәрештең урындағы халыҡ менән килешеп эшләнеүе. Торатау - туристарҙың яратҡан урындарының береһе. Уның тирәләй хәҙер туризм өлкәһе өсөн мөһим эштәр башҡарыла. Быйыл тау янында тағы ла алты тирмәнән торған этнокомплекс барлыҡҡа килеүе күҙ уңында тотола, шулай уҡ Маҡар ауылы янындағы шарлауыҡ тирәләй ҙә байтаҡ эштәр башҡарыласаҡ, тип белдерә туризм министрлығы. Был эштә иң мөһиме - сама белеү, туристар хаҡында ғына уйлап, урындағы халыҡтың мәнфәғәте зыян күрмәһен.

Мин Башҡортостандың күп районларында булдым. Һәр төбәк үҙенсәлекле, матур. Ләкин ни өсөндөр туризм хаҡында һүҙ барғанда күптәрҙең күҙ алдына Белорет, Бөрйән, Күгәрсен, Әбйәлил, Салауат һәм башҡа бер нисә район килә. Ә башҡа төбәктәр ни өсөн үҙҙәренең күренекле урындары тураһында киң йәмәғәтселеккә һөйләмәй, күрһәтмәй, реклама эштәрен һүлпән алып бара. Дүртөйлө тарафтарында булғанда Ағиҙел ярында ултырған ташландыҡ йортто күрҙек. Урындағылар был йорттоң 19 быуатҡа ҡараған мәҙәни мираҫ объекты булыуы тураһында әйттеләр. Сауҙагәр Василий Зубилов төҙөткән йорт. "Эх, төҙөкләндереп, эргә-тирәһен матурайтҡанда ниндәй шәп туристик объект", тип уйлаған инек һәм ағымдағы йылдың ғинуарында был эштәрҙең башланыуы тураһында ишеттек. Төбәк башлығы белдереүенсә, яңы майҙанда сәнғәт практикаһы үҙәге, музей һәм сувенир магазиндары эшләйәсәк, күмәк саралар ойоштороласаҡ, концерттар уҙғарыу өсөн амфитеатр менән сәхнә төҙөләсәк. Ошондай тарихи урындар Башҡортостанда бик күп, уларҙың һәр ҡайһыһы бындай үҙгәрештәргә хоҡуҡлы. Республика етәкселегенең был тарафҡа ҙур иғтибар бүлеүе бик мәслихәт.

**Арсен ХӨСНУЛЛИН.**
**Иглин районы.**

КЕМ АЛЫҠ?

# ИҢ ШӘП БҮЛӘК - КИТАП!




**Былтырғы йылдың икенсе яртыһында "Киске Өфө" гәзитенә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан түбәндәге уҡыусыларыбыҙ ошо матур китаптарға лайыҡ булды.**

• **Әбйәлил районы** Асҡар ауылынан Дамир Еникеев, Таштуй ауылынан Әхийәр Изебаев, **Күгәрсен районы** Үргә Сирбай ауылынан Азат Фәхретдинов, Мораҡ ауылынан М. Сәлмәнов, **Баймаҡ районы** Иҫке Сибай ауылынан Ф. Байбулов, Ғафури районы Ҡауарҙы ауылынан Роберт Бәширов **- "Башҡорт ырыуҙары";**

• **Нефтекама ҡалаһынан** Дим Әхмәҙиев, **Ишембай ҡалаһынан** Рафаэль Мөхәмәтов, **Хәйбулла районы** Түбәнге Исмаҡ ауылынан Ханнан Мөхәмәтйәров, **Учалы районы** Озерный ауылынан Нәҡиб Әйүпов, **Баймаҡ районы** Мерәҫ ауылынан Әхәт Әсмәндийәров, Ярат ауылынан Әнүәр Мырҙабулатов, **Әбйәлил районы** Асҡар ауылынан Самат Хәйруллин, **Күгәрсен районы** Икенсе Төҡәт ауылынан Рәшит Байғөбәков **- Әмир Әминевтың "Хикәйәләр";**

• **Баймаҡ районы** Ишмырҙа ауылынан Әҡлимә Әфләтунова, **Мәләүез районы** Смак ауылынан Сания Смакова, **Хәйбулла районы** Уфимский ауылынан Ғилминур Такалова **- "Медицина Пророка";**

• **Федоровка районы** Иҫке Сытырман ауылынан Миңсәрә Иҫәнғолова, **Баймаҡ районы** Мерәҫ ауылынан Мәғрифә Кейекбаева, Темәс ауылынан Сания Әминева, **Салауат районы** Тирмән ауылынан Фәүзиә Шакирова, **Көйөргәҙе районы** Көйөргәҙе ауылынан Йәмил Чурин, **Шишмә районы** Иҫке Хәжәт ауылынан Тәнзилә Сафина, **Белорет районы** Сосновка ауылынан Фәнилә Мусина, **Әбйәлил районы** Аслай ауылынан Фәниә Мансурова **- Ризаитдин Фәхретдиновтың "Нәсихәттәр";**

• **Баймаҡ районы** Йәрмөхәмәт ауылынан Зөлфиә Мөъминова, **Учалы районы** Мәскәү ауылынан Флүрә Садыкова **- Зөлфиә Ханнанованың "Мин - башҡорт, тип танышығыҙ";**

• **Күгәрсен районы** Сәйетҡол ауылынан Диана Шәйәхмәтова, **Баймаҡ районы** Гәҙелбай ауылынан Зөлфирә Хәсәнова **- Зөлфиә Ханнанованың "Таш-ҡатын";**

• **Күгәрсен районы** Кинйәбай ауылынан Тәнзилә Ҡотлобаева, **Баймаҡ районы** Ишмырҙа ауылынан Радик Солтанғолов **- Салауат Әбүзәровтың "Ғәмәл дәфтәре";**

• **Баймаҡ районы** Әхмәр ауылынан Рәмил Мәтинов, **Әбйәлил районы** Асҡар ауылынан Я. Йәноҙаҡов **- Рәсүл Байгилдиндың "Һай, түрәкәйгенәһе";**

• **Ғафури районы** Ибраһим ауылынан Фәниә Ғәлиуллина, **Дыуан районы** Иҫке Хәлил ауылынан Рәшиҙә Ғәйнуллина **- "Бәйғәмбәрҙең йөҙөк ҡашы Мөхәммәт Мостафа".**

• Шулай итеп, был акциябыҙ быйылғы миҙгел өсөн дә үҙ көсөндә икәнен белеп ҡуйығыҙ. Квитанцияға ҡушып, гәзитебеҙ тураһындағы фекерегеҙ теркәлгән ҡош телендәй генә хатығыҙҙы ла һалһағыҙ, бик шат булырбыҙ. Шулай уҡ квитанцияларығыҙҙа адрестар тулы, аңлайышлы итеп тултырылһын ине, тигән теләк тә бар.

**Иҫкәрмә.** Бүләкләнеүселәр китаптарҙы үҙҙәренең почтальондары аша алыр. Кемдәргә китаптар барып етмәгән, улар Өфөләге балалары, туғандары, таныштары аша **Революцион урамы, 167/1** адресы буйынса урынлашҡан редакциябыҙҙан алдыра ала.

• Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **kiskeufa@mail.ru**.

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

Аһ-Аһ!

# ҮРМӘ ГӨЛДӨ...

## үрмә һин сәстәреңә



**Баҡсалары булған кешеләргә быйылғы миҙгелдә айырыуса иғтибарлы булырға кәңәш ителә. Дөрөҫөрәге, сәскә үҫтерергә яратыусыларға. РФ Хөкүмәте составында наркотик һәм психотроп матдәләр булған һәм мотлаҡ контролдә булырға тейеш үҫемлектәр исемлегенә тағы ла бер нисә сәскәне индерҙе.**

Был исемлек, мәҫәлән, гармала, өс төҫлө ипомея, ҡалҡан кеүек япраҡлы турбина тип аталған сәскәләр менән тулыланған. Турбина тигәне инде беҙҙә осрамай тиерлек, уны икенсе төрлө Раштыуа сыбығы тип тә йөрөтәләр. Гармаланың да артыҡ матурлығы юҡ, шуға ла уның менән артыҡ ҡыҙыҡһыныусыны күргән юҡ. Ә бына ипомея һәр баҡсала тиерлек үҫә. Уның ипомея икәнен күптәр белмәй ҙә әле. Йәйен өй һалҡын, стеналар матур булһын тип ултыртҡан зәңгәр, күк, алһыу сәскәле үрмә гөлдәр тап ошо ипомея үҙе инде. Әрһеҙ, орлоғон бер төртһәң, аҙаҡтан йолҡоп бөтөрлөк тә түгел.

Йырҙарҙа йырланған үрмә гөлдәрҙе ялтыу һинән хәҙер енәйәтсе яһай ала. Яңы ҡанун буйынса баҡсаңда 10 төпкә тиклем ипомея үҫтерәһең икән, административ яуаплылыҡҡа тарттырыуҙары ихтимал. Хатта үҫемлектең үҫеү стадияһының ниндәй осоронда булыуына ла ҡарамаясаҡтар: саҡ орлоҡтан шытып сыҡҡанмы, әллә гөрләп сәскә атып ултырамы - айырма юҡ. Ундан артып китһә, енәйәт эше ҡуҙғатыла ала. Дәүләт Думаһы депутаты Никита Чаплин әйтеүенсә, был осраҡта физик шәхестәрҙе 15 тәүлеккә ҡулға алыу йәки 5 мең һум күләмендә штраф билдәләнгән. Ойошма был сәскәне үҫтерә икән, штраф күләме - 300 мең һум. Үрмә гөлдөң иҫәбе 100-ҙән ашып киткәндә, енәйәт эше тип ҡараласаҡ. Адвокат Георгий Абшилаев билдәләүенсә, күпләп үҫтергән осраҡта уларҙағы наркотик матдәләр ҙә күберәк тип табыласаҡ һәм был ҙур күләмдә наркотик һәм психотроп матдә һаҡлауға тинләнеп, РФ Енәйәт кодексының 228, 228 1, 229 һәм 229 1 статьялары сиктәрендә ҡараласаҡ. Мәҫәлән, 228-се статья буйынса ҙур күләмдә наркотик матдә һаҡлаған өсөн 10 йылдан 15 йылға тиклем иректән мәхрүм итеү ҡарала. Шулай уҡ был үрмә гөлдө рәхсәтһеҙ һаҡлау ҙа тыйыла. 3 грамм ғына орлоҡ табыла ҡалһа, енәйәт эше ҡуҙғатыу өсөн сәбәп булып тора.

Әлбиттә, ботаника, үҫемлекселек буйынса фән эшмәкәрҙәре был тыйылған үҫемлектәр исемлеген яңыртып тороуға кире ҡарай. Мәҫәлән, баҡсасылар әле лә матурлығына арбалып, күп кенә ағыулы үҫемлектәр үҫтерә, акониттар, дафна, дельфиниум, рододендрондар, фитолакка шуларҙың рәтендә. Был үҫемлектәр медицинала, дарыуҙар яһауҙа ла әүҙем ҡулланыла. Уларҙың ағыулы икәнен барыһы ла белә, әммә бер кем дә уны ул тәғәйенләнешендә ҡулланмай бит. Сәскә - ул, тәү сиратта, матурлыҡ, күҙ йәме, күңел өсөн.

Был мәсьәләгә ҡағылышлы тағы ла бер мәңгелек һорау - кем ҡанундың үтәлешен тикшереп, хөкөмдар ролен башҡарасаҡ? Теоретик яҡтан, быны башҡарып сығыуы ла ҡатмарлы буласаҡ. Әммә депутаттар быны ла үҙенсә хәл иткән инде. Никита Чаплин әйтеүенсә, баҡсапарк хужалыҡтары, районҙарҙың торлаҡ-эксплуатация ойошмалары, муниципалитет хакимиәттәре, коммерция булмаған баҡсасылыҡ ширҡәттәре идаралыҡтары үҙенә ошондай өҫтәмә яуаплылыҡ алыуы ихтимал. Уларға шул уҡ үрмә гөлдө үҫтергән кешене асыҡлап, уны яуаплылыҡҡа тарттырыуҙа булышлыҡ итеү вазифаһын йөкмәтмәкселәр. Власть вәкилдәре күршеләрҙең дә бер-береһен контролдә тотоу һәм, нисек кенә ҡулайһыҙ яңғырамаһын, ошаҡлашыу йәһәтенән әүҙемлек күрһәтеүенә лә иҫәп тотоуын йәшермәй. Шулай ҙа рәсми рәүештә был вәкәләт полиция хеҙмәткәрҙәренә, аныҡыраҡ әйткәндә, наркотиктарҙың законһыҙ әйләнеше менән көрәшеүсе бүлексәгә һалынасаҡ. Участка инспекторҙары ла күҙәтеү алып барыр, моғайын, тиғән фекерҙә депутаттар. Шулай уҡ орлоҡ һатып алғанда уҡ баҡсасының исем-шәрифе кәрәкле органдарға барып әләгеүе бар. Был бигерәк тә интернет аша һатып алырға күнеккәндәргә ҡағыла.

Нисек кенә булмаһын, ҡанун ҡабул ителгән, яза формалары билдәләнгән. Шуға ла был миҙгелдең төп үҙенсәлеге - баҡсаны быға тиклем йылдар дауамында үҫкән үрмә гөлдәрҙән таҙартыу булмаҡсы. Беҙҙең төбәктә лә бик киң таралған зәңгәр, алһыу сәскәле был үрмә гөл шул рәүешле хәҙер йырҙарҙа һәм күңелдәребеҙҙә генә һаҡланыр инде.

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

МЕДИЦИНА ХӘБӘРЕ

# РОБОТ ОПЕРАЦИЯ ЯҺАЙ



**Өфөлә БДМУ клиникаһының роботлаштырылған хирургияһы үҙәгендә уникаль операция яһалды.**

Хирургтар робот ярҙамында тубыҡ быуынына протез ҡуйҙы. Видео буйынса эш барышын юғары уҡыу йорто студенттары күҙәтте. Медицина учреждениеһы матбуғат хеҙмәте мәғлүмәттәре буйынса, операцияны алтмыш йәштән өлкән ҡатынға яһағандар. Тубыҡҡа операция бер сәғәт кенә дауам итә. Элек хирургтар һөйәкте титан ярҙамында ҡырҡып алған, ә бөгөн барыһы ла лазер ярҙамында башҡарыла. "Операция бүлмәһендә хирург бер үҙе эшләй, уға ассистенттар бригадаһы кәрәкмәй, барыһын да робот эшләй. Бында тубыма алып ташлана, ә яра таҙа ҡала. Имплант теүәл урынлаштырыла, әҙләгөү хәүефе бик аҙ", - тип һөйләне БДМУ-ның травматология һәм ортопедия кафедраһы мөдире, медицина фәндәре докторы, профессор Булат Минасов.

Ординаторҙар роботлаштырылған операция барышын тура эфирҙа ҡараны, ҡыҙыҡһындырған һорауҙарын бирҙе. "Быға тиклем Башҡортостандағы коллегалар менән Мәскәүҙә эшләнек. Хәҙер беҙ бында яңы шарттарҙа техника ҡуйырға ярҙам итәбеҙ. Роботтың өҫтөнлөгө - операцияны интернет аша ла эшләргә мөмкин", - тип билдәләне Сеченов университетының травматология, ортопедия һәм быуын ауырыуҙары кафедраһы профессоры Андрей Грицюк.

БДМУ клиникаһының роботлаштырылған хирургияһы үҙәге бөгөн Волга буйы федераль округында берҙән-бер иҫәпләнә. Белгестәр әйтеүенсә, ул йылдан-йыл үҫешә. Заманса технологиялар ярҙамында эш тәжрибәһе лә йәйә һалына. "Робот ярҙамында операция яһау технологияһы артабан да үҫешәсәк. Донъяның күп илдәрендә бындай роботтар тәүлек әйләнәһенә эшләй. Хирург арыырға, ауырырға мөмкин, робот кеше факторын һәм хаталарын тулыһынса юҡҡа сығара. Урология, онкология, ҡан тамырҙары хирургияһындағы кеүек, робот хирургияһы тиҙҙән ортопедияла төп хирургияға әйләнәсәк", - тип аңлатма бирҙе БДМУ ректоры, профессор Валентин Павлов.

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

### Теләктәрҙе нисек һайларға?

Быуна һеҙҙең теләгәнегеҙҙе һайлау ваҡыты ла етте. Ахырҙа, һеҙ Ерҙә бары тик ялда икәнлегегеҙҙе онотмағыҙ, шулай булғас, еңдәрегеҙҙе һыҙғанығыҙ һәм эшкә тотоноғоҙ!

Был тормошта йәшәүегеҙҙең асылын һәм үҙ ролегеҙҙе аңлау, юл табыу өсөн: "Бөтә донъя байлығы ҡулымда булһа, нимә эшләр инем?" - тигән һорау ярҙам итер. Теләктәрегеҙҙе тормошҡа ашырырға өйрәнһәгеҙ, процесс та тиҙәйер.

Ҡайһы бер философик мәктәптәр, мәҫәлән, буддистар, теләктәрҙе баҫтырырға йәки уларҙан арынырға тәҡдим итә. Был юл дөрөҫ һәм һәҙөмтәле, сөнки ул бәхетте тойорға ярҙам итә. Әммә, минеңсә, бик ауыр. Мин был юлды ҡабул итеп булмай тимәйем, бары тик ул миңә оҡшамай.

Башҡа юлдар ҙа бар. Тауға менеүҙең бер нисә ысулын беләм. Әгәр остаздарығыҙҙан кемдер ожмахҡа илткән уның юлы - берҙән-бере тиһә, 180 градусҡа боролоғоҙ ҙа, артҡа ҡарамайынса ҡасығыҙ.

Ысын остаздар юлдарҙың бик күп булыуын белдерә. Улар һеҙгә үҙҙәре барған юлды күрһәтеп, башҡа юлдарҙы һынап ҡарап, үҙегеҙгә тап килгәнен һайларға тәҡдим итер.

Шәхсән үҙемә теләктәр юлы оҡшай. Минеңсә, теләкте тулыһынса тормошҡа ашырыуға ҡарағанда, унан азат булыу ысулы иң яҡшыһы. Теләкте баҫтырыу уның көсәйеүенә килтерә һәм ул иртәме-һунмы барыбер ҡабат килеп сыға һәм бик күп зыян килтерә.

Аҡса ла бәхет гаранты түгел. Әммә быны шулай икәнен белеү өсөн күпмелер ваҡыт аҡсаға күмелеп йәшәп ҡарарға кәрәк. Иҫегеҙҙә тотоғоҙ: нимәнәләр үҙегеҙ кисермәй тороп, уның асылын бер ваҡытта ла аңлай алмайһығыҙ.

Ҙур йорттар, матур машиналар һәм донъя буйлап сәйәхәт итеү һеҙҙе бәхетле итмәй. Быға инаныу өсөн ошо теләкте ҡәнәғәтләндерергә кәрәк.

Абсолют бәхеткә эйә булыу өсөн уны теләнә ҡайҙа табырға була икәнен белергә кәрәк, ләкин ҡапма-ҡаршылыҡлы донъяла түгел. Шуға күрә, һеҙгә бөрөү ҙә бәхеткә табан йүгерергә һәм теләктәрегеҙҙе мөмкин тиклем тиҙерәк ҡәнәғәтләндерергә тырышырға кәрәк, тип әйтмәҫ.

Минеңсә, был юл Аллаһты тиҙерәк табырға ярҙам итә. Хәҙер уйлап ҡарағыҙ: теләктәр кемдән килә - Аллаһтанмы, һеҙҙәнме, әллә унан һәм һеҙҙән бер үк ваҡыттамы?

### Тулҡындармы йәки өлөшсәләрме?

Заманса физика башланғысы менән танышыу һеҙгә үҙ уйҙарығыҙ һәм хис-тойғоларығыҙҙың хужаһы булырға кәрәклеген аңлатыр. Әйткәндәй, әгәр мәктәптә физика фәнен яратмаһағыҙ, сәбәбе, күрәһең, уҡытыусының материалды күңелһеҙ итеп биреүенәндер. Минеңсә, физика - ул, һис һүҙһеҙ, иң һоҡланғыс фәндәрҙең береһе. Раҫлау өсөн бер генә миҫал килтерәм: һәр элементар өлөшсәнең бер үк ваҡытта үҙен есем һәм энергетик тулҡын кеүек тотоуын беләһегеҙҙер. Икенсе төрлө әйткәндә, электрон - ул ҡаты (гәмәлдә ул тиклем ҡаты ла түгел) шар ғына түгел, ә радиотулҡын кеүек үк тулҡын да. Бер үк ваҡытта! Беҙ ҙә, бильярд шарҙары һәм радиотулҡын кеүек өлөшсәләрҙән торғанлыҡтан, бер үк ваҡытта есем дә, энергия тулҡыны ла булабыҙ. Йәғни, әле ошо юлдарҙы уҡып ултыраһығыҙ, ә шул уҡ ваҡытта һеҙҙең йөғонто тотош Йыһанға тарала.

**Пьер МОРАНСИ.**



## 4 МАРТА ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20 "Горячий лед". Тинькофф Кубок Первого канала по фигурному катанию-2024. [0+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.50, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
17.15 Премьера. "Давай поженимся!".
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Союз спасения". [16+]
0.10 Д/ф Премьера. "Александр Проханов. Исповедь". [18+]
1.05, 1.50, 2.35, 3.05, 3.20, 4.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.35, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.25, 15.00 Выборы Президента России-2024. Дебаты.
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Анна Медиум". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.10 Т/с "Тайны следствия". [12+]
3.50 "Наши". [12+]
4.43 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 11.00, 12.30, 14.00, 16.00 Выборы-2024. [12+]**
**10.05 "Башҡорт йыры" представляет… [12+]**
**10.45 Ҡурай даны. [12+]**
**11.05 Новости недели (на рус.яз). [12+]**
**11.45, 13.45, 17.45, 18.15, 4.00 Интервью. [12+]**
**12.00 Новости СВО (на рус. яз). [12+]**
**12.15, 3.45 Письма солдатам. [12+]**
**12.35 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 1.00 Новости (на баш. яз).**
**14.05 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 "Этно-краса". [6+]**
**15.30 Преград. Net. [6+]**
**15.45 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**16.10 Дебаты-2024. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Специальный репортаж. [12+]**
**18.45 Хоккей. "Трактор" (Челябинск) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ. Плей-офф. 1/4 конференции "Восток". Матч 3.**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Золотой фонд Башкирского телевидения. [12+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**1.30 Спектакль "Прекрасная возлюбленная". [12+]**
**4.15, 5.15 Телецентр. [12+]**
**6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**

## 5 МАРТА ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
7.55 Выборы-2024.
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Д/с Премьера. Проект "Цивилизации". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Союз спасения". [16+]
0.10 "Мой друг Жванецкий". К 90-летию со дня рождения Михаила Жванецкого. [12+]
1.10, 1.55, 2.40, 3.05, 3.25, 4.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.35, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.25, 15.00 Выборы Президента России-2024. Дебаты.
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Анна Медиум". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.10 Т/с "Тайны следствия". [12+]
3.50 Т/с "Морозова". [16+]
4.42 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 11.00, 12.30, 14.00, 16.00 Выборы-2024. [12+]**
**10.05 "Ете егет". [12+]**
**10.45 Новости СВО (на баш. яз).**
**11.05, 23.00 Автограф. [12+]**
**11.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 13.45, 18.15, 4.00 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.35, 3.00 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.05 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Детей много не бывает. [6+]**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.10 Дебаты-2024. [12+]**
**17.00, 22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00, 23.45 Письма солдатам. [12+]**
**19.00, 20.30, 4.15, 5.15 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**1.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**1.30 Спектакль "Наш одуванчик". [12+]**

## 6 МАРТА СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.20, 14.15, 19.00 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Т/с Премьера. "Союз спасения". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Церемония закрытия Всемирного фестиваля молодёжи-2024. [0+]
23.45 "Мой друг Жванецкий". К 90-летию со дня рождения Михаила Жванецкого. [12+]
0.45, 1.30, 2.15, 3.05, 3.55 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.35, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.25 Выборы Президента России-2024. Дебаты.
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
15.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Анна Медиум". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.10 Т/с "Тайны следствия". [12+]
3.50 Т/с "Морозова". [16+]
4.44 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 11.00, 12.30, 14.00, 16.00 Выборы-2024. [12+]**
**10.05, 23.45 Письма солдатам. [12+]**
**10.45, 13.45, 17.45, 4.00 Интервью. [12+]**
**11.05 "Дорога к храму". [6+]**
**11.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15 Патриот РФ. [12+]**
**12.35 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.05 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 "КультУра". [6+]**
**15.30 МузКәрәҙ. [6+]**
**16.10 Дебаты-2024. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Тормош. [12+]**
**18.45 Хоккей. "Трактор" (Челябинск) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ. Плей-офф. 1/4 конференции "Восток". Матч 4.**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ представляет…" [12+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**1.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**1.30 Спектакль "Тамарис". [12+]**
**3.45 История одного села. [12+]**
**4.15, 5.15 Телецентр. [12+]**
**6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**

## 7 МАРТА ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
7.55 Выборы-2024.
9.00, 16.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 17.10 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
15.10 Премьера. "Давай поженимся!".
16.15 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости.
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". Праздничный выпуск. [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Союз спасения". [16+]
22.45 "Большая игра". [16+]
23.35 "Мой друг Жванецкий". К 90-летию со дня рождения Михаила Жванецкого. [12+]
0.30, 1.15, 2.00, 2.45, 3.30, 4.15, 4.50 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.35, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.25 Выборы Президента России-2024. Дебаты.
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
15.00 Д/ф "Женщины. Война". [16+]
16.30 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Анна Медиум". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.10 Т/с "Тайны следствия". [12+]
3.50 Х/ф "Укрощение свекрови". [12+]
5.44 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 11.00, 14.00, 16.00 Выборы-2024. [12+]**
**10.05, 17.15 Письма солдатам. [12+]**
**10.45 История одного села. [12+]**
**11.05 Моя планета - Башкортостан.**
**11.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 13.45, 17.00, 4.00 Интервью. [12+]**
**12.00 Торжественное собрание и праздничный концерт, посвященные Международному женскому дню. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 1.00 Новости (на баш. яз).**
**14.05 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Сулпылар. [6+]**
**15.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**16.10 Дебаты-2024. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**19.00, 20.30, 4.15, 5.15 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**22.00, 3.30 Республика LIVE #дома.**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**1.30 Спектакль "Оставайтесь солнцем". [12+]**

## 8 МАРТА ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Х/ф "Моя любовь". [12+]
6.40 Х/ф "Самая обаятельная и привлекательная". [12+]
8.10 Х/ф "Весна на Заречной улице". Кино в цвете. [12+]
10.15 Х/ф "Девчата". [0+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/ф Премьера. "Империя: Екатерина II". [12+]
16.30 Премьера. "Признание в любви". Праздничный концерт в Кремле. [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.20 "Признание в любви". Праздничный концерт в Кремле. [12+]
19.00 Х/ф "Любовь и голуби". [12+]
21.00 "Время".
21.35 "Голос". Новый сезон. [12+]
23.20 Х/ф "9 1/2 недель". [18+]
1.35, 2.20, 3.05, 3.50, 4.35, 5.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.45 Х/ф "Укрощение свекрови. Продолжение". [12+]
9.20 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
12.00 "О чём поют 8 Марта".
14.00 Х/ф "Служебный роман". [12+]
17.50 "Привет, Андрей!". Специальный праздничный выпуск. [12+]
21.00 "Ну-ка, все вместе! Хором!". Финал. [12+]
0.45 Х/ф "Лёд". [12+]
2.45 Х/ф "Любовь без размера". [16+]
4.16 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "С праздником, милые женщины!" [12+]**
**7.30, 19.00, 22.30, 5.00 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**8.15 Үткән ғүмер. [12+]**
**8.45 Портрет. [12+]**
**9.30 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**10.00 "Йома". [6+]**
**10.30 Детский концерт. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 "В женской поэзии - душа народа". [12+]**
**13.30 Күстәнәс. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.30, 5.30 Республика LIVE #дома.**
**16.00, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**16.15 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Трактор" (Челябинск). КХЛ. Плей-офф. 1/4 конференции "Восток". Матч 5.**
**19.30 Честно говоря. [12+]**
**20.15 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.30 Ап-асыҡ. [12+]**
**21.15 Письма солдатам. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Своих не бросаем. [12+]**
**22.15 Территория женского счастья. [12+]**
**23.00 Концерт Рима Хасанова. [12+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Асылъяр". [12+]**
**6.00 История одного села. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 9 МАРТА СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф Премьера. "Звезда по имени Гагарин". К 90-летию первого космонавта Земли. [12+]
11.05 Д/ф Премьера. "Человек, сошедший с небес". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Премьера. "Поехали!". [12+]
13.10 Д/ф "Империя: Анна Иоанновна". [12+]
14.20 Д/ф "Империя: Елизавета Петровна". [12+]
16.25 Премьера. "Эксклюзив" с Дмитрием Борисовым. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Сегодня вечером". [16+]
19.55 Русский вызов. Турнир сильнейших фигуристов. Битва поколений в уникальном соревновании за звание лучших на льду. Прямой эфир.
21.00 "Время".
21.35 Русский вызов. Турнир сильнейших фигуристов. Прямой эфир.
23.10 Д/ф "Звезда по имени Гагарин". К 90-летию первого космонавта Земли. [12+]
0.10 Д/ф "Человек, сошедший с небес". [12+]
1.05, 1.50, 2.35, 3.20, 4.05, 4.50, 5.25 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

4.20 Х/ф "Третья попытка". [12+]
6.00 Х/ф "Праздник разбитых сердец". [12+]
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.40 Х/ф "Служебный роман". [12+]
14.35 "Измайловский парк". Большой юмористический концерт. [16+]
17.50 Большой концерт к 50-летию Юрия Шатунова.
21.00 Х/ф "Синдром отложенного счастья". [16+]
22.55 Х/ф "Лёд-2". [6+]
1.15 Х/ф "Женщины". [12+]
4.30 Х/ф "Нинкина любовь". [12+]
6.12 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**8.00 "Бай". [12+]**
**8.30 "Ете егет". [12+]**
**9.15 Письма солдатам. [12+]**
**9.30 Новости СВО (на рус. яз). [12+]**
**9.45 Своих не бросаем. [12+]**
**10.00 Атайсал. [6+]**
**10.30 Елкән. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 "Ат уйнатып. Битва командиров". [6+]**
**11.45 Бирешмә, йырла! [6+]**
**12.15 Алтын тирмә. [12+]**
**13.00 Автограф. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.30, 4.45 Колесо времени. [12+]**
**16.30, 19.00 "Башҡорт йыры" представляет… [12+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**20.30 "Байыҡ-2024". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00, 3.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.45 Концерт Рустама Гизатуллина. [12+]**
**2.00 Спектакль "Эх,невеста, невестушка!…" [12+]**
**4.00 Новости недели (на баш. яз). [12+]**
**5.45 Аль-Фатиха. [6+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 10 МАРТА ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10, 0.00, 0.45, 1.30, 2.15, 3.00, 3.45, 4.30 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 "Часовой". [12+]
8.10 "Здоровье". [16+]
9.20 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
9.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.15 Премьера. "Играем свадьбу!". [12+]
11.05 "Жизнь других". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Премьера. "Повара на колесах". [12+]
13.10 "Видели видео?" [0+]
14.30 Х/ф "Благословите женщину". [12+]
16.50 Д/ф Премьера. "Берёзка". Красота по-русски". [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Лучше всех!" Новый сезон. [0+]
21.00 "Время".
23.00 Т/с Премьера. "Абрек". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

6.15, 2.00 Х/ф "Соседи по разводу". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
12.00 Большие перемены.
13.00 Х/ф "Южный циклон". [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.05 Д/ф "Женщины. Война". [16+]
3.44 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Йома". [6+]**
**8.15 Тормош. [12+]**
**8.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.00 Орнамент. [12+]**
**9.15 Письма солдатам. [12+]**
**9.30 Новости СВО (на баш. яз).**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 Атайсал. [6+]**
**10.30 Книга сказок. [6+]**
**10.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Сулпылар. [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз).**
**13.15 Д/ф "АтАй ҡыҙы". [6+]**
**14.00 Честно говоря. [12+]**
**15.00 Историческая среда. [12+]**
**15.30, 3.15 Дорога к храму. [6+]**
**16.00 Вестник "Газпромтрансгаз Уфа".**
**16.15 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Трактор" (Челябинск). КХЛ. Плей-офф. 1/4 конференции "Восток". Матч 6.**
**19.00 Патриот РФ. [12+]**
**19.15 Әлләсе… [6+]**
**20.00 Автограф. [12+]**
**20.30 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30, 3.45 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Концерт Айгуль Сагинбаевой. [12+]**
**1.30 Спектакль "Гайфи агай, женись давай!" [12+]**
**4.30 Счастливый час. [12+]**
**5.30 История одного села. [12+]**
**5.45 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1445 һижри йыл.*

| Март (Шәғбан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 4 (23) дүшәмбе | 6:18 | 7:59 | 13:30 | 17:01 | 18:56 | 20:39 |
| 5 (24) шишәмбе | 6:15 | 7:57 | 13:30 | 17:02 | 18:58 | 20:41 |
| 6 (25) шаршамбы | 6:12 | 7:54 | 13:30 | 17:04 | 19:00 | 20:43 |
| 7 (26) кесе йома | 6:10 | 7:52 | 13:30 | 17:06 | 19:02 | 20:46 |
| 8 (27) йома | 6:07 | 7:49 | 13:30 | 17:08 | 19:04 | 20:48 |
| 9 (28) шәмбе | 6:04 | 7:47 | 13:30 | 17:09 | 19:06 | 20:50 |
| 10 (29) йәкшәмбе | 6:02 | 7:44 | 13:30 | 17:11 | 19:08 | 20:52 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✔ *Йыл һайын ер йөҙөндәге 30 мең төр тере организмды юғалтабыҙ. Донъялағы 100 мең һөтимәр, ҡош һәм балыҡ ташланған полиэтилен муҡсаларҙан зыян күрә.*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 3 МАРТ - БӨТӘ ДОНЪЯ ҠЫРАҒАЙ ТӘБИҒӘТ КӨНӨ

**Сағыштырмаса яңыраҡ, 2013 йылдан билдәләнә башлаған был байрам көнө планетабыҙ өсөн үтә лә әһәмиәтлеләрҙән - ул кешелеккә тәбиғәттең ҡәҙерле булыуын хәтерләтә.**

Кеше Ер байлыҡтары менән иркен ҡуллана һәм эшмәкәрлеге тәбиғәткә ниндәй кире йоғонто яһауы тураһында һирәк уйлана. Хайуандарға йәшертен һунар итеү, күпләп балыҡ аулау, урмандарҙы аяуһыҙ ҡырҡыу, күңел асыу өсөн һунарсылыҡ итеү бер нисә тиҫтә йылда бөтә тереклекте юҡҡа сығарырға мөмкин. Бына ошолар хаҡында уйланһындар тип, Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы тарафынан Ҡырағай тәбиғәт көнө булдырыла. Уны 1973 йылда ҡабул ителгән Юғалыу сигендәге ҡырағай хайуандар менән законһыҙ сауҙа итеү тураһындағы конвенцияның 40 йыллығына арнайҙар. Әйткәндәй, законһыҙ сауҙа аша йыл һайын 17 миллиард килем алына икән. Шул уҡ ваҡытта Амур юлбарыҫы, ирбис (белый барс), аҡ айыу, леопардтар, балыҡтарҙың күп төрҙәре юҡҡа сығыу хәлендә.

Илебеҙҙә Рәсәй географик йәмғиәте территориялағы флора һәм фаунаны һаҡлауға йүнәлтелгән проекттарға ярҙам итә, ғилми тикшеренеүҙәр, айырыуса һаҡланған биләмәләрҙе үҫтереү, халыҡтың экологик белемен арттырыу кеүек йүнәлештәрҙә эшләй. Рәсәй Федерацияһының Ҡыҙыл китабына бөгөн 741 объект индерелгән. Ә Башҡортостан Республикаһының Ҡыҙыл Китабы өс томдан тора, уға һирәк осраған һәм юғалып барған көпшәле үҫемлектәрҙең 232 төрө, 60 ылымыҡ, мүк һымаҡтар, бәшмәк һәм лишай, 112 хайуан, 7 балыҡ, 6 һөйрәлеүсе, 49 ҡош индерелгән. Улар араһында ярғанаттарҙың күп төрҙәре, ҡоштарҙан ҡыҙыл боғалы ҡарағаҙ, ышылдаҡ аҡҡош, ҡыҙыл өйрәк, ҡәлмәргән, һунағара, ялан һары, шоңҡар, бөркөт, ялан торомтайы тигәндәре һәм башҡалары, ҡуңыҙҙар, күбәләктәр, бал ҡорттары, тәлмәрйендәр, йыландар, һөлөк, һаҙ ташбаҡаһы, әрем, күрән, дөйә һеңере, кәмәяпраҡ, ҡылған, һуғандың төрлөһө һәм тағы күп үҫемлектәр бар. Башватҡыста уларҙың ҡайһы берҙәрен табырһығыҙ.

Йыл һайын ер йөҙөндәге 30 мең төр тере организмды юғалтабыҙ. Донъялағы 100 мең һөтимәр, ҡош һәм балыҡ ташланған полиэтилен муҡсаларҙан зыян күрә. Шуға быйылғы 3 марттан алып тыуған еребеҙҙең хозур тәбиғәтен һаҡлау тураһында йышыраҡ уйланһаҡ, уны һәр төрлө зыяндан ҡурсалаһаҡ, бысратыуҙан тартынһаҡ ине. Был эште ер ҡарҙан әрселгәс тә күренгән сүп-сарҙы йыйыуҙан, артабан тирә-яғыбыҙҙы ҡыйламауҙан башлайыҡ!




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**7-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Әйтем. Биишева. Әйбер. Тышау. Андыҙ. Реактор. Талхина. Алдар. Манара. Әүрәү. Әй. Бығау. Дини. Әрем. Шамбы. Әрней. Йәше. Тәкмәс. Койка. Ниғмәти. Ҡышлау.

**Вертикаль буйынса:** Теләктәш. Тәлмәрйен. Иҙеүкәй. Бина. Тырнаҡ. Урама. Әсирә. Әрмәк. Маймыл. Бикбай. Дөйә. Әсғәт. Миагра. Ир. Ара. Бишек. Лапы. Арҡа. Ҙур. Уҡыһа.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**5 март "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури). 16+
**6 март "Ете быуын. Йәштәр"** спектакль-вербатим. 16+
**7 март "Йәш йөрәктәр"** (Ф. Бурнаш). 12+
**8 март "Еҙнәкәй"** (Х. Ибраһимов), музыкаль комедия. 18.00 12+
**"Ҡыҙ урлау"** (М. Кәрим), комедия. 18.00 12+
**9 март "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия. 18.00 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**6 март "Сказание о семи батырах"** (Д. Йосопов), фэнтези. 12.00 6+
**Премьера! "Аҡһаҡ"** (М. Ғиләжев), драма. 12+
**7 март "Хужа Насретдин мажаралары"** (Л. Соловьев, В. Виткович), комедия. 12+
**10 март "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажаралар. 11.00 0+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**7 март "Шесть чувств"** (Н. Беззубова, А. Верхоземский), спектакль-синестезия. 18.00 6+
**8 март "Аленький цветочек"** (С. Чураева). 12.00, 15.00 6+
**9 март "Етем төлкө"** (О. Штырляева). 14.00 0+
**"Терем-теремок"** (Д. Гараева, В. Щербакова). 12.00, 15.00 0+
**10 март "Приключения доктора Айболита и его друзей"** (Д. Гараева). 12.00, 15.00 0 +

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**4 март Артур Туҡтаевтың** концерты. 6+
**6 март "Любовь - весенняя страна"** концерт. 6+
**7 март "D/C BAND"** рок-концерт. 6+
**8 март "Женщина! Бесконечность?"** концерт. 18.00 6+
**9 март Гөлшат Ғирфанованың** концерты. 18.00 6+
**10 март "Старинная музыка нового времени".** 18.00 6+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**4 март "Легенда о воине дракона"** (Р. Ғәйнуллин), әкиәт. 10.00 0+
**5 март "Ғүмерҙең бер мәле"** (Н. Мусин, З. Бураҡаева инсц.), фантастик төш. 16+
**6 март "Встрел. Метель"** (А. Пушкин әҫәрҙәре буйынса). 14.00 12+
**7 март "Йөрәк майым..."** (Б. Абдуразаков), мелодрама. 16+
**9 март "Сказка о царе Салтане"** (А. Пушкин), әкиәт. 13.00 0+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**5-6 март Премьера! "Тапшырылмаған хаттар"** (С. Әбдрәхимова), мелодрама. 16+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**7-8 март Премьера! "Диләфрүзгә дүрт кейәү"** (Т. Миңнуллин), комедия. 12+
**9 март "Минең ҡатынымдың исеме Морис"** (Р. Шарт), комедия. 18.00 16+
**10 март "СкперЗаяц"** (И. Чернышев), әкиәт. 12.00 0+

## БР Милли музейы

**7 март "Яҙғы маҡтау һүҙе"** акция. 11.00 6+
**"Башҡорт ҡатынының тормошо"** күргәҙмә. 11.00 6+
**9 март** Музей буйлап экскурсия. 15.00 6+
**10 март "Ковроделкин"** оҫталыҡ дәресе. 6+

СӘХНӘЛӘ...

# ТАНЫШ БУЛЫҒЫҘ - ӘЛМӘНДӘР БАБАЙ

**Ерҙәге тере заттар араһында тик Әҙәм балаһы ғына гүмеренең мәңге түгеллеген алдан белеп йәшәй. Фажиғәме был? Матди донъя артынан ҡыуып, эгоһын ауыҙлыҡлай алмағандары ауырыраҡтыр, бәлки. Рухилыҡты беренсел һанап, әхирәткә әҙерләнеп йәшәгән диндарҙар еңелерәк кисерәләр. Бушҡамы ни, мәңге йәшәгәндәй булып, донъяны теүәллә, иртән үлгәндәй булып, намаҙға бас, тимәйҙәр.**



Ике олатайымды ла иҫләмәйем. Дөрөҫөрәге, улар мин был донъяға килгәнсе баҡыйлыҡҡа күскән. Ә быуна ике өләсәйемдең дә, әхирәткә әҙерләнеп, бикле тотҡан һандыҡтарына, үлгәс, ерләгәндә кәрәк буласаҡ төрлө әйберҙәр йыйғандары хәтеремдә. Атеистик тәғлимәттәр илебеҙҙе баҫып алған совет осоронда өләсәйҙәрем намаҙын да уҡыны, ураҙа ла тотто, әруахтарға аяттарын бағышланы. Бала саҡ аҡылыма, бәлки, уларҙың был ҡылыҡтары ҡыҙыҡ тойолғандыр, әле килеп, өләсәйҙәремдең был ғәмәлдәре үтә лә тәрән мәғәнәле булғанын аңлайым.

Туфан Миңнуллиндың "Әлдермештән Әлмәндәр" исемле лирик комедияһы буйынса ҡуйылған спектаклде ҡарағанда тереләй күрә алмаған олатайҙарымды күҙ алдына килтерҙем. Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театрының баш режиссеры Денис Нурғәлин был үлемһеҙ әҫәрҙе, фантасмагория жанрын ҡулланып, ауыл кешеһе өсөн ғәҙәти булған ваҡиғаларҙы тәрән юмор аша, шаярыу ҡатыш бик тәрән фәлсәфәгә төрөп бирә. Спектакль барышында фани донъяның төш кенә булыуын, ә бына баҡыйлыҡҡа эйә булыуҙың ана шул төшөндә хазина табыуға бәрәбәр икәнен аңлайһың. Шуға ла был спектакль артыҡ моңайтмай, ҡайғыртмай ғына йәшәү көсө бирә, бөгөнгө болғаныш заманда оптимистик рух һәм ыңғай энергия уята.

"Бөгөн Сибай дәүләт драма театры "Әлдермештән Әлмәндәр" спектакле менән Байым мәҙәниәт йортонда сығыш яһаны. Шундай шәп спектакль. Үлем менән йәшәү тураһында барҙы, берсә көлдөрөп, берсә илатып, тамашасыларҙы таң ҡалдырҙылар. Ғөмүмән, бик ҡыҙыҡ, тәрән мәғәнәле спектакль. Сибай театр коллективына ҙур рәхмәт, киләсәктә уңыштар һеҙгә, тағы ла матур-матур спектаклдәр көтөп ҡалабыҙ", - тип яҙа бер тамашасыбыҙ.

Былдай комментарийҙар бихисап, уларҙың һаны тағы ла артыр, тип өмөт итәбеҙ. Сөнки сибайҙар Архангел, Ҡырмыҫҡалы, Иглин райондарына һәм баш ҡалабыҙға гастролгә сыға. Халҡыбыҙҙың йән йылыһын, шаянлығын, уйын-көлкөгә бай, мөхәббәтле, намыҫлы, ғорур булыуын һәм башҡа бик күп ыңғай сифаттарын үҙенә туплаған Әлмәндәр бабай менән осрашыуға рәхим итегеҙ, яратҡан тамашасыларыбыҙ.

**Радик ӨМӨТҠУЖИН,**
**театрҙың әҙәби-драматургия бүлеге етәксеһе.**

КӨЙӘРМӘН

# ӘЛЕГӘ ӨМӨТЛӘНӘБЕҘ...

**"Салауат Юлаев" хоккей командаһы КХЛ-дың плей-офф уйындарында Гагарин кубогы өсөн көс һынашасаҡ. Чемпионат һөҙөмтәләре буйынса өфөләр Көнсығыш конференцияһында өсөнсө урынға сыҡты.**

Үҙ конференцияһында баһалар иҫәбе буйынса "Салауат Юлаев" "Авангард" (Омск) менән "Металлург" (Магнитогорск) командаларынан ғына артта ҡалды. Аҙаҡҡы 5 уйындың 4-әүһендә еңелеүҙәре лә көйәрмәндәрҙе артыҡ бошондорманы, сөнки өфөләрҙең был Кубок өсөн көрәшергә дәрте лә, дарманы ла булыуын алдағы уйындар яҡшы күрһәткәйне. Шулай ҙа белгестәр өсөнсө урынға ҡарағанда икенсе урын яҡшыраҡ булыр ине, тигән фекер ҙә белдерә, ул саҡта юлаевсылар "Лада" (Хабаровск) менән уйынды башлар ине. Әммә оҙайлы юл бер командаға ла отошло түгел, был йәһәттән "Трактор" менән уйын күпкә ҡулайлыраҡ буласаҡ.

Иҫегеҙҙә булһа, был команда менән юлаевсылар аҙаҡҡы тапҡыр 2022 йылдың яҙында, Көнсығыш ярымфиналында осрашып, уларҙан еңелгәйне. Кубокка өмөт иткән генә ваҡытта бөтөн легионерҙарҙың сәйәси хәл арҡаһында Рәсәйҙән ҡайтып китеүен көйәрмәндәр ҙә ауыр кисерҙе ул саҡта. Быйылғы чемпионатта иһә "Салауат Юлаев" "Тракторҙы" бар 4 матчта ла еңде. Етмәһә, был ваҡыт эсендә Өфө командаһы ныҡ ғына, яҡшы уйынсылар ҙа туплап өлгөрҙө. Канада легионерҙары Мелош менән Ливо ла, ышаныс коэффициенты буйынса чемпионтта иң яҡшы голкипер тигән дан алған Александр Самонов та Кубок алыуға өмөттө нығыта. Аҙаҡҡы уйындарҙа Александр Шаровтың да командала үҙенең ныҡлы урынын табыуын күрһәтә.

Гагарин кубогын уйнатыу быйылдан яңыса башҡарыла. Икенсе раундтан башлап Көнбайыш һәм Көнсығыш конференциялары командалары үҙ-ара уйнай башлаясаҡ. Быға үҙенең мөмкинлектәрен яҡшы күрһәтә алған "Салауат Юлаев"тың иң мөһим этапта ла юғалып ҡалмаҫына ышанысыбыҙ ҙур.

ТЕЛҺӨЙӘР

# САПАҠ ТЕЛЛЕ

**Күберәк белгән һайын, бер нәмә лә белмәүемде аңлайым. Телебеҙ байлығын һүҙлектәрҙән байҡағанда, боронғо фәйләсуфтың әйткәне иҫкә төшә. Хәйер, белмәү ғәйеп түгел, белергә теләмәү ғәйеп тигәне лә аҡыл. Шул аҡылға эйәреп, онотола биргән, әммә китаптар юғалыуҙан һаҡлаған һүҙҙәрҙе иҫкә төшөрәбеҙ, хәтерҙә нығытабыҙ. Һәм артабан әүҙем ҡулланабыҙ.**

**Сап.** "Сап" һүҙе "дан, билдәлелек" тигәнде белдерә. *Мәҫәлән: Хеҙмәт менән сап яулау. Сапҡа лайыҡ булыу.*

**Саплы.** Тамырынан аңлашылыуынса, "данлы, билдәле" мәғәнәһенә эйә һүҙ. *Миҫал: Саплы замандаш. Атҡарған эшең бик саплы.*

**Сапатай.** Диалектҡа хас һүҙ, "әҙәпһеҙ" тигән мәғәнәлә йөрөй. *Миҫалға: Сапатай ҡылыҡ. Сапатай хәбәрҙе һөйләмә.*

**Сапсаҡ.** Бер бөтөн ағас киҫәгенән эшләнгән тәпән була сапсаҡ. *Миҫал өсөн: Тәрән сапсаҡ. Оҫта сапсаҡҡа семәр һалған.*

**Сапаҡ.** "Мөләйем, алсаҡ" мәғәнәһендә ҡулланылған һүҙ. Сапаҡ ҡыҙ. Сапаҡ мөғәмәлә итеү.

**Сапаҡ телле.** "Йор һүҙле" , "үткер телле" тип һөйләр урынға, "сапаҡ телле" тиеү ҙә тура килә. Сапаҡ телле сығыш яһаусы.

**Шулай итеп, күрешкәндә - сапаҡ йөҙлө, һүҙ тотҡанда сапаҡ телле булайыҡ, дуҫтар.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**
**(Дауамы. Башы 45-се һанда).**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# САҠЫРЫЛМАҒАН ҠУНАҠ...

## юнмаған таяҡ

Дөрөҫлөк үҙе генә еңеү яулай алмаған, ярҙамға ялғанды саҡырған.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Күп дарыуҙарҙың файҙаһыҙ икәнен аңлаған врач ҡына ысын врач.

**(Бенджамин Франклин).**

Хаталарҙан азат кеше тормошта бер нәмәгә лә өлгәшмәйәсәк.

**(Иоганн Гете).**

Алданыуҙан ҡурҡып йәшәгәндәр бер ваҡытта ла хәҡиҡәткә юлды таба алмаҫ.

**(Е. Кайоран).**

Үҙ һүҙеңдә тороуҙың иң яҡшы ысулы... ул һүҙҙе бөтөнләй бирмәү.

**(Наполеон Бонапарт).**

Донъяны үҙгәртеп була... кешенең үҙен үҙгәртеп кенә.

**(Фарсы мәҡәле).**

Күптәр тормошта үҙ эсенә бикләнеп, бары тик үҙ үҙе менән генә була һәм... бик тиҙ яуыҙға әйләнә.

**(Фридрих Ницше).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ауылда бер туған ике ағай-эне йәшәгән. Бер-береһенә ни тиклем генә оҡшаш булмаһындар, уларҙы айырып торған нәмәләр ҙә булған. Мәҫәлән, кесеһенең тормошта барыһы ла көйлө барған, икенсеһен, өлкәнен, гел генә уңышһыҙлыҡтар һағалап торған.**

**Бер саҡ энеһе ағаһына килә һәм уның бар эшләгәне уңышһыҙ килеп сыҡҡанын аңлап, шундай һорау бирә:**

**- Ағай, һин үҙеңдең тормошоңдо үҙгәртеү, эштәреңде көйләү өсөн ниҙәр ҡылаһың?**

**- Көн-төн эшләйем дә эшләйем...- тип яуаплай ағай кеше.**

**- Ә хеҙмәтең һиңә шатлыҡ килтерәме һуң?**

**- Юҡ, шатлыҡ килтермәй һәм һәр эште башҡарыу ауырға тура килә, - ти ағай кеше башын түбән эйеп.**

**- Ә һин үҙ эшеңдән шатлыҡ эҙлә, - ти энеһе. - Хәтереңдәме, бала саҡта һин балсыҡтан төрлө һындар яһарға ярата инең? Шунан башла ла: ихатаңды балсыҡ һындар менән биҙә...**

**Бер йылдан ағай менән эне тағы осрашалар. Энеһе ағаһынан:**

**- Хеҙмәтеңдә шатлыҡ табырға өйрәндеңме, ағай?**

**- Эйе, шатлыҡ бар ҙа ул, әммә барыбер уңышһыҙлыҡ һағалап тик тора...- тип яуаплай ағаһы.**

**- Эш эшләгәндә нимә тураһында уйлайһың һуң?**

**- Ана шул миңә һөжүм итәсәк уңышһыҙлыҡтар тураһында инде... - ти ағай кеше... "**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 24008

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәррирләт:**
Ләйсән ВӘЛИЕВА,
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "Полиграфия" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (3476) 35-31-02. (453261, БР, Салауат ҡалаһы, Ленин ур., 5/11).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
29 февраль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы — **ПР905**

Тиражы - 2750
Заказ - 111455

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.